ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

17-23 октябрь (карасай) 2020

№42 (928)

kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

**Мөхтәрәм уҡыусыларыбыҙ! 2021 йылдың тәүге яртыһы өсөн гәзит-журналдарға яҙылыу бара. ПР905 индекслы "Киске Өфө" аҙналығына республиканың һәр район-ҡалаһында, ауылында 725 һум 58 тингә яҙылып, дуҫлыҡты дауам итергә саҡырабыҙ. Бер-беребеҙгә кәрәкле, бер-беребеҙгә терәкле фекер уртаҡлашыусылар булайыҡ!**

БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

**Табиптар ҙа...**

кеше аңларлыҡ телдә һөйләшһен!



3

**Милләттәштәргә...**

башҡортса китаптар ебәрелде



5

**Башҡорт ҡатын-ҡыҙының кейеме -**



төрки халыҡтарының кейемдәре араһында иң йөкмәткелеһе

8-9

**Юғары мәҙәниәт кенә...**

рухи тамырҙарға һут бирә



12-13

**ТВ-программа** 14

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## Быйылғы иген уңышы республикала һуңғы бер нисә йылдағы иң юғарыларҙың береһе булырға вәғәҙәләй. Иген игеүҙә, шулай уҡ башҡа төрлө ауыл хужалығы ризыҡтары етештереүҙә, һис шикһеҙ, фермерҙарыбыҙҙың да өлөшө бар. Ғөмүмән, фермерҙар бөгөн нисек йәшәй, эшләй, ниндәй проблемалар менән күрәшергә тура килә?

***Ғүмәр ИҪӘНОВ, Мәләүез районы "Нурлы" крәҫтиән-фермер хужалығы етәксеһе:*** Республикала етештерелгән ауыл хужалығы тауарҙарының дүрттән бер өлөшө шәхси фермерҙар өлөшөнә тура килә. Улар, һис шикһеҙ, бөгөн ауыл хужалығы тармағында баһалап бөткөһөҙ ҙур урын биләй. Быны бер нисек тә инҡар итеп булмай. Дәүләт бураһын тултырыу йәһәтенән дә, ауыл ерендә эш урындары булдырыу тәңгәлендә лә, тораҡ пунктты төҙөкләндереүҙә, бағыусылыҡ ярҙамы күрһәтеүҙә фермерҙарҙың өлөшө ифрат ҙур.

Быйыл беҙҙең районда йыл ҡоро килде. Игенгә иң кәрәкле ваҡытта ике ай ямғыр яуманы ла ҡуйҙы. Яҙғы дымлы мәлдә сәселгән орлоҡ шытып өлгөрҙө, әммә оҙайлы көндәргә һуҙылған эҫелек шытымды ныҡ көйрәтте. Билдәле инде, уңыш өмөтөбөҙҙө тейешенсә аҡламаны. Дөрөҫөрәге, уның ҡап яртыһын юғалттыҡ. Ваҡытында яуын күргән райондарҙа крәҫтиән-фермер һәм ауыл хужалыҡтары ана нисек рекордлы уңыш алды быйыл! Улар өсөн беҙ ҙә ҡыуанабыҙ, сөнки республика, илебеҙ буралары буш булмаясаҡ. Ситтән һатып алмаясаҡбыҙ, тимәк, халыҡты ауыл хужалығы ризыҡтары менән үҙебеҙ тәьмин итәсәкбеҙ.

"Нурлы" фермер хужалығының 2 мең гектарға яҡын сәсеүлеге бар. Шуның 300-өн - күп йыллыҡ, 600-өн - бойҙай, арпа, арыш, һоло, 100 гектарын көнбағыш баҫыуы биләй. Ҡалғанында бер йыллыҡ үлән сәсәбеҙ. Әле көнбағышҡа төшмәгәнбеҙ, унан яҡшы ғына уңышҡа, атап әйткәндә, гектарынан 15 центнер алырға өмөтләнәбеҙ. Был культураның беҙҙең аграрийҙарҙы йыл һайын һөйөндөрөүен билдәләмәү мөмкин түгел.

Игенде баҙарға сығарып һатып, аҡса эшләү мөмкинлеге булмаһа ла, ҡыш сығырға үҙебеҙгә етәсәк. Быйылғы йылда уныһына ла шөкөр итәбеҙ. Орлоҡҡа ла, фуражға ла тейешле күләмдә запас һалып ҡуйҙыҡ. Пай ерҙәре өсөн халыҡҡа ла етте, ҡыш сығырлыҡ мал аҙығы ла тупланды. Барына риза булып, юрғаныбыҙға ҡарап аяғыбыҙҙы һуҙырға тура килә инде быйыл. Шуныһы бик мөһим: ваҡытында һалым түләү, хеҙмәтсәндәргә эш хаҡын биреү мөмкинлегебеҙ ҙә бар. Шуға ла, әлегә үҙ еребеҙҙә ныҡлы һәм ғорур баҫып торабыҙ, тип ышаныслы әйтә алам. Бында, әлбиттә, эшһөйәр коллективындың роле баһалап бөткөһөҙ. Беҙҙә тырыш, тыуған төйәген һәм ер эшен яратҡан кешеләр генә тупланған. Хужалыҡта тир түккәндәргә ҡулдан килгәнсә ярҙам да итәбеҙ. Бесәнен сабып, ихатаһына ташып бирәбеҙ. Төп эшмәкәрлегебеҙҙән тыш, ауылдың социаль мәсьәләләрен, көнүҙәк проблемаларын хәл итеүҙә ҡатнашабыҙ һәм быны төп бурыстарыбыҙҙың береһе, тип иҫәпләйбеҙ. Халыҡ араһында фермерлыҡ эшмәкәрлеген еңел генә тип уйлағандар ҙа юҡ түгел, әлбиттә. Әммә ундайҙар бик һирәк. Быны һәр кем аңлай, миҙгел эшендә теләп ҡатнашырға әҙер булғандар ҙа күп.

Дәүләт ярҙамын тоябыҙ, район хакимиәтенең ауыл хужалығы идаралығы ла ҡурсалап, яҡлап тора. Ғөмүмән, республикала, шул иҫәптән районда крәҫтиән-фермер хужалыҡтарын, ошо тармаҡта эшләгән эшҡыуарҙарҙы үҫтереү маҡсатында байтаҡ эш башҡарыла. Был өлкәгә яңы фермерҙарҙы ылыҡтырыу өсөн әленән-әле маҡсатлы программалар ҡабул ителә, һәр яҡлап ярҙам күрһәтелә. Шулай уҡ крәҫтиән хужалыҡтарын борсоған мәсьәләләр ҙә юҡ түгел, әлбиттә. Яғыулыҡ-майлау материалдары, минераль ашламалар арзанырaҡ булһа, һис шикһеҙ, яҡшыраҡ булыр ине.

15 йыл эсендә төрлө хәлдәр, ауыр саҡтар ҙа, уңыш йылмайған осорҙар ҙа күп булды. Нисек кенә булһа ла, үҙебеҙ етештергәнде үҙебеҙгә еткереп, көрсөккә батмай ғына, башҡа бик күп фермерҙар кеүек үҫемлекселекте лә, малсылыҡты ла бергә һәүетемсә генә алып барабыҙ. "Бер көн артта ҡалһаң, биш көн йүгерерһең", тигән әйтем бар халҡыбыҙҙа. Игенселек - миҙгел эше, шуға күрә яҡшы уңыш алайым тиһәң, яҙҙың, йәйҙең генә түгел, көҙөн дә, ҡышын да бер көн дә ҡул ҡаушырып ултырырға ярамай. Киләһе йылғы уңышҡа нигеҙ быйыл уҡ һалына, шуға көндөң, сәғәттең ҡәҙерен белеп, файҙалы эш менән үткәрергә кәрәклеген коллективтағы һәр кем яҡшы аңлай һәм көсөнән килгәнсә үҙ өлөшөн индерә.

**(Дауамы 2-се биттә).**

ҺАЙ-ҺАЙ-ҺАЙ!




# АСҠЫНДА...

## Шәжәрә байрамы гөрләне

Республика көнө асҡындар өсөн үтә лә иҫтәлекле үтте. Беренсенән, ул райондың - 90, Асҡын ауылының 390 йыллығы менән тап килде. Икенсенән, был көндә Асҡын районында республика Шәжәрә байрамы гөрләне, милләттәштәрҙе, ҡан-ҡәрҙәштәрҙе осраштырҙы, берләштерҙе, быуындар сылбырын нығытты, тарихи тамырҙарҙы тергеҙҙе. Илһөйәрлек, толерантлыҡ һәм татыулыҡҡа әйҙәгән сара быуындар араһындағы бәйләнеште нығытты.

Һеҙ һүрәттә күргән Асҡын 2-се урта мәктәбенең VI класс уҡыусыһы **Камилла Сәлмәнова** ла ата-әсәһе ярҙамында туғандарҙы барлап, нәҫел тамырҙарын 11-се быуынға тиклем өйрәнеп, Шәжәрә ағасын төҙөгән. Байрамда ул атай-әсәйҙәре, туғандары уратыуында дәртләнеп ошо нәҫел ағасы менән таныштырҙы. Билдәләүенсә, был эш менән тырыш ҡыҙ башланғыс кластарҙа уҡығанда уҡ, Алмаз ағаһына эйәреп, ҡыҙыҡһына башлай. Йәш быуындың шулай ҙур дәрт менән шәжәрәләрен өйрәнеүе, ата-олатайҙарының фотографияларын, нәҫелендәге боронғо ҡомартҡыларҙы, хәтирәләрҙе барлауы әйтеп бөткөһөҙ баһаға эйә. Бында быуындар күсәгилешлеге, нәҫел намыҫын һаҡлау нигеҙе, атай-олатайҙарға ҡарата ихтирам сағыла.

**(Теманың дауамын 6-сы, 12-13-сө биттәрҙә уҡығыҙ).**

12+

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## Быйылғы иген уңышы республикала һуңғы бер нисә йылдағы иң юғарыларҙың береһе булырға вәғәҙәләй. Иген игеүҙә, шулай уҡ башҡа төрлө ауыл хужалығы ризыҡтары етештереүҙә, һис шикһеҙ, фермерҙарыбыҙҙың да өлөшө бар. Ғөмүмән, фермерҙар бөгөн нисек йәшәй, эшләй, ниндәй проблемалар менән көрәшергә тура килә?

**(Башы 1-се биттә).**

***Илдус СӘЛИХОВ, Күгәрсен районы:*** Быйылғы яҙғы-йәйге миҙгел үҫемлекселек менән шөғөлләнгән фермерҙарға күңелһеҙ "сюрприздар"ын йәлләмәне. Тәүҙә коронавирус пандемияһына бәйле үҙизоляция шарттарында эшләргә өйрәнергә тура килде. Май айының башҡа йылдарға ҡарағанда һыуығыраҡ килеүе, аҙаҡ йәй буйына көндәрҙең аномаль эҫе тороуы, ямғыр яумауы - быларҙың барыһы ла буласаҡ уңышҡа кире йоғонто яһаны. Минең дә уңыш былтырғыға ҡарағанда күпкә ҡайтыш. Үткән йыл гектарынан уртаса 18 центнер сыҡһа, быйыл, кәмерәк булмаһа, шуның яртыһы тирәһен генә алдым. Үҙем етештергән үҙемә етәсәк, әлбиттә. Пайсыларыма таратыуҙан да ҡаласаҡ, орлоҡҡа ла етерлек кимәлдә һалынды. Әммә, һәр ер эшкәртеүсе кеүек, мин дә мул уңышҡа өмөтләнеп, уны һатып, килем алыу хыялы менән сәскәйнем. Яғыулыҡ-майлау материалдарының, минераль ашламаларҙың йылдан-йыл хаҡы арта. Уларҙың хаҡын ҡайтарыу ҙа - беҙҙең эшмәкәрлектең төп шарты бит.

Һуңғы ваҡытта ҡайһы бер йүнселдәр ер эшкәртеүҙең файҙаһы юҡлығын билдәләй. Әммә малсылыҡ тармағы менән шөғөлләнгәндәр үҫемлекселекте ташлап та ҡуя алмай. Игенселек - минең дә ярҙамсы йүнәлешем. Төп эшем - йылҡысылыҡ. Был өлкәне үҫтереүҙең, һис шикһеҙ, яҡшы перспективалары бар. Иң беренсе, йылҡысылыҡ һәм ҡымыҙ етештереүҙе әҙер милли бренд, тип ҡарайым һәм уларҙы үрсетеү элек-электән халҡыбыҙ иҡтисадының нигеҙе булған, тип иҫәпләйем. Глобалләштереү шарттарында ла уны һаҡлап алып ҡалыу кәрәк. Йылҡысылыҡ - ул борондан ҡалған, халҡыбыҙҙың матди мәҙәниәтенең ҙур өлөшөн тәшкил иткән тармаҡ. Башҡортостан ерҙәре үҙе үк ат үрсетеү өсөн уңайлы бит. Ҡылғанлы далалар, ҡарҙан иң тәү әрселә торған яландар, ҡышын ыжғыр елдәрҙән, ҡарлы бурандан ышыҡланыу өсөн урмандар - йылҡы малын тотоу өсөн быларҙың барыһы ла тәбиғәт тыуҙырған ыңғай шарттар. Тарихтан билдәле булыуынса, атһыҙ башҡорт булмаған, йылҡыһыҙ йәшәмәгәндәр. Иң ярлы һаналған башҡорттоң да 15-ләп аты булған.

Һуңғы йылдарҙа крәҫтиән хужалыҡтары ойоштороп, күпләп



йылҡы тотоусылар артыуы күҙәтелә. Был бик ҡыуаныслы хәл. Әммә башта уҡ ҙур уңышҡа өмөт итеп, тәүге ҡаршылыҡтар осрау менән эшен ташлағандар ҙа юҡ түгел. Фермерлыҡ та, иҡтисадтың башҡа тармағы кеүек, аныҡ маҡсат ҡуйып, алға ҡарап эшләүҙе талап итә.

Ат үрсетеү менән күптән шөғөлләнәм. Эшем бик оҡшай. Ошо дәүерҙә төрлө ҡаршылыҡтар, ауырлыҡтар менән осрашырға ла тура килде. Ике иңгә ҡанат ҡуйған уңышлы миҙгелдәр ҙә, хаталаныуҙар ҙа булды. Уларҙың барыһынан да һабаҡ, тәжрибә алып, яйлап ҡына үҙ юлым менән барам. Үҙем өсөн һығымталар ҙа яһағанмын. Мәҫәлән, беҙҙең магазиндарҙа йылҡы ите аҙыҡтары юҡ тиерлек. Яҡшы сифатлы ҡымыҙ һатып алыуы ла еңелдән түгел бөгөн. Фермерҙар, шәхси хужалыҡтар етештергән ит-һөт йәрминкәләре ойошторолоу, әлбиттә, бик яҡшы күренеш. Мин үҙем уларҙа йыш ҡатнашам тип әйтә алмайым. Дөрөҫөрәге, баҙарҙа, йәрминкәлә һатҡаным юҡ. Ҡулланыусылар өйҙән килеп ала. Ғөмүмән, йылҡысылыҡ продукцияһын һатыу мәсьәләһен, уның баҙарҙа ниндәй һорау менән ҡулланылыуын тикшереү һәм был эште яйға һалыу мөһим.

Киләсәктә ҡымыҙ, ҡаҙы, ит етештереүҙе юлға һалырға ниәтләйем. Һуңғы ике йылда бейә һауыуҙы туҡтатып торорға мәжбүр булдым. Берҙән, ауылда көтөүсе табыу ҡыйын. Ҡымыҙ етештереү өсөн бейәләрҙе айырып көтөргә, өс, иң яҡшыһы, дүрт көтөүсе кәрәк. Эшһеҙ йөрөгән бер нисә замандашыма был эште тәҡдим итеп ҡарағайным, баш тарттылар. Сәбәбе - эш хаҡын ситтә вахтала эшләгәндәр менән сағыштырыуҙа.

Ҡымыҙ етештереү отошло ғына шөғөл. Башҡорттар ғына түгел, башҡа милләт вәкилдәре лә яйлап ҡымыҙҙың төмен, дөрөҫөрәге, шифаһын таный башланы. Туберкулез дауаханаларының был эсемлеккә ихтыяжы ҙур икәнлеге лә билдәле. Шуға күрә, был тармаҡты үҫтерергә теләп, ғаилә малсылыҡ фермаларын үҫтереү буйынса маҡсатлы программала ҡатнашырға уйлағайным, конкурстан үтмәнем. Бөгөнгө заманда бик тә әһәмиәтле тип өмөт иткән проектым эксперт комиссияһының яҡлауын тапманы. Дәүләт тарафынан үҙ эшен асыусыларға һәр яҡлап ярҙам күрһәтелә, тиҙәр, әммә, йәшерен-батырыны юҡ, әлегә уны тоймайым. Ғөмүмән, мин үҙ көсөмә нығыраҡ ышанам. Шуға ла ниндәй генә ҡаршылыҡтар тыумаһын, күңелемде төшөрөргә йыйынмайым, сөнки эшемде яратам.

***Хәлит СӘҒИТОВ, Көйөргәҙе районы:*** Крәҫтиән-фермер хужалыҡтарының аҙыҡ-түлек етештереү ҡеүәте көслө. Улар үҙҙәрен дә, яҡын-тирәлә йәшәгән халыҡты ла сифатлы, үҙ еребеҙҙә етештерелгән, бер ниндәй сит ҡатнашма, ҡушылма һалынмаған ит, һөт аҙыҡтары менән йыл әйләнәһенә тәьмин итә ала. Әммә... Бына шул әммә булмаһа, барыһы ла яҡшы булыр ине.

Беренсенән, бөгөнгө көндә йыйып ҡына алған игенде пайсыларға нисек еткерергә, тип баш ватам. Ҡоролоҡ булды, уңыш йылмайманы, тип, улар алдында булған яуаплылыҡты, бурысты бер кем дә һыҙып ташлай алмай бит. Уларға тейешлене нисек булһа ла бирергә кәрәк, сөнки пайсыларыбыҙ тап ошо буласаҡ игендән бирелә торған үҙ өлөшөнә иҫәп тотоп, мал-тыуар, ҡош-ҡорт көтә. Пай ерҙәре өсөн башҡаларҙан һатып алып түләргә йыйынған фермерҙар бер мин генә түгелдер, тип уйлайым. Шуға күрә агростраховкалау иҫәбенә юғалтыуҙарҙы компенсациялау йүнәлешен тейешенсә үҫтерергә кәрәк. Был йәһәттән эре ауыл хужалығы предприятиелары ниндәйҙер кимәлдә ярҙамға иҫәп тота. Беҙҙең кеүек "бәләкәй" фермерҙарға уны алыу бик үк еңелдән түгел.

Бер нисә йыл элек үткән Крәҫтиән-фермер хужалыҡтары һәм ауыл хужалығы кооперативтары ассоциацияһының республика съезында ауыл хужалығы продукцияһы етештереү өлкәһендә эшләгән эшҡыуарҙар эҙмә-эҙлекле ярҙам аласаҡ, тигәйнеләр. Унда шулай уҡ гранттар биреү, хужалыҡ ихтыяждарын тәьмин итеүҙә, инженерлыҡ инфраструктураһына, ерҙе рәсмиләштереүҙә булышлыҡ итеү тураһында ла әйткәйнеләр. Эйе, дөрөҫ, дәүләт ярҙамын алғандар бар. Тик шуныһы - уны теләгән һәр фермер ала алмай. Тейешле ҡағыҙҙар тултырыу, документтар йыйыу, бизнес-план эшләү генә етмәй, бында ла "ҡоҙа-ҡоҙағыйлыҡ" кәрәк. Лизинг та тәҡдим иттеләр, уны ла алып булманы. Бына шулай, республикала эшләп килгән инвестиция проекттары, дәүләт программаларында ҡатнашыу әлегә беҙгә тәтегәне юҡ.

Крәҫтиән-фермер хужалыҡтарының район, республика, шулай уҡ ил иҡтисадында роле бик ҙур. Быны барыһы ла аңлай торғандыр. Һуңғы йылдарҙағы сәйәси ваҡиғаларға бәйле күп төрлө санкциялар барлыҡҡа килеүе сәбәпле сит тарафтарҙан аҙыҡ-түлек килтерелмәй башлағас, урындағы фермерҙар етештергән ит, һөт аҙыҡтары ҙур ярҙам булды, тип уйлайым. Шулай ҙа "Үҙебеҙҙекен һайла, үҙебеҙҙекен һатып ал" лозунгыһын тулыһынса бойомға ашырыу өсөн байтаҡ проблемаларҙы хәл итәһе бар, тип иҫәпләйем. Мәҫәлән, һөт продукцияһын ғына алайыҡ. Беҙҙең уны тейешле күләмдә етештерә алыу мөмкинлеге бар. Әммә, ҡыҙғанысҡа ҡаршы, беҙҙә барыбер уны һатыу, йыйыу тейешенсә ойошторолмаған. Бесәнлектәрҙең кәмеүе генә түгел, ә һөт аҙыҡтарын урынлаштырырға урын булмауы ла ауыл халҡының шәхси хужалыҡтарында һыйыр малын кәметеүгә килтерҙе. Берҙән, улар һауған һөтөн ҡайҙа тапшырырға белмәй, йыйыусы, эшкәртеүсе юҡ. Икенсенән, бигерәк арзан хаҡҡа алалар. Был да үҙенә күрә халыҡта кире фекер уята. Бәй, шулай булмай, ауылда һыйыр тотҡан кешеләрҙең төп килем сығанағы шул һөт тә баһа. Һөтөн ҡайҙа урынлаштырырға белмәгәндәр яйлап малын кәметеп, йә иһә бөтөнләй бөтөрҙө түгелме ни?

Ит продукцияһына килгәндә иһә, эйе, уны һөткә ҡарағанда һатыу еңелерәк. Экологик яҡтан таҙа, һимертелмәгән ит хәҙер һорау менән файҙалана. Ғөмүмән, минеңсә, фермерҙар етештергән продукцияға яңы ғына иғтибар бирелә башланы. Дөрөҫ туҡланыу яҡлылар, хәләл продукцияға өҫтөнлөк биреүселәр, сәләмәт йәшәү рәүешен һайлағандар, шулай уҡ "Үҙебеҙҙекен һайла, үҙебеҙҙекен һатып ал" девизы менән йәшәгән ысын илһөйәрҙәр урында етештерелгәнде генә һатып ала.

Ауыл хужалығы тауарҙарын һатыу өсөн йәрминкәләр ойоштороу, рекламалау мөһим. Үҙебеҙҙең хәләл көсөбөҙ, әсе тиребеҙ менән тапҡанды уңышлы һатырға өйрәнергә ваҡыт. Шул уҡ ваҡытта намыҫлы, кешеләргә, ҡулланыусыларға ҡарата ғәҙел булыу мөһим. Ғөмүмән, нимәгә тотонһаң да ныҡлы уйларға кәрәк. Күптәр фермер еңел генә йәшәй тип уйлай. Бөтә нәмәне планлаштырып эшләһәң дә, баҙарҙағы хәлде белһәң дә, хаталанырға ла тура килгәне булды. Һәр ваҡыт белемеңде камиллаштырып, төҙәтеп торорға кәрәк. Уңышҡа өлгәшеүҙең әҙер рецебы юҡ, уны үҙеңә табыу, эҙләү мөһим.

**Ләйсән СӘЛИХОВА**
**яҙып алды.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Башҡортостанда 16 октябргә коронавирус йоҡтороуҙың 73 яңы осрағы асыҡланған һәм уларҙың дөйөм һаны 9609-ға еткән. Ошо уҡ осорҙа 47 кеше коронавирустан вафат булған. Республикала тәүлек эсендә дауахананан тыш пневмония менән сирләүҙең 198 осрағы асыҡланған. Алдан хәбәр ителгәнсә, быйыл туғыҙ айҙа Башҡортостанда 1505 кеше дауахананан тыш пневмониянан үлгән. Был мәғлүмәттәр республиканың Һаулыҡ һаҡлау министрлығынан алынды. Уҙған йылда республикала ғинуарҙан октябргә тиклем пневмониянан үлгәндәр күпкә аҙыраҡ - 860.

✓"Барлыҡ сараларҙы ла тиерлек 1 декабргә тиклем туҡтатырға йәки, нормаларҙы һәм ҡағиҙәләрҙе үтәп, аҙ кеше ҡатнашлығында уҙғарырға кәрәк", - тине Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров оператив кәңәшмәлә. Башҡортостан Республикаһының Мәҙәниәт министрлығынан белдереүҙәренсә, барлыҡ театр-концерт залдары яртылаш ҡына тула, тамашасылар шахмат тәртибендә ултыра, залға битлек менән генә индерелә. Театрҙарҙың һәм концерт ойошмаларының гастролдәре өлөшләтә туҡтатылды.

✓Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров Өфөләге Республика ашығыс медицина ярҙамы станцияһы һәм Медицина һәләкәттәре үҙәген барып күрҙе. Ул хеҙмәткәрҙәрҙең эш һәм ял шарттары менән танышты, табип, фельдшерҙар менән аралашты. Станцияның баш табибы Аяз Камалов тәүлек эсендә Өфө ҡалаһы һәм районы халҡынан 1700-гә тиклем саҡырыу ҡабул ителеүен, ваҡытында ярҙам күрһәтеү өсөн Затонда айырым станция төҙөү кәрәклеген еткерҙе.

✓Башҡортостанда мәктәптәрҙе дистанцияла уҡытыуға күсереү планлаштырылмай. Был хаҡта Мәғариф министрлығынан хәбәр иттеләр. Әле 99 мәктәп өлөшләтә ябылған, 206 класс өйҙән уҡыуға күсерелгән. Республикала эпидемиологик хәлдең көсөргәнешле булыуына бәйле Башҡорт дәүләт медицина университеты һәм Өфө дәүләт авиация техник университеты 1 октябрҙән онлайн-уҡыуға күсте. Башҡа юғары уҡыу йорттарында сикләүҙәр айырым факультеттарға һәм курстарға ғына ҡағыла.

✓13 октябрҙән Башҡортостандың Юғары суды, район, район-ара, ҡала һәм участка мировой судтары эш тәртибен үҙгәртә. Башҡортостан Республикаһы судтарының берләшкән матбуғат хеҙмәтенән хәбәр итеүҙәренсә, яңы коронавирус инфекцияһы менән ауырыусыларҙың артыуына бәйле ошондай ҡарар ҡабул ителде.

ИШАРА

# ТАБИПТАР ҘА...

## кеше аңларлыҡ телдә һөйләшһен!



**Хөкүмәтебеҙҙең ауыл ерендә табиптар етешмәү проблемаһын йәш һөнәрмәндәргә арыу ғына күләмдә субсидия биреү юлы менән ыңғай хәл итеүенә шатмын. Йәшерәк сағым булһа, бындай льгота менән үҙем дә файҙаланырға тырышыр инем, моғайын.**

Ғүмер буйы ауылда эшләп, халыҡтың хөрмәтен яулап алған табиптар бик күп. Ғөмүмән, ауыл ерендә башлыса шундай табиптар эшләй ҙә инде. Шуға ла льготаға алданып ҡына ауылға барырға ҡарар иткән табиптарға бер кәңәшем бар: һеҙ урындағы халыҡ менән урындағы телдә һөйләшергә өйрәнергә лә тейешһегеҙ. Эш башҡорт телендә һөйләшә белеүгә генә ҡайтып ҡалмай бында. Мәсәлән, оло ғына йәштәрҙәге бер танышым менән һөйләшеү иҫтә ҡалған. Ҡасандыр хәрби табип булып эшләгәнемде белгән был әбей: "Улым, шул ерем ауырта, был ерем һыҙлай", - тип һөйләй башлағас, уның өйөндә һаҡланған амбулатория картаһына күҙ һалдым. Участка табибының "Жалоб нет" тигән яҙыуҙарын күргәс, танышымдан: "Нишләп ауыртҡан ағзаларығыҙ хаҡында участка табибына әйтмәнегеҙ, бына бит, "Жалоб нет" тип яҙылған" - тип һораным. "Врач минән тота ла: "Нинди жалобаларың бар, инәй?"- тип һорай шул. Үҙ ғүмеремдә берәүгә лә жалауайт иткәнем булманы, Аллаға шөкөр. Жалауайт итә торған көҙәтем юҡ минең! Врачҡа ла шулай тип яуап бирҙем", - тине инәй. Ошондай "үткер" яуабынан оло ҡәнәғәтләнеү, хатта ғорурлыҡ билдәләрен дә уҡыным әбейҙең йөҙөнән... Аңлашылды. Табиптың һорауын ул тешөнөп етмәгән, ә уның яуабын... доктор ҙа аңламаған, тимәк. Ә әбейгә һорау табип тарафынан дөрөҫ бирелгәнме икән? Ихтимал, юҡтыр. "Берәй ерегеҙ ауыртамы?" йә "Ҡайһы ерегеҙ ауырта, нисегерәк ауырта?", "Ҡасандан алып ауырта?" тигәнерәк һорауҙар бирелгән хәлдә, әлбиттә, әбейебеҙ әлеге "жалобаларының" барыһын да әйтеп бирер ине...

Шулай уҡ сирҙәрҙең башҡортса аталышын да белеү ҡамасауламаҫ ауылға эшкә барыусы табиптарға. Элек, медицина институтында уҡыған дәүерҙә, урыҫ телендә лекция уҡыған профессор Венер Сәхәүетдиновтың "Панариций башҡортса - күпертке, ә пандактилит - йыланғараҡ (ҡул бармаҡтарының быуындары зарарланып шешеүе) була", тип айырыуса туҡталып, студенттарҙың иғтибарын йәлеп иткәнләүен хәтерләйем. Ул саҡтарҙа ла ҡала ерендә эшкә ҡалырға тырышыусылар күберәк ине, әммә табип дипломы алып сыҡҡан йәш һөнәрмәндәр үҙе теләгән ергә түгел, ә күбеһенсә, уҡыу йорто тәғәйенләгән дауаханаларға эшкә ебәрелә торғайны.

**Шунлыҡтан, уҡытыусыларыбыҙ "бына ауыл еренә барып эшләргә тура килһә... " тип, йыш ҡына үҙҙәренең кәңәштәрен, айырыуса, урындағы халыҡтың телен белеү зарурлығы хаҡында әйткәләгәнен хәтерләйем. Был мәсьәлә, минеңсә, бөгөн дә актуаль. Ауыл кешеләре (айырыуса оло йәштәгеләр) араһында урыҫ телен бигүк яҡшы белмәгәндәр ҙә күп. Икенсенән, пациентта алсаҡ ҡына итеп һөйләшә белгән докторға ҡарата шунда уҡ ышаныс һәм ихтирам уяна.**

Ауырыу бөтә булған проблемаларын һөйләй ҙә башлай. Шуға күрә лә табип һөнәрен һайлаған йәштәрҙең башҡорт телен белеү-белмәүенә әһәмиәт бирергә кәрәк, тип һанайым. Һәр төрлө сирҙәрҙең башҡортса аталышын да белеү мотлаҡ. Юғиһә, беҙ хәҙер грипптың - киҙеү, грыжаның - бүсер, аппендициттың - һуҡыр эсәк, эпилепсияның ҡуянсыҡ икәнен дә онотоп барабыҙ бит.

Ләғәтебеҙҙән яйлап юйыла барған бына шундай һүҙҙәребеҙҙе һанай башлаһаң, осо-ҡырыйы юҡ. Хатта ауыл ерендә йәшәгәндәребеҙ ҙә "көҙән йыйырыу"ҙы "судороги" , "күрәғарау"ҙы "близорукость", "өйәнәк"те "приступ" тип әйтергә өйрәнеп бөтөп барабыҙ. Халҡыбыҙҙың борон-борондан килгән бына шундай һүҙҙәрен табип ауыҙынан ишеткән милләттәштәребеҙ уларҙы һис бер ҡасан онотмаҫ ине. Икенсенән, бындай һүҙҙәрҙе белеү өсөн махсус рәүештә урыҫса-башҡортса һүҙлек тотоп ултырыу ҙа кәрәкмәй, тик быға бер аҙ ғына ҡыҙыҡһыныу талап ителә. Мәсәлән, әле ошо ҡулығыҙҙағы "Киске Өфө" гәзитен генә даими уҡып барған хәлдә лә, уның һәр һанында "Халыҡ дауаһы" тип аталған рубрика аша, шулай уҡ, йыш ҡына сығып торған "Шифа" битен генә уҡып барған хәлдә лә, тәнебеҙ ағзаларының, һәр төрлө сирҙәрҙең, дарыу үләндәренең башҡортса исемен һәм башҡа әллә күпме һүҙҙәребеҙҙе өйрәнә алабыҙ бит. Ә инде ауылығыҙға телебеҙҙе белеп етеңкерәмәгән берәй табип килә икән, уға уйынлы-ысынлы итеп булһа ла теге йәки был башҡорт һүҙҙәрен өйрәтеп ебәргеләү ҙә урынлы булыр, минеңсә.

Әйткәндәй, халҡыбыҙҙан сыҡҡан мәшһүр бер табибыбыҙ хаҡында бер мәҙәк хәлде һөйләйҙәр. Ауыл кешеләре йыйылышҡан бер мәжлескә ҡаланан ялға ҡайтҡан әлеге ағай ҙа саҡырылған. Йорт хужаһы килгән ҡунаҡтарҙы бер-береһе менән таныштыра башлаған. "Был - Фәлән ағай, төгән ерҙә эшләй. Ә был - республикабыҙҙың данлыҡлы табибы, медицина фәндәре кандидаты, табип-проктолог Фәләнов..." Ҡунаҡтар араһынан бер ағай: "Проктолог ниндәй врач була ул?" - тип һораған. Хирург халҡының шаян һүҙгә әүәҫ икәне барыбызға ла мәғлүм бит инде. Әлеге табип ағай үҙе тороп: "К...т врачы мин",- тип әйткән... Ошо хаҡта ишеткәс: "Бына был - үҙебеҙҙең ысын башҡортобоҙ", - тип көлөшөп алдыҡ...

**Хәлил ҺӨЙӨНДӨКОВ,**
**отставкалағы хәрби табип.**

УҠЫУСЫ ФЕКЕРЕ



# РУХИӘТ МАЙҘАНЫ УЛ!

**"Киске Өфө" гәзите менән күптән танышмын. Төрлө сәбәптәр менән яҙыла алмай ҡалған ваҡытта ла унан айырылғаным юҡ. Һатып алып булһа ла даими уҡып барам. Баҫманың һәр битендәге мәҡәлә, мәғлүмәт - барыһы ла халҡыбыҙҙың зиһенен, интеллект кимәлен үҫтерергә, әхлаҡи тәрбиәгә, матур ғәҙәттәребеҙҙе, боронғо традицияларҙы таратыуға йүнәлтелгән. Милли ҡаҙаныштарыбыҙ, арҙаҡлы шәхестәребеҙ, бөтөн башҡорт донъяһы хаҡында материалдарға башҡа баҫмаларға ҡарағанда күберәк урын бирелеүе менән дә оҡшай ул.**

Милләтебеҙҙе берләштерер, туған тел, тыуған ер тураһында фекер алышыр, йәмғиәтте уятыр, яҡты маҡсаттарға әйҙәр майҙан булған баҫма һымаҡ ҡабул итәм уны. Гәзитте ҡулға алыу менән, иң беренсе, "Уңыш ҡаҙан", "Был ҡыҙыҡлы", "Аҡыллыға - ишара", "Аҡыл - ҡаҙна" кеүек рубрикаларҙағы бәләкәй, әммә һәр һүҙе һимммәтле, тәрән фекерле мәҡәләләрҙе уҡып сығам. Һаулыҡ һаҡлауға ҡағылышлы халыҡ медицинаһы кәңәштәрен яратам. Журналистарҙың республикаһың таланты, хеҙмәте, тикшеренеү эштәре менән дан ҡаҙанған билдәле ғалимдары, йырсылары, яҙыусылары, шағирҙары, үҙ ҡарашы, фекере булған етәкселәре менән ҡорған диалогтары бик уҡымлы. Миләүшә Ҡаһармановаһың яратҡан йырсым Бибисара Азаматова менән ихлас әңгәмәһе ифрат оҡшаны. Әйтерһең дә, үҙем моң эйәһе менән ҡапма-ҡаршы ултырып һөйләштем кеүек. Быға тиклем уның тормошо һәм ижады хаҡында башҡа баҫмаларҙан да уҡығаным бар ине. Ә "Киске Өфө"лә уны бөтөнләй икенсе ракурстан, икенсе бейеклектән күрҙем.

Республика, баш ҡала яңылыҡтары, яңы закондар һәм уларға индерелгән үҙгәрештәрҙең бирелеше лә бик отошло. Бар мәғлүмәт һәр кем аңларлыҡ кимәлдә эшкәртелә. Икенсе йылға гәзит-журналдарға яҙылыу осоронда милләттәштәремә ошо баҫмаға яҙылырға тәҡдим итәм. Үҙен башҡорт тип һанаған һәр башҡорттоң өйөнә килергә тейеш "Киске Өфө". Ул беҙҙе телебеҙ, тарихыбыҙ, мәҙәниәтебеҙ, шәхестәребеҙ менән ғорурланырға өйрәтә. Билдәле булыуынса, туған телебеҙҙә сыҡҡан һәр гәзиттең, журналдың яҙмышы беҙҙән һәр беребеҙҙән тора. Баҫмаларҙың дөйөм тиражы ла милләтебеҙҙең уҡымышлылығын ғына түгел, берҙәмлегебеҙҙе лә күрһәтә. Әйҙәгеҙ, күмәкләп ошо гәзиткә яҙылайыҡ. Үҙегеҙ яҙылған булһағыҙ, яҡындарығыҙға, балаларығыҙға, атай-әсәйегеҙгә бүләк эшләгеҙ. "Киске Өфө"гә яҙылып, туған телебеҙҙе ихтирам итеүебеҙҙе, милләтебеҙҙе яратыуыбыҙҙы иҫбатлайыҡ!

**Ғәйнулла РАХМАНҒОЛОВ,**
**Мәләүез районы Дәүләткол ауылы.**

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓Сентябрҙә пандемиянан зыян күргән тармаҡтар исемлегенән эшҡыуарҙар һәм ауыр финанс хәлендә ҡалған граждандар хоҡуҡлы булған кредит каникулы осоро тамамланды. Башҡортостандың Милли банкы мәғлүмәттәре буйынса, апрелдән сентябргә тиклем республикала 11 354 кеше, шул иҫәптән ипотека заемсыһы кредит каникулы алыу өсөн ғариза биргән.

✓Федераль Роспотребнадзор бөтә төбәктәрҙә лә вирус ауырыуҙарының эпидемиологик миҙгеле башында COVID-19 таралыуына скрининг мониторингын үткәреү бурысын йөкмәткән. Тиҙҙән тикшереү үткәреү өсөн дүрт мәктәп, өс урта махсус һәм өс юғары уҡыу йорто билдәләнә. Һәр учреждениела осраҡлы рәүештә ун уҡыусыны һайлап алып, ПЦР исулы менән - танауҙан һәм ауыҙ ҡыуышлығынан - яңы коронавирус инфекцияһына анализ алына. Был мәғлүмәттәр артабан өйрәнеү өсөн Роспотребнадзорҙың ғилми институттарына ебәреләсәк.

✓Рәсәй Федерацияһының оборона министры бойороғо менән полковник Михаил Блажевич Башҡортостан Республикаһының хәрби комиссары итеп тәғәйенләндә, тип хәбәр иттеләр республиканың Хәрби комиссариатынан. Ошо вазифала эшләгән Игорь Харченко менән килешеү 1 августа ғәмәлдән сығарылды. Михаил Александрович быға тиклем Көньяҡ хәрби округында 67-се зенит ракета бригадаһы командиры булып эшләгән.

✓Башҡортостанда дөйөм белем биреү ойошмаларының 25 меңдән ашыу класс етәксеһе 5 мең һум түләү алды, тип хәбәр итте Башҡортостан Республикаһының Мәғариф министрлығы. Быйыл класс етәкселәренә өҫтәп түләү өсөн федераль бюджеттан 764,5 миллион һум бүленгән. Киләһе йылда ошо маҡсатҡа федераль субсидия 2161,1 миллион һум була.

✓Быйыл Хәйбулла районында 5 яңы фельдшер-акушер пункты асыла, әле 13 октябрҙә Татырүҙәк ауылындағыһы ҡулланыуға тапшырылған. Ул ауылдың 1176 кешеһен хеҙмәтләндерә. Сентябрь айында фельдшер-акушер пункты Оло Әбештә асылған, Степнойҙа амбулатория әҙер, йыл аҙағына Әбүбәкер һәм Антинган ауылдарында төҙөлөштәр тамамланырға тейеш.

**✓ Төбәк бүлексәһе 1,5 йәшкә тиклемге бала ҡарағаны өсөн пособиены 27 меңдән ашыу эшләүсе граждандарға түләй. Шулар иҫәбендәге 293 граждан - ирҙәр өйҙә бала тәрбиәләү менән мәшғүл, ә кескәйҙәрҙең әсәйҙәре эшләй.**



ҠЫҪҠАСА

# БАЛАЛАР ЯЛҒА КИТӘ

**Башҡортостанда мәктәп каникулын оҙайтыу тураһында ҡарар ҡабул ителде. Был хаҡта республика Башлығы Радий Хәбиров хөкүмәттәге оператив кәңәшмәлә белдерҙе.** Уҡыусыларҙың ялы шәмбе, 17 октябрҙә үк башланып, 4 ноябргә тиклем дауам итергә тейеш, тип билдәләне республика етәксеһе. Республиканың мәғариф министры Айбулат Хажин һүҙҙәренсә, хәҙерге ваҡытта төбәктә 983 уҡыусы киҫкен респиратор вирус инфекцияһы менән сирләй, тағы 200-ләгән мәктәп йәшендәге балаға Covid-19 диагнозы ҡуйылған. Шулай уҡ 150-нән ашыу уҡытыусыла коронавирус инфекцияһы раҫланған. 4800-гә яҡын уҡыусы ауырыуҙар менән бәйләнештә булған өсөн карантинда ултыра. "Шуға күрә инфекция таралыу буйынса килеп тыуған хәлде иҫәпкә алып, Һаулыҡ һаҡлау министрлығы менән каникулды бер аҙнаға алданыраҡ башларға тәҡдим итәбеҙ. Ике аҙна белем биреү сифатына бер ниндәй ҙә йоғонто яһамаҫ", - тип билдәләне министр.

✓ **Башҡортостанда ата-әсәһе айырылышҡан осраҡта балаларҙың торлаҡ хоҡуҡтарын яҡлаусы закон үҙ көсөнә инде.** Ыға тиклем Башҡортостандың Ғаилә кодексына бала ауыр сирләгән осраҡта ата-әсәнән өҫтәмә аҡса түләтеү тураһында үҙгәрештәр индерелгәйне. Яңы закон бала атаһы йә әсәһе менән насар торлаҡ шарттарында йәшәргә ҡалып, икенсеһе яуаплылыҡ алырға теләмәгән осраҡҡа ҡағыла. Бындай хәлдә суд аша баланы торлаҡ менән тәьмин итеү йәки уны ҡуртымға алыуға аҡса түләтеүҙе юллап була. "Бында закондың үтәлешен дә күҙәтергә, шулай уҡ баланы алып ҡалған атай йә әсәй тарафынан хоҡуҡ талаптарын артыҡ файҙаланырға тырышыуҙар барлыҡҡа килмәүен дә талап итергә кәрәк", - ти был турала Башҡортостан Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтай рәйесе Константин Толкачев.

✓ **Башҡортостанға 3-7 йәшлек балаларға ай һайын пособие түләү өсөн Рәсәй Хөкүмәтенең резерв фондынан өҫтәмә рәүештә 1 миллиард 378 миллион һум бүленә. Тейешле бойороҡҡа хөкүмәт рәйесе Михаил Мишустин ҡул ҡуйған.** Төбәктәргә бөтәһе 8,8 миллиард һумдан ашыу йүнәлтелә. Өҫтәмә финанслау кәрәклеге ата-әсәһе түләүгә хоҡуғы булған балаларҙың артыуы менән бәйле. Рәсәйҙә улар - 3,8 миллиондан ашыу. 3-7 йәшлек балаларға айлыҡ пособие Президент указы менән 2020 йылдың 1 ғинуарынан индерелде һәм 1 июндән түләнә башланы. Пособие түбән килемле ғаиләләргә бирелә. Уның күләме балаға төбәктәге йәшәү минимумының 50 процент тәшкил итә. Был төбәккә ҡарап айына яҡынса 5,5 мең һум була. Пособие юллау өсөн дәүләт хеҙмәттәре порталында электрон ғариза бирергә, күп функциялы үҙәккә йәки социаль яҡлау органдарына барырға мөмкин.

ТӨРЛӨҺӨНӘН

# ЭЛЕККЕ ЯҢЫЛАР

**Билдәле булыуынса, 17 сентябрҙә Андрей Назаров Башҡортостан Хөкүмәтенең Премьер-министры итеп тәғәйенләнде. Шул уҡ көндә Хөкүмәттең яңы составы бер ай эсендә билдәләнәсәге тураһында әйтелгәйне.**

Шуға ярашлы, Башҡортостанда өс дәүләт комитеты министрлыҡ итеп үҙгәртелде. Башҡортостан Хөкүмәтендәге оператив кәңәшмәлә республика Башлығы Радий Хәбиров ошо турала белдерҙе. Башҡортостан Республикаһының Төҙөләш һәм архитектура буйынса дәүләт комитеты - Төҙөләш һәм архитектура министрлығы, Транспорт һәм юл хужалығы буйынса дәүләт комитеты - Транспорт һәм юл хужалығы министрлығы, Сауҙа һәм ҡулланыусылар хоҡуғын яҡлау буйынса дәүләт комитеты Сауҙа һәм хеҙмәттәр министрлығы итеп үҙгәртелде. Бынан тыш, Башҡортостан Республикаһының Үҫеш корпорацияһы һәм Башҡортостан Республикаһының Стратегик асыштар үҙәге етәкселәре Хөкүмәт составына индерелде.

Хәҙерге 10 вице-премьерҙың туғыҙы республика Хөкүмәтенең яңы составына инде, тип хәбәр итте Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров. Фәнүр Йәғәфәров вице-премьерҙарҙың яңы составына инмәне. "Беҙ Фәнүр Йәғәфәровты республика Башлығы Хакимиәтенә яңынан эшкә ҡайтарабыҙ, - тине Радий Хәбиров. - Уның компетенцияһы, һәләте беҙҙең Хакимиәт ағына кәрәгерәк, ул унда һөҙөмтәлерәк эшләйәсәк".

# МАЙҘАН ЯҢЫРТЫЛДЫ

**Ишембайҙа Ленин исемендәге яңыртылған үҙәк майҙанды асыу тантанаһы уҙҙы. Рәсәйҙең төҙөләш һәм торлаҡ-коммуналь хужалыҡ министры Владимир Якушев һәм Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров башҡарылған эштәрҙең күләмен баһаланы.**



Бында күп функциялы йәмәғәт киңлеге барлыҡҡа килде, стадион һәм Мәҙәниәт һарайы һаҡлап ҡалынды. Майҙанға төрлө яҡтан инергә мөмкин. Ишембайҙың төп майҙанында хәҙер урында үткәрелгән саралар өсөн амфитеатр бар. Бында күргәҙмә павильондары, нефтте символлаштырған фонтан, кафе йәки күргәҙмә залын асырға мөмкин булған йылы павильон урынлашҡан. Скверҙа рекреация зонаһы, спорт майҙансыҡтары, шашка баҡсаһы һәм ошо проект өсөн махсус булдырылған үҙенсәлекле уйын комплексы менән балалар майҙансығы барлыҡҡа килде. Балалар майҙансығының төп элементы - вышка рәүешендәге тауҙар системаһы. Уға архитекторҙар тауҙар һәм ҡаяға үрмәләү конструкцияларын өҫтәгән, унда балалар спорт менән шөғөлләнергә, бер үк ваҡытта ҡаланың тарихы менән танышырға мөмкин. Ҡала тарихына бағышланған "Ваҡыт таҫмаһы" арт-объекты дөйөм композицияның ҡыҙыҡлы өлөшө булды.

# ДЕКРЕТТАҒЫ... АТАЙҘАР

**Бөгөнгө көнгә РФ Социаль страховкалау фондының Башҡортостан Республикаһы буйынса төбәк бүлексәһе 1,5 йәшкә тиклемге бала ҡарағаны өсөн пособиены туранан-тура 27 меңдән ашыу эшләүсе граждандарға түләй. Шулар иҫәбендәге 293 граждан - ирҙәр, йәғни тап шунсама атай кеше бала ҡарау буйынса отпускыла, улар өйҙә бала тәрбиәләү менән мәшғүл, ә кескәйҙәрҙең әсәйҙәре эшләй.**

Республикала 2,5 ай буйы "Тура түләүҙәр" ғәмәлдә булған осорҙа Фондтың төбәк бүлексәһе эшләгән граждандарға 567 млн һум ана шундай пособие түләне. "Бала ҡарау буйынса отпускыла әсәйҙәр генә була", тигән күнегелгән ҡараш йылдар үтә килә ана шулай юҡҡа сыға бара. Бөгөн "декреттағы атайҙар" менән берәүҙе лә аптыратып булмаһа ла, ирҙәр өсөн барыбер ҙә бындай аҙымға барыу мәсьәләһе ауыр хәл итәлә. Шуны иҫкә төшөрөү кәрәк: ғәмәлдәге законға ярашлы, йәш ярымға тиклемге баланы ҡарау буйынса тейешле пособие түләнеүсе отпускыға ата-әсәнең береһе йәки ғаиләнең баланы ҡараусы икенсе бер ағзаһы алырға хоҡуҡлы. Ә инде ошо йәштәге бер нисә балалы (игеҙәктәр ) ғаиләләрҙә әсә кеше балаларҙың - береһе, ә атайҙары икенсе бала өсөн отпуск алырға хоҡуҡлы. Пособие күләме бөтәһе өсөн дә бер тигеҙ иҫәпләнә - отпуск алыусы граждандың шунан алдағы ике айлыҡ уртаса эш хаҡынан - 40 процент. Быйыл юғары кимәл - 27 984 һум 66 тин, ә иң кәм сумма район коэффициентын иҫәпкә алып 7 764 һум 80 тин тәшкил итә. Закон тарафынан тағы ла йәш ярымға тиклемге бала ҡарау буйынса отпускылағы ата-әсәнең тулы булмаған эш көнөнә лә хоҡуҡтары бар. Был осраҡта уларға пособие тулы күләмдә һәм эшләгән ваҡытына ярашлы эш хаҡы ла түләнә.

# ИҪКӘ АЛЫП...

**Өфөлә күренекле дәүләт эшмәкәрҙәре Хафиз Ҡушаев менән Муллаян Халиҡовҡа мемориаль таҡталар ҡуйылды. Улар Башҡортостан Республикаһы Милли музейы бинаһының ал яғында урынлаштырылды.**

Бөгөн БР Милли музейы булған йортта элек БАССР Хөкүмәтенең тәүге резиденцияһы урынлашҡан һәм унда Башҡорт Үҙәк башҡарма комитеты рәйесе Хафиз Ҡушаев менән БАССР Халыҡ Комиссарҙары Советы рәйесе Муллаян Халиҡов эшләгән. Улар, һис шикһеҙ, Башҡортостан Республикаһын барлыҡҡа килтереү һәм үҫтереүгә ҙур өлөш индергән дәүләт эшмәкәрҙәре. "Билдәле яҡташыбыҙ Хафиз Ҡушаевҡа арнап иҫтәлекле тамға ҡуйылыуына шатбыҙ. Беҙҙең яҡтарҙа ул легендалар һәм "Хафиз кантон" халыҡ йыры геройына әүерелгән. Уның бер туған ҡустыһы Ҡәйүм Ҡушаев ошондай иҫтәлекле таҡта ҡуйыу тураһында оҙаҡ йылдар хыялланды, бик күп архив материалдары йыйғайны һәм яҙыуын да әҙерләгәйне", - тип һөйләне тантана барышында Силәбе өлкәһе Көҙәш ауылының музей етәксеһе Мөхтәрәмә Ишбулатова.

Мемориаль таҡталарҙы асыу тантанаһынан һуң "БАССР-ҙың күренекле етәкселәре Х.Ҡ. Ҡушаев һәм М.Д. Халиҡов: хәтер һәм мираҫ" тип аталған түңәрәк ҡор ойошторолдо. Унда тарихсылар республика йәмәғәтселеге менән дәүләт эшмәкәрҙәре исемдәрен мәңгеләштереү буйынса ниндәй саралар күреү тураһында фекер алышты.

## Б А Ш  Ҡ А Л А  Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✓Өфөлә 17 һәм 18 октябрҙә ауыл хужалығы йәрминкәләре үтә. Баш ҡаланың төрлө майҙандарында республикала етештерелгән продукцияны иртәнге сәғәт 10-дан киске 4-кә тиклем һатып алырға була.

✓Өфө ҡала округы хакимиәтендәге оператив кәңәшмәлә хакимиәт башлығы урынбаҫары Радмил Мөслимов синоптиктар фаразлауына ярашлы, аҙна аҙағында көндәр һыуыныуы көтөлә һәм төндә айырым юл участкаларында боҙлауыҡ булыуы бар, тип билдәләне. Ул хакимиәт башлыҡтарына һәм тейешле идаралыҡтарға ҡатмарлы хәлдәргә әҙер булырға, кәрәк икән, күперҙәр, юл үткәргестәр, юлдың хәүефле өлөштәрендә боҙлауыҡҡа ҡаршы саралар күрергә, ҡаланың хужалыҡ, коммуналь-энергетика селтәрҙәренең тотҡарлыҡһыҙ эшен тәьмин итергә ҡушты.

✓Өфөлә 17 ноябргә тиклем "Балалар - балаларға" Халыҡ-ара классик музыка фестивале уҙғарыла. Ул Башҡортостандың музыка мәктәптәрендә белем алған 60 һәләтле уҡыусыға донъяның билдәле педагогтарынан оҫталыҡ дәрестәре алыу, ауыр тормош хәлендәге балалар өсөн мәрхәмәтлек онлайн концерттарында сығыш яһау, республиканың дәүләт оркестры менән берлектә гала-концерт ойоштороу мөмкинлеге бирә. Фестиваль Башҡортостан Мәҙәниәт министрлығы һәм Владимир Спиваковтың мәрхәмәтлек фонды ярҙамында уҙғарыла.

✓Физик шәхестәрҙең мөлкәт өсөн һалым түләү мөҙҙәте 2020 йылдың 1 декабрендә тамамлана, тип хәбәр иттеләр Башҡортостан буйынса Федераль һалым хеҙмәте идаралығынан. Һүҙ мөлкәт, транспорт һәм ер өсөн һалымдар тураһында бара. Хаҡты һалым түләүсенең шәхси кабинетын, "Налоги ФЛ" мобиль ҡушымтаһы, "Уплата налогов и пошлин" сервисы һәм Дәүләт хеҙмәттәре берҙәм порталы ярҙамында түләп була.

✓"Гемотест" лабораторияһының бөтә бүлектәрендә 31 октябргә тиклем организмдағы стресс кимәлен тикшереүгә махсус тәҡдим ғәмәлдә була. Анализ өсөн хаҡ 30 процентҡа кәметелгән, тикшеренеү өсөн 1 көн талап ителә. Унда D витамины, магний, кальций, кортизол, ТТГ, атерогенлыҡ индексы тикшерелә. "Гемотест" лабораторияһы Өфө, Стәрлетамаҡ һәм Ишембай ҡалаларында бар.

**"БАШИНФОРМ" материалдары файҙаланылды.**

✓ *Сирлеләрҙең дөйөм һанынан яртыһы (48 процент) - предприятие хеҙмәткәрҙәре. Шуға бәйле барлыҡ производстволарҙа шәхси һәм дөйөм гигиенаны көсәйтергә кәрәк, тип билдәләне Роспотребнадзор вәкиле.*



...ҒӘҘӘТТӘРЕ КҮРКӘМ

# МИЛЛӘТТӘШТӘРГӘ...

## башҡортса китаптар ебәрелде



**Быйыл "Рәсәй милләте берҙәмлеген һәм БР халыҡтарының этномәҙәни үҫешен нығытыу" Дәүләт программаһының "Башҡорт халҡының этник үҙенсәлеген үҫтереү һәм һаҡлау" программа өлөшөн бойомға ашырыу сиктәрендә башҡорттар йәшәгән төбәктәрҙәге китапханаларҙы үҙәкләштереп тулыландырыу буйынса сараларҙы тормошҡа ашырыу өсөн Ә.-З.Вәлиди исемендәге БР милли китапханаһына бер миллион һум аҡса бүленгәйне.**

Ошо көндәрҙә Милли китапхана Рәсәй Федерацияһының башҡорттар йәшәгән субъекттарын башҡорт әҙәбиәте менән тәьмин итеү эшен тамамланы. Был сара ил төбәктәрендә йәшәүсе башҡорт халҡының этник үҙенсәлеген үҫтереү һәм һаҡлау маҡсатында үткәрелде. Ырымбур, Силәбе, Һамар, Һарытау, Ҡурған, Свердловск өлкәләренең һәм Пермь крайының 17 китапханаһына 4386 дана китап ебәрелде.

Төҙөлгән килешеүгә ярашлы, тулыландырыу һәм тәьмин итеү буйынса аукционда еңеүсе булып танылған Башҡортостан "Китап" нәшриәте Рәсәйҙең ете субъектына китаптар ебәрҙе. Юғарыла атап кителгән ете төбәктең китапханалар фонды бушлай 86 атамала һәр береһе 258-әр дана баҫма менән тәьмин ителде. Шулар иҫәбендә Ш.Бабич, М.Кәрим, З.Биишева, Р.Бикбаев, Н.Мусин, Р.Назаров, Т.Гәниева, Ғ.Ибраһимов, Ф.Туғыҙбаева, Н.Сәлимов әҫәрҙәре, шулай уҡ балалар өсөн әҙәбиәт һәм Башҡортостан Республикаһының 100 йыллығына арналған "Башҡортостан: тарих артылыштары", Р.Янғужиндың "Рәсәйҙең төп халыҡтары: башҡорттар", русса-башҡортса, башҡортса-русса һүҙлектәр, хәҙерге башҡорт әҙәби теленең аңлатмалы һүҙлеге һәм башҡа бик күп фәнни-популяр һәм тарихи китаптар бар.

Был сараны тормошҡа ашырыу Рәсәй китапханалары фондын булдырыуға һәм яңыртыуға, шулай уҡ башҡорт халҡының социаль-иҡтисади һәм мәҙәни-рухи үҫешенә булышлыҡ итәсәк.

**Юлдаш УРАҠСИН,**
**БР Милли китапхана директоры.**

ҮӘТ, ШУЛАЙ!

# ТАБИПТАР ҮҘҘӘРЕ КИЛӘ



**Мәғлүм булыуынса, былтырҙан республика табиптары районлар буйлап күсмә тикшереүҙәргә сыға башланы. Был сара ҡышын туҡталып торһа ла, яҙ юлдар асылыу менән тағы тергеҙелергә тейеш ине. Әммә эпидемиологик хәл алдан ҡоролған пландарға үҙенең төҙәтеүҙәрен индерҙе. Шуға ҡарамаҫтан, хәлдәр бер аҙ тотороҡлана төшкәс, табиптар тағы ла юлға сыҡты.**

"Сәләмәт республика - сәләмәт төбәк" акцияһы сиктәрендә табип-белгестәр алты: Өфө, Дыуан, Нефтекама, Октябрьский, Стәрлетамаҡ, Белорет төбәктәре маршрутына йәлеп ителгән һәм ул 10 ноябргә тиклем дауам итәсәк.

Өфө төбәге маршруты буйынса - Саҡмағош, Архангел, Ҡырмыҫҡалы, Өфө, Иглин, Нуриман, Благовещен, Кушнаренко районлары халҡы тикшерелгән. Был маршрут буйынса составында Сәләмәтлек үҙәге, флюорография, маммография, күсмә "Катын-ҡыҙ сәләмәтлеге" һәм фельдшер-акушер пункттары хеҙмәткәрҙәре булған 5 автомашина 25 табип хеҙмәтләндергән.

Дыуан төбәге маршруты буйынса эшләгән табиптар Салауат, Ҡыйғы, Балаҡатай, Мәсетле райондарында тикшереүҙәр үткәргән. Нефтекама төбәге маршруты Бөрө, Мишкә, Ҡариҙел, Асҡын, Балтас, Тәтешле, Яңауыл, Краснокама райондары инә. Октябрьский төбәге маршруты Бүздәк, Шаран, Баҡалы, Туймазы, Бәләбәй, Йәрмәкәй, Бишбүләк райондарын үткән. Стәрлетамаҡ төбәге маршрутындағы табиптар ҙа Ауырғазы, Ғафури, Ишембай, Мәләүез, Стәрлетамаҡ, Стәрлебаш, Федоровка райондарында эшен теүәлләне. Белорет төбәге маршруты буйынса Белорет, Учалы, Әбйәлил, Баймаҡ, Йылайыр, Хәйбулла, Бөрйән райондарын үтте.

Шулай итеп, акцияның 24 августан башланған бер аҙнаһында ғына республика буйынса барлығы 19 309 кеше квалификациялы табип тикшереүе алған, улар араһынан 523 кешелә социаль әһәмиәттәге сирҙәр, 57 осраҡта - яман шешкә, 68 осраҡта шәкәр диабетына шик булыуы асыҡланған, 15 кешелә туберкулез табылған. Бындай акциялар халыҡ өсөн бик уңайлы, сөнки улар урында уҡ тикшерелә, кәрәк икән, өҫтәмә тикшереүгә йүнәлтмә ала. Килтерелгән һандарҙан күренеүенсә, һәр төбәктә лә заман сиренә әүерелгән яман шеш, шәкәр сире асыҡлана, ҡайһы бер урындарҙа хатта туберкулез да бар. Шулай уҡ юғары ҡан баҫымы менән сирләүселәр артыуы ла күҙәтелә. Ғөмүмән, асыҡланған йәки шик тыуҙырған сирҙәр бөгөнгө хәл-торошта бигерәк тә хәүеф категорияһында тора, сөнки, күҙәтеп барһағыҙ, коронавирустан күпселек һауыҡһа ла, вафат булыусыларҙа тап ошо сирҙәрҙең булыуы төп сәбәп итеп ҡуйыла.

ҠЫҪҠАСА

# ӨЙҘӘ ЭШЛӘП ТОР

**Өфөлә предприятие етәкселәренә, ниндәй милек формаһында булыуға ҡарамаҫтан, 65 йәштән өлкәндәрҙе өйҙән эшләүгә күсерергә тәҡдим ителде, тип белдерҙе баш ҡала хакимиәте башлығы вазифаһын ваҡытлыса башҡарыусы Радмил Мөслимов мәриялә уҙған оператив кәңәшмәлә.** Башҡортостан Республикаһы буйынса Роспотребнадзор етәксеһе урынбаҫары Галина Пермина белдереүенсә, Өфөлә 3 931 кеше сирләй. Дауахананан тыш пневмония менән ауырыусылар уҙған аҙна менән сағыштырғанда 32 процентҡа кәмегән. Ләкин ОРВИ менән сирләү осраҡтары күп, үткән аҙна менән сағыштырғанда үҫеш - 10,7 процент. Сирлеләрҙең дөйөм һанынан яртыһы тиерлек (48 процент) - предприятие хеҙмәткәрҙәре. Шуға бәйле барлыҡ производстволарҙа шәхси һәм дөйөм гигиенаны көсәйтергә, битлек кейергә, социаль дистанцияны һәм дезинфекция режимын һаҡларға кәрәк, тип билдәләне Роспотребнадзор вәкиле.

✓ **Tvil.ru сервисын ҡулланыусылар фекере буйынса, Өфө Рәсәйҙең World Travel Awards абруйлы туристик премияһына лайыҡ булырлыҡ ун ҡалаһы иҫәбенә инде.** Һорау алыу мәғлүмәттәре буйынса, туристарҙың күпселеге (40.26 процент) абруйлы премияны Санкт-Петербургҡа бирер ине. Икенсе урында - Ялта, 13.64 процент. "Бронза"ны Краснодар крайындағы йыл әйләнәһенә эшләгән курорт алды - Сочи, 11.04 процент. Шулай уҡ социаль селтәр ҡулланыусылары Ҡаҙан (10.39 процент), Севастополь (9.74), Калининград (7.14), Мәскәү (3.25), Геленджик (3.25), Владивосток (0.65) һәм Өфө (0.65 процент) өсөн тауыш бирҙе. Әле World Travel Awards сайтында премия конкурсының финал этабында тауыш биреү бара. Ул 25 октябргә хәтлем дауам итә. Һөҙөмтәләр 27 ноябрҙә онлайн-бүләкләүҙә билдәле була.

✓ **2020 йылдың 1 июленән торлаҡ бинаһына һәм коммуналь хеҙмәттәргә түләүҙең яңы айлыҡ аҡсалата компенсацияһын (ЕДК) иҫәпләү тәртибенә күсеү һөҙөмтәһендә айлыҡ түләүҙәр кемдәргәләр артты, кемдәргәләр кәмегәйне.** Әгәр яңыса иҫәпләүҙәр буйынса компенсация элек алған сумманан кәмерәк булһа, граждандар (льготалы категорияға инеүинмәүенә ҡарамаҫтан) йәшәгән урыны буйынса яҡындағы МФЦ-ға йәки Социаль ярҙам үҙәге филиалына мөрәжәғәт итә ала. Субсидия граждандарҙың торлаҡ һәм коммуналь хеҙмәттәр өсөн түләүе сығымдары максималь күләмдән артып киткән осраҡта бирелә. Күп балалы тулы булмаған ғаиләләр өсөн ул - 13 процент, аңғыҙ йәшәгән һәм 70 йәшкә еткән пенсионерҙар өсөн - 16 процент, аңғыҙ йәшәгән, 70 йәшкә етмәгән пенсионерҙар өсөн - 18, башҡа категория граждандар өсөн 20 процент тәшкил итә. Субсидия граждандарҙың бурысы булмағанда йәки уны түләү тураһында килешеү төҙөү һәм үтәү шарты менән бирелә.

Х А Л Ы Ҡ   Д А У А Һ Ы



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

### Инфаркттан һуң

❖ Миокард инфаркты кисергән 65 йәштәгеләр өсөн сирҙең эҙемтәләренән дауаланыу өсөн түбәндәге ысул һөҙөмтәле. Тәү сиратта көн һайын ярты стакан кишер һутына бер балғалаҡ көнбағыш майы ҡушып эсергә. Ә бына һаулыҡты нығытыу өсөн 125 грамм инжир, 250 грамм ҡабығынан әрселмәгән, әммә һөйәктәренән таҙартылған лимон, 250 грамм бал, 50 мл араҡыны бергә ҡушып, ағас ҡалаҡ менән бутарға. Ҡатнашманы һыуыткыста һаҡларға. Дауаны көнөнә 3-4 тапҡыр берәр ҡалаҡ ашарға кәрәк.

❖ Тағы ла 5 әрселмәгән лимон һәм 5 баш һарымһаҡты ит турағыс аркамында ваҡлап, ярты килограмм бал ҡушырға. Бер аҙна төнәтергә. Ошо ҡатнашманы көнөнә 3 тапҡыр ашарҙан алда берәр ҡалаҡлап 2 ай буйы ҡабул итергә.

### Организмды нығытыу

**Күреү һәләтен яҡшыртыу һәм организмды нығытыу өсөн бер нисә халыҡ дауаһы ысулы бар.**

❖ 2,5 ҡалаҡ шыттырылған бойҙайҙы ваҡларға, 2 ҡалаҡ йылы һөт ҡойорға һәм 20-30 минут кәсәл кеүек булғансы төнәтергә. Ашарҙан 15 минут алда һөттө эсеп, бойҙайҙы яҡшы сәйнәп ашарға. Был рәүешле дауаланыу ваҡыты 2 аҙна, шунан 1 аҙнаға туҡталып тороп, тағы ҡабатларға.

❖ Уртаса ҙурлыҡтағы кишерҙе ваҡ ҡырғыс аша үткәреп, шуға ваҡ ҡына итеп туралған әрселгән әфлисун, бер ус күрәгә һәм бер ҡалаҡ ҡаймаҡ ҡушырға. Яҡшылап бутарға һәм 3 өлөшкә бүлеп, ашарҙан ярты сәғәт алда тәғәмләргә. Ҡатышманы һыуыткыста һаҡларға.

❖ 1 уртаса лимон һәм 1-2 петрушка тамырын ит турағыста ваҡлап, 1 стакан бал ҡушырға. Был ҡатышманы көнөнә 3 тапҡыр берәр балғалаҡлап ашарҙан 15-20 минут алда ҡабул итергә. Ҡатышманы һыуыткыста һаҡларға.

**Үрҙә килтерелгән ҡатышмаларҙы алмашлап ҡулланырға була: ике аҙна бер төрләһен ашап, бер нисә көн туҡтап торорға һәм икенсеһен башларға.**

**Ғәлиә ШӘМСИЕВА әҙерләне.**

✓ *Парад, ысын мәғәнәһендә, төньяҡ-көнбайыш башҡорттарының берҙәмлеген сағылдырҙы, бындай сара мотлаҡ республика кимәлендә лә ойошторолорға, бар башҡорт ырыуҙарын бер сафҡа баҫтырырға тейеш, тигән һығымта яһалды.*



*ЙОЛАНДАН ЙҮН ТАП!*



# БАШҠОРТ ҠОРАМАҺЫ

XX быуатта мозаика һәм аппликация ҡорамалар эшләү йыш ҡына теген машиналары ярҙамында башҡарылған, ҡулдан да ҡораусылар булған. Ниндәй ысул менән башҡарылыуға ҡарамаҫтан, бындай әйберҙәрҙе башҡорттар ҡорама тип йөрөткән. "Ҡорама", "ҡурама" терминдары туҡыма ҡырҡындыһын ғына түгел, орнаментлау ысулын һәм әйбер төрөн дә аңлатҡан. Ҡайһы бер көньяҡ-көнсығыш һәм Урал аръяғы һөйләштәрендә ҡораманан эшләнгән юрған йәки түшәк "ҡорамыш" тип аталған. Көньяҡ-көнбайыш райондарҙағы ялан башҡорттарында (Ырымбур, Һамар, Һарытау өлкәләре) "ҡораҡ" термины йыш ҡулланылған.

Был рәүешле биҙәү өсөн әйберҙәрҙе һайлап алыуҙа тотороҡло традиция күҙәтелә. Тәү сиратта был һырылған түшәк-япмалар комплекты: бер оҙон - буй юрған, түр юрған һәм ике ҡыҫҡа - арҡыры түшәк; ашаған ваҡытта кешеләрҙе ултыртыу өсөн уларҙы урындыҡҡа (һике) йәки иҙәнгә түшәгәндәр.



*Урындыҡ түшәктәре (Урал буйының көньяғы). Т.К. Сурина фотоһы. 1981.*

XX быуаттың 50-80 йылдарында экспедицияларға сыҡҡан ваҡытта ауыл өйҙәрендә ҡораманан тегелгән башҡа төр әйберҙәрҙе лә күргәнебеҙ булды: ҡунаҡтар өсөн юрған, кәпрән (яҫтыҡ тышы), ултырғыс һәм диван түшәге, һандыҡ япмаһы, урын тартмаһы. Борон ҡорама ярҙамында туй аттарының япмаһы, бүләктәр өсөн сумка-конверт, туй янсығы, өйләнешеүселәр йоҡлаған урындың сымылдығын, стена буйына йәйелгән келәмдәрҙе биҙәгәндәр.



*Туй янсыҡтары. БР ММ. Т.К. Сурина фотоһы.*

Боронғо бер фотола тирмәнең иң төпкө, хөрмәтле кешеләр өсөн тәғәйенләнгән өлөшөндәге таяуҙарының өҫкө яғы аҫтан-өҫтән ҡаймаланған төрлө төҫтәге тура дүртмөйөштәрҙән торған ҡыҫҡа ҡорма менән ҡапланған. Был фото Ҡурған башҡорттары йәйләүендә төшөрөлгән.

**Светлана ШИТОВА.**
**"Халыҡ сәнғәте: көньяҡ башҡорттарында кейеҙ, балаҫ һәм туҡымалар. Этнографик очерктар" китабынан.**

*ҺАЙ-ҺАЙ-ҺАЙ!*

# АСҠЫНДА...

## Шәжәрә байрамы гөрләне



**(Башы 1-се биттә).**

Тарихи хәтер - ғәжәп бер кисерештәр донъяһы икән ул. Асҡын районында үткән байрамда Ҡариҙел, Саҡмағош, Краснокама, Борай, Мишкә, Балтас райондарынан, Туймазы, Октябрьский, Нефтекама, Ағиҙел ҡалаларынан төрлө ырыу вәкилдәренең шәжәрәләре ҡуйылған аллеянан үткәндә ошондай һүҙ менән генә аңлатып булмаған тойғолар кисерелде: һоҡланыу, ғорурланыу, үҙеңдең нәҫел тамырҙарыңа нығыраҡ үтеп инеү теләге, шул уҡ ваҡытта ошо эшкә һуңлабыраҡ тотонған өсөн үкенеү... Ошондай тойғолар кисерткән, берәүҙе лә битараф ҡалдырмаған, һоҡландырған өлгөләр бихисап булды Шәжәрәләр аллеяһында. Мәҫәлән, мәғариф ветераны Йәрис Зәйҙуллин Советтар Союзы Геройы - Төлгөҙбаш ауылы батыры Сәлимйән Ғәлимйән улы Ғәлимйәновтың, Балыҡсы ырыуы башҡорттарының ҡор башлығы, Башҡортостан Республикаһының атҡаҙанған урмансыһы тигән маҡтаулы исемгә лайыҡ булған Шәрифйән Закиров 25 быуынды үҙ эсенә алған Төнсура нәҫеле шәжәрәһе менән таныштырҙы. Ҡыр-танып ырыуы башҡорто, мәғариф ветераны, Ҡаҙансы ауылының "Ағинәй" йәмәғәт ойошмаһын етәкләүсе шиғри күңелле Мәмдүнә Зарипова Тимербай нәҫелен 14-се быуынға тиклем өйрәнеүе тураһында һөйләне. Ул быуындан-быуынға тапшырылыусы ҡомартҡылар - 200 йыл элек тегелгән уҡалы камзул, дүрткел балитәкләп 12 һыр менән тегелгән йөҙйәшәр күлдәк тураһында ла бәйән итте. Баҡтиһәң, был камзул Мәмдүнә апайға бишенсе быуындағы өләсәһе Хәжәр ағинәйҙән ҡалған икән. "Бындай уҡалы камзулды бик етеш йәшәгән, хәлле кешеләр көндәлек тормошта түгел, ә ҙур тантаналарҙа, байрамдарҙа ғына кейгән. Был камзул да, күлдәк тә боронғо ҡыр-танып ырыуы кейемдәре", - тине Мәмдүнә апай.

Шәжәрәләр аллеяһында шулай уҡ Ҡашҡа ауылынан мәғариф ветераны Наил Хәйруллин (Атналы нәҫеле), Табаҫҡытамаҡтан Глафира Фәйершина (Ғиниәт нәҫеле), Петропавловканан Вәсилә Шакирова (Сәхәүетдин нәҫеле), Шишмә-Үрәкәйҙән Рәфис Зарипов (Ҡәнзәфәр нәҫеле), Асҡын ауылынан Роза Мөхәмәтшина (Бикташ нәҫеле), Фәриҙә Хөснөтдинова (Көҙәй нәҫеле), Альфред Хәжимуллин (Хәсән нәҫеле), Мотабаштан Рөстәм Фәйзелғаянов (Мөхәмәтйәр нәҫеле), Көнгәктән Аснаф Фәтхелисламов (Ғосман нәҫеле), Үршиҙенән Фәнизә Сәлимгәрәева (Юныс нәҫеле), Ҡышлауйылғанан Гүзәлиә Ахунова (Поварис нәҫеле) шәжәрәләре менән таныштырҙы. Күрше район һәм ҡалаларҙан килеүсе милләттәштәребеҙҙең үҙ нәҫел ағасы тураһындағы сығыштары ла сағыу, үҙенсәлекле булды. Мәҫәлән, Ҡариҙел районынан килгән мәғариф ветераны, Унлар ырыуы башҡорто Әлиә Камалиева 1800 йылдарҙа олатаһы тарафынан ғәрәп телендә яҙылған шәжәрә китабын күрһәтте. Был күптәргә: "Ҡара әле, беҙҙең районның мәсетендә лә бындай китаптар һаҡлана торғандыр, шуларҙы табып, ундағы яҙыуҙар менән ҡыҙыҡһынырға кәрәк әле", - тигән бик урынлы һығымта яһауға этәргес булды.

Республика Шәжәрә байрамы сиктәрендә үткән башҡа саралар - "Төньяҡ башҡорттары: шәжәрә төҙөү һәм тыуған яҡты өйрәнеү" фәнни-ғәмәли конференцияһы, "Ваҡыт дарьялары аша" тип исемләнгән театрлаштырылған тамаша, биҙәү-ғәмәли сәнғәт һәм аш-һыу оҫталарының бай күргәҙмәһе, "Ғаиләм - минең ҡәлғәм" республика ғаилә видеоконкурсына йомғаҡ яһау, Азат Мулләхмәтов менән Вадим Харисов етәкселегендәге уҡ атыу ярыштары - барыһы ла мәртәбәле сараның сағыу биҙәге, онотолмаҫ ваҡиғаһы булды. Ә иң көтөп алынғаны, моғайын, төньяҡ-көнбайыш башҡорттарының ырыуҙар парады булғандыр. 13 район-ҡаланан 16 ырыу вәкилдәре берләшеп, майҙан уртаһынан тигеҙ сафтарҙа үтте. Һәр береһе ырыуға хас кейемдәр тегеп кейгән, тамғалары төшөрөлгән плакаттар күтәргән. Парадты Асҡын районынан балыҡсы, ғәйнә, унлар, су-танып, ҡыр-танып ырыуҙары вәкилдәре асты. Артабан Балтас районынан - су-танып; Ҡариҙелдән - унлар, Краснокаманан, Ағиҙелдән - гәрәй; Тәтешленән - ирәкте; Борайҙан - елдәк; Туймазы, Саҡмағоштан - йылан; Нефтекаманан - көҙәй; Мишкәнән - ҡаңлы; Нуримандан - бәләкәй көҙәй; Октябрьскиҙан әйле ырыуы башҡорттары дауам итте. Парад, ысын мәғәнәһендә, төньяҡ-көнбайыш башҡорттарының берҙәмлеген сағылдырҙы, бындай сара мотлаҡ республика кимәлендә лә ойошторолорға, бар башҡорт ырыуҙарын бер сафҡа баҫтырырға тейеш, тигән һығымта яһалды. Тарихсыларыбыҙ был турала күптән хыяллана бит. Хыялға тәүге аҙымды асҡындар яһаны ла инде.

**Наилә ИМАЕВА.**





ЫРЫУЫҢ КЕМ?

# ТӘРӘН ТАМЫРЛЫ БАШҠОРТБОҘ - ГӘРӘЙ БУЛА ЫРЫУЫБЫҘ



Монголдарҙың Далан-нэмургес ыҙанындағы һуғышта еңеүе Үҙәк Азия тарихында хәл иткес ваҡиғаға әйләнә. Академик В.В. Бартольд билдәләгәнсә, татарҙарҙы еңгәндән һуң "кирәйәт ханы Көнсығыш Монголияла беренсе кешегә әйләнә". Әммә был беренселек, башлыса, тик номиналь күренеш кенә була. Инде олоғайған, хөрмәтле заттарҙан булған хан элекке ҡеүәтен юғалта бара, ә сәйәси йәһәттән Сыңғыҙ хан реаль өҫтөнлөк ала. Тарихсы-ғалим Е.И. Кычанов та был ваҡиғаға ошондай баһа бирә: "Татарҙарҙы юҡ итеү Көнсығыш Монголияла Сыңғыҙ хан хакимлығын нығытыуға килтерә. Был Ван ханға принципиаль рәүештә зыянлы була, сөнки Сыңғыҙ ханды көсәйтә. Тәү мәлдә татарҙарҙы юҡ итеүгә шатланған Ван хан... көс балансының Темучжин файҙаһына булыуын шундуҡ төшөнмәй әле". Әгәр ул, онғот кенәзе Алаҡош тегин йәки уйшын Майҡы бей кеүек үк, баштан уҡ үҙенең әйттерелгән улы Сыңғыҙ ханды берҙәнбер хаким тип таныһа, уның улдары ла формалашыусы Бөйөк Монгол Олоҫоноң идара итеүсе аппаратына ингән булыр ине.

Әммә үҙ ханлығында данъшөһрәт ҡаҙанған Тогрул-Ван хан икенсе юл һайлай. "Монголдарҙың йәшерен тарихы"-на ярашлы, Сыңғыҙ хан һәр саҡта ла кирәйәттәрҙең хан династияһы менән дуҫлашып-туғанлашып йәшәргә ынтыла. Бер саҡ ул үҙенең улы Джучиға ҡатынлыҡҡа Ван хандың ҡыҙы Чаурбикәнең ҡулын һоратып, үҙ сиратында Ван хандың ейәне Тусахаға үҙенә туған булған Хочжинбикәне кәләшлеккә тәҡдим итә. Әммә Тогрулдың улы Сангун үҙҙәренең һәләкәтенең кият-борджигиндарҙан затлыраҡ булыуы менән маҡтанып, быға ҡаршы төшә. Был хәл Сыңғыҙ хандың күңелен Ван ханға һәм уның улы Нилха-Сангунға ҡарата һыуындыра бирә. Ошоно ишеткән Джамуха Сангун менән осрашҡанда уға, монголдарҙың наймандар менән берләшеп, кирәйәттәргә ҡаршы сығасағы хаҡындағы фекерҙе һеңдерә: "Минең андым Темучжин асыҡтан-асыҡ һәм даими рәүештә Наймандың Таян ханы менән илселек ойоштора. Темучжин һеҙҙе, һәр саҡ атай, тип һүҙҙә генә һанлай. Ә уның күңелендә, белһәң, икенсе нәмә ята".

Был саҡта кирәйәт ханлығында Ван хандың бер туған ағаһы Эрке-Ҡараның наймандар ярҙамында фетнә ойоштороуы онотолмаған була. Шуның өсөн Джамуханың һүҙҙәре ышаныс менән ҡабул ителеп, Сыңғыҙ хандың әйттерелгән туғандарына ошондай ҡарарға килергә ерлек бирә: "Барайыҡ та Темучжиндың олоҫон баҫып алайыҡ. Уның олоҫон тартып алғас, үҙ олоҫонан яҙҙырылғас, ул нимә эшләһен?" Уларға Ван хандың үҙ яғына ауҙарыу ғына ҡала. Ван хан үҙенең вассалы һәм әйттерелгән улына ҡаршы сығыу менән тиҙ генә ризалашмай. Әммә улы Сангундың еңмешлеге өҫкә сыға: "Мин бит, абайламайынса, Күкте асыуландырып ҡуйыу хаҡында ғына уйлайым, ә нисек итеп минә үҙ улымды ҡалдырырға, үҙ улым бит? Был - һеҙҙең эш: үҙ көсөгөҙ еткәндә генә эшләгеҙ!"

Байтаҡ йылдар дауамында Кирәйәт иле хакимы Тогрул-Ван хан менән Сыңғыҙ хан ныҡлы, ышанысьлы союздаш була. Татар, меркет, найман, таджиут һәм башҡа ҡәүемдәргә ҡаршы улар бергәләшеп походтар ойоштора, Монгол иленең төп хужаларына әүерелә. Әммә, боронғо төрки мәҡәленә ярашлы, мөнгелек күктә бер генә ҡояш була. Урта быуаттарҙа Үҙәк Азияла киң билдәле булған ошо сәйәси тандем да оҙаҡ йәшәй алмай. Был сәйәси яҡтан күтәрелеш кисергән Монгол иленең киләсәген билдәләй. Ике позиция бер-беренә ҡапма-ҡаршы була: Тогрул-Ван хан һәм ҡартая барған элекке монгол аҡһөйәктәре үҙ власына буйһонған халыҡтар менән һыйышып, тыныслыҡта йәшәүҙе хуп күрһә, Сыңғыҙ ханға теләктәш, юлдаш һәм яуҙаш булған яңы, пассионар төркөм үҙ ҡулы аҫтында бар донъяны буйһондороу идеяһын алға һөрә. Кемдәр быға ҡаршы - улар монгол ҡулынан һәләк ителә.

1203 йылда Ван хан һәм Сыңғыҙ хан ғәскәрҙәре араһында һуғыш башлана. Хәл иткес алыш Калаалджит-Элэт тигән урында була. Сангун етәкселегендә кирәйәт яугирҙары ҡаһарманлыҡ күрһәтә, хатта Сыңғыҙ хандың ғәскәренә еңелеү ҡәүефе тыуа. Әммә Сангундың бите монгол уғынан яраланғас, кирәйәт һөжүме туҡталып ҡала. Төн ҡараңғылығынан файҙаланып, Сыңғыҙ хан иҫән ҡалған яугирҙары менән - улар ни барыһы 2 600 кеше була - яу яланын ташлап китә. Ван хан уны эҙәрлекләмәй - ул Сыңғыҙ хан башҡаса үҙенә ҡаршы яу менән килмәҫ, тип иҫәпләй. Бер аҙ ваҡыт үҙыуға, Сыңғыҙ хан уға илсеһе аша ошондай һорау бирә: "Ниндәй ғәйебем өсөн һәҙер һин минә нәфрәтләнең, ханым һәм атам минең?" Ҡарт хандың күңеле йомшарып китә: "О, һәләкәт минә! Улымды ғына оноттомо ни мин? Ҡанун хәҡикәтен мин оноттом...".

Әммә был йомшаҡлыҡ Ван хандың трагик үлеменә килтерә. Сыңғыҙ хан шымсылары уға ҡарт хандың үҙенең алтын тирмәһендә, бер ниндәй һаҡлыҡ сараларын күрмәйенсә, мәжлес ҡороп, вайымһыҙ ғына һыйланып ятыуы хаҡында хәбәр итә. Тап шул мәлдә монгол яугирҙары, ҡапыл һөжүм итеп, кирәйәттәрҙе ҡырып ташлай. Ван хандың үҙенең әйттерелгән улы Сыңғыҙ ханға ҡарата артыҡ ышаныуы һәм дөрөҫ ҡарарға килә алмауы арҡаһында Кирәйәт ханлығы тар-мар ителә. Улар, татарҙарҙан айырмалы, һәләк ителмәй, ә төрлө өлөштәргә бүлгесләнеп, Монгол олоҫоноң төрлә төбәктәренә таратыла. Ван хан, Найман ханлығы яғына ҡасып барған саҡта, сик ҡарауылы яугирҙары тарафынан һәләк ителә. Найман хакимы Таян ханға уның башын алып киләләр. Ул яугирҙарына былай ти: "Ни өсөн ошондай бөйөк хакимды үлтерҙегеҙ? Уны тере килеш алып килергә кәрәк ине!" Риүәйәткә ярашлы, ул Ван хандың баш һөйәген, көмөшкә мансылдырып, үҙенең тәхетенә "бөйөклөк һәм хөрмәт" билгеһе итеп ҡуйырға бойора. Ә бына "Йәшерен тарих"та ошо трагик ваҡиғаның икенсе бер версияһы ла бар: үлтерелгән хандың башын аҡ кейеҙгә һалып, ҡорбан салыу ритуалын үҙғарған мәлдә ул көлөп ебәргән, ти. Таян хан: "Көләһеңме!" - тип, ҡысҡырып ебәргән, шунан башты тапап-тапап, иҙгеләп ташларға бойорған, имеш.

Уның улы Сангундың да тормошо фажиғәле тамамлана. Ул тәүҙә Си Ся (Көнбайыш Ся - тангут иле) дәүләтенә ҡаса, әммә унда ябай халыҡты талағаны өсөн тангуттар уны илдәренән ҡыуып ебәрә. Ул Көнсығыш Төркөстанға барып етә, әммә бында Сыңғыҙ ханға буйһонған уйғыр хакимы Кылыч-Кара уны үлтертеп, ҡатыны менән улын бөйөк ханға тапшыра. Шулай ҙа Сыңғыҙ хан кирәйәт ханының иң яҡын ҡәрҙәштәренә ҡарата миһырбанлы була.Ван хандың энеһе Джакамбаның ҡыҙы Әбикәбикәне ул үҙенә ала, уның һеңлеһе Биктотмышты улы Джучиға кейәүгә бирә; үҙенең кесе улы Тулуйҙы Джакамбаның Соркүктәни-бикә исемле өсөнсө ҡыҙына өйләндерә. Был ҡатын дүрт монгол ханының - Менгу ҡағандың, Хубилай ҡағандың, Хулагу хан һәм Ариг-Буғаның әсәһе була. Шулай уҡ Ван хандың Дугуз-хатун исемле ейәнсәре Хулагу хандың өлкән ҡатыны була, бүләсәре Урук-хатун Арғын ханға кейәүгә сыға. Күрәһегеҙ, Бөйөк Монгол Олоҫоноң байтаҡ ҡына ҡағандары, шулай уҡ Иран ил-хандары үҙҙәре лә өлөшләтә кирәйәт булып, йыш ҡына кирәй ҡыҙҙарын кәләшлеккә алған. Был Сыңғыҙ хандың йөш сағынан уҡ Монгол иленән затлы вә данлы Кирәйәт ханы нәҫеле менән туғанлашыу хаҡындағы хыялының ғәмәлгә ашыуын күрһәтә.

Тарихсылар билдәләүенсә, Ван хандың тар-мар ителеүе Сыңғыҙ хандың бар донъяны яулап алыу ниәтенә ҡамасаулаған һуңғы кәртәне емертеүгә тиң була.

Шулай итеп, Гәрәй этнонимын йөрөткән башҡорт ырыуының тарихи үткәненә мең йылдан ашыу ваҡыт уҙған. Гәрәй-кирәйәтҙәрҙең ата-бабалары ваҡытында бар донъяны тетрәткән Сыңғыҙ ханға ла буйһонмайынса, уның өҫтөнлөгөн һуңғы сиккә тиклем танырға теләмәгән. Кирәйәт ханлығы юҡ ителгәс, кирәйҙәрҙең көнбайыш яғы халҡы, күсеп китеп, хәҙерге Төньяҡ Ҡаҙағстан ерҙәренә тиклем килеп етә. Тап шул осорҙан башлап, башҡорт-кирәй бәйләнештәре хасил була. Кирәй халҡының бер өлөшө, Башҡорт иленә татар-монголдарҙың көнбайышҡа экспансияһы һөҙөмтәһендә килеп етеп, шундай уҡ бер ниндәй йыһангирға ла баш бирмәҫ ҡәүем составына ҡушылып киткәндер, тип тә фараз итергә була. Нисек кенә булмаһын, башҡорт кирәйҙәре, бер аҙ үҙгәртелә биргән гәрә йәиһә гәрәй этнонимы аҫтында Тарихи Башҡортостан ерлегендә XIII быуаттың тәүге сирегенән бирле йәшәй башлай. Шуныһы мөһим, гәрәй ырыуының иң күркәм ир-уҙамандары Алтын Урҙа дәүләтендә башҡорт үҙаллылығы хәрәкәте башында булып, башҡорт аристократияһын Джучи олоҫо хандарына һыр бирмәскә, үҙ мәнфәғәттәренә тоғро ҡалырға өндәй. Рус дәүләтенә ҡушылғас та, гәрәй ырыуы, башҡа башҡорт ырыуҙары менән бер рәттән, халыҡ ихтилалдарында әүҙем ҡатнаша, кантонлыҡ осорондағы хәрби хеҙмәттә һәм Рәсәй империяһы алып барған һуғыштарҙа башҡорттарҙың хәрби данын арттыра.

**Арыҫлан ТАЙМАСОВ**
**әҙерләне.**
**(Дауамы. Башы 39-сы һанда).**

---

*БӨЙӨК ЕҢЕҮГӘ - 75*



# ҠАҺАРМАНЛЫҠ ТАРИХЫ

## Бөтмәҫ дандары ҡалды

Лейтенант Хөсәйен Ғата улы Мирсаяпов йәш, теремек, уның күҙҙәрендә комсомолецтарға хас дәрт-дарман осҡоно сағыла. Уға бары 24 йәш кенә. Тыумышы менән Башҡорт АССР-ының Күсәрбай ауылынан. Уның эскадроны оборона тотҡан траншеялар тәртиптә, күрәһең, ул үҙенең яугирҙары менән күп шөғөлләнгән. Шулай ҙа, мин ҡарап сыҡҡан барса оборона райондарындағы кеүек үк, эшләп бөтөлмәгән нәмәләр ҙә байтаҡ. Мирсаяпов нимәләр эшләргә кәрәклеген тиҙ төшөндө, яҡын арала барса етешһеҙлектәрҙең дә бөтөрөләсәге хаҡында ышанысьлы итеп әйтте. Эскадрон командиры үҙенең ҡулы аҫтындағылар хаҡында бик яратып һөйләй.

- Былай егеттәр менән, - ти ул, - күп нәмә эшләргә була. Әгәр автоматтар ҙа күберәк булһа, теләһә ниндәй бурысты үтәр инек. Ә карабин менән генә немецка ҡаршы тороу ауырыраҡ булып китә...

Мирсаяповтың автоматтар етешмәүе хаҡында зарланыуы ғәҙел ине. Ул саҡта атлы ғәскәр ҙә, күп уҡсы частар ҙа, башлыса, карабин менән генә ҡоралланған ине. Полктарҙа тик берәр генә автоматсылар взводы булды.

Башҡорт дивизияһында шулай уҡ рус һәм украин милләттәренән булған офицерҙар бар ине. Бына 294-се атлы полктың 4-се эскадроны менән Николай Игнатьевич Колесник командалыҡ итте. Ул немецтар менән 1941 йылда уҡ һуғышҡан, яраланған һәм, һауыҡҡандан һуң, фронтҡа 112-се Башҡорт атлы дивизияһы составында килгән. Уның эскадроны полктың һул флангыһында оборона тотто. Уның иҫәбендә - 350-нән ашыу юҡ ителгән дошман һалдаттары һәм офицерҙары. Командование Николай Колесниктың боевой хеҙмәттәренә юғары баһа бирҙе - ул Боевой Ҡыҙыл Байраҡ ордены менән бүләкләнде.

Полктарҙы тикшереүҙә минең менән бергә дивизияның артиллерия начальнигы, капитан Мөнир Миндеяр улы Вәлиев ҡатнашты. Тәү ҡарамаҡҡа ул һөйләшеп-аралышып бармаҫ һәм үтә лә тартынызсан кеше булғандай тойолдо. Әммә уның менән яҡынданыраҡ танышҡас, Мөнир Миндеяр улының бик яҡшы, ихлас кеше икәнлеген белдем, ул үҙенең ҡул аҫтындағылар хаҡында һәр саҡта ла ҡайғыртыусан булды, офицер-артиллеристарҙы ғына түгел, дивизияның барса орудие командирҙарын тиерлек исемдәре һәм һуғышсан сифаттары буйынса белә ине.

М.М. Вәлиев көндәлек тормошта үтә тыйнаҡ булып, бер ваҡытта ла үҙенең урыны менән маһайманы. Минә уның менән дивизияның бөтөн боевой юлын Хавель йылғаһына тиклем бергә үтергә тура килде. Мөнир Миндеяр улы күп алыштарҙа үҙен ҡыйыу, батырҙарса тотто, штаттағы һәм дивизияға беркетелгән артиллерияны ҡулланыу буйынса ҡиммәтле кәңәштәр бирә ине. Һуғыш тамамланыуға ул полковник званиеһын алды. Ул артиллеристарҙың һәм дөйөм ғәскәри офицерҙарҙың оло хөрмәтен ҡаҙанды.

**Вәли ИҘРИСОВ**
**әҙерләне.**
**(Дауамы бар).**

✓ *Онотолған һәм юғалған үрнәктәрҙе табыу ҙа, яңыртып эшләү ҙә шулай уҡ бик һирәктәрҙең генә ҡулынан килә. Минеңсә, милли кейемде бөгөн бары тик дәүләт яҡлауы һәм дәүләт ярҙамы менән генә тергеҙеп була.*



**Эйе, күренекле этнограф Сергей Руденко шулай тигән: "Төрки халыҡтарҙың кейемдәре араһында иң бай, иң йөкмәткеле һәм иң төрлөһө - башҡорт ҡатын-ҡыҙҙарының кейеме". Әйтерең бармы, был - бик юғары баһа, ифрат абруйлы фекер. Башҡорт милли кейемен тергеҙеүгә кемдәр тотона һуң бөгөн? Кемдәр уны яҡшылап ентекләп өйрәнә һәм пропагандалай, кемдәр дөрөҫ эшләнешен аңлата һәм һирәк кенә ҡалған төп нөсхә экспонаттарҙы һаҡлай? Был эшкә башкөллө сумған рәссам һәм дизайнерҙар, модельерҙар һәм этнографтар, тарихсылар һәм музей хеҙмәткәрҙәре бармы? Шул уҡ ваҡытта был изге ҡомарткыларға алабарман тотоноусылар алдында ниндәй кәртә ҡуйыла? Башҡортостан Милли музейының реставрация бүлеге хеҙмәткәре Сәлимә УСМАНОВА һәм "Мәргән уҡсы" ойошмаһы етәксеһе Юлай ҒӘЛИУЛЛИН менән ошолар тураһында фекер алыштыҡ.**

**Ғалим-этнограф М.А.Круковский 1900 йылдарҙа уҡ ошондай оран ташлай: "...Башҡорттарҙың ошоғаса һаҡлап алып ҡалған берҙән-бер нәмәһе - үҙҙәренең биҙәктәре. Шулай итеп, арыу-талыу белмәгән егәрле башҡорт ҡатыны - үҙ халҡының сәнғәтен һәм гүзәллеген һаҡлаусы ул". Бөгөн беҙ башҡорт биҙәктәрен, милли кейемебеҙҙе шулай яҡшы беләбеҙме, таныйбыҙмы?**

**Сәлимә Усманова:** Кейем йәки биҙәүес ижад итеү - бо-Ленин урамы мөйөшөндәге "Кейеҙ үҙәге"н ябырға итәләр, Мәсәлимов шуға бик көйөнә. Унан башҡа бер кем яҡламай бөтә республикаға берҙән-бер үҙәкте. "Не до ваших сарматов", тип әйтеп һалған, ти, бер "хужа". Бындай мөнәсәбәт менән нисек йәшәмәк-эшләмәк кәрәк?

**Юлай Ғәлиуллин:** Этнография буйынса дөрөҫ белем алырға теләүселәр бөгөн һәр ҡайҙа етерлек. Күптән түгел Башҡорт дәүләт аграр университетынан шылтыраталар. сын, ҡамсат, көләпәрә, бүрек, ҡалпаҡ, түбәтәй, таҡыя...

**Сәлимә Усманова:** Боронғо кейемдәрҙе абайлап ҡараһаң, шул тиклем тормошсан, унайлы һәм кәрәкле монаяттар улар. Әйтәйек, һыбайлылар нисек кейенә? Ат еле, тигән тәбиғи шартты улар нисек иҫәпкә алмаһын? Ат еленә ҡаршы тегелгән уларҙың бөтә кейеме - шуға яйлашҡан, шундай ябай, ныҡлы һәм функциональ. Ғөмүмән, беҙҙә - башлыса тәбиғәттә йәшәгән башҡортта - бер кейем дә маУчалыла, халыҡта һаҡланмаған (яланбаш йөрөмәгәндәр ҙә инде!). Ә республика Милли музейында "Учалы ҡашмауы" бар.

**Беҙ Башҡортостандың төп Милли музейындағы "Башҡорт этнографияһы" бүлегенең бик шөкәтһеҙ һәм ярлы булыуы хаҡында беләбеҙ, ишетәбеҙ, хәлдәр үҙгәрәме?**

**Сәлимә Усманова:** Эйе, бүлектә күҙгә элерлек йүнле башҡорт милли кейеме өлгөләре юҡ. Улар алама, иҫке. Фондта бар ул йүнле экспонаттар, материалдар, әммә уларҙы эшкәртеү, тергеҙеү һаман һуҙыла. Улар, әлбиттә, ҡиммәтле алтын-көмөш биҙәүестәр менән биҙәлгән, уларға һәр кемде яҡын килтермәйҙәр. Бөрйәндәрҙең ҡашмауын, Ейәнсураның үҫәргән еләндәрен, Арғаяш муйынсаһын - бөтәһен бер манекенға кейҙергәндәр ҙә, шуның менән вәссәләм. Күргәҙмәне яңыртып та булмай, "все ветхо", тип ҡабул итмәйҙәр, сөнки бөтә нәмә алама, саҡ әләгеп тора. Ә реставрация өсөн материалдар, иркен урын кәрәк.

Минең реставрация эше буйынса махсус белемем бар. Мәскәүҙә Рәсәй этнография музейында музей реставраторы һөнәренә уҡыным, диплом алдым, практика үттем. Бында бөтә музей эшмәкәрлеге буйынса уҡырға мөмкин. Реставрация бүлегенә уҡырға инер өсөн художество мәктәбендә йә училищела белем алғаның хаҡында танытма, диплом кәрәк. Йәштәребеҙ уҡыһын ине, тим. Бергәләп эшләр инек. Югиһә, беҙҙә бер генә музейҙа ла милли башҡорт кейемен тергеҙерлек рухлы һәм махсус белемле башҡорт белгестәре юҡ.

**Башҡорт милли кейемен өйрәнеүҙе ниндәй төбәктәргә бүлеп ойошторағыҙ? Светлана Шитова дүрт төп төбәккә бүлә, Айгөл Камалиева ете төрлө төбәк кейемен айырып күрһәтә...**

**Сәлимә Усманова:** Әлегә кейемдәрҙе һәм ырыуҙарҙы улар күпләп йәшәгән райондарға бүлеп ҡарайбыҙ. Ҡыҙыҡ, әммә бер үк кейем шул тиклем тиҙ төрләнә - саҡ ҡына ситкәрәк китһәң дә айырыла. Әбйәлил менән Белорет райондары сигендә йәшәгән ҡатай ырыуы кейемдәре бөтөнләй башҡаса (ҡатай ырыуы үҙе лә әллә нисә ҡәүем-тармаҡлы бит). Бөрйәндәр Баймаҡта һәм Бөрйәнден үҙендә, Күгәрсендә, Миәкәлә, Туҡ һәм Ырон-борондан килгән айырым осталарҙың, төбәктә бөрөүикәү булған тегенсенең һәм зәргәрҙең һөнәри мираҫы. Онотолған һәм юғалған үрнәктәрҙе табыу ҙа, яңыртып эшләү ҙә шулай уҡ бик һирәктәрҙең генә ҡулынан килә. Миненсә, милли кейемде бөгөн бары тик дәүләт яҡлауы һәм дәүләт ярҙамы менән генә тергеҙеп була. Был эштең һәр аҙымын фәнни яҡтан нигеҙләү мөһим шарт. Минең дә аспирантурала һайлаған темам: "Милли кейемдең башҡорт ырыуына хас һыҙаттары". Этнография буйынса үҙебеҙҙә, Башҡортостанда, кисекмәҫтән ғилми уҡыу йорто асыу зарур. Унда уҡырға теләгән йәштәр етерлек, бик аҡыллы һәм төпсөр уйлағандары ла бар.

# БАШҠОРТ ҠАТЫН-ҠЫҘЫНЫҢ

## төрки халыҡтарының кейемдәре араһында



Аҡмулла исемендәге Башҡорт дәүләт пединститутының художество-графика факультеты деканы рәссам Тәлғәт Хәсән улы Мәсәлимов этнография кафедраһы асыу тураһында күптән, 1990 йылдарҙан бирле хыяллана. Тейешле белемле уҡытыусылар - этнографтар булһа, бөгөндән асыр инек, уҡырға теләүселәр шул тиклем күп, республикаға ла кәрәк ул кадрҙар, ти. Ҡыҙғаныс, әлегә был эш тотҡарлана. Китаптар, башҡорт милли кейеме буйынса әсбаптар ҙа яҙылыр ине. Лекцияла белгәненде, уҡығаныңды һөйләйһең, студенттарың яҙып бара. Дәреслек шулай яҙылыр ине. Етмәһә, нисә йылдан бирле Физкультура кафедраһында студенттарға өйрәтер өсөн милли уйындарҙы белешәләр. Мәҫәлән, "суҡмар ташлау" уйыны булғанмы ул, тиҙәр. Минеңсә, "суҡмар ташлау" тигән уйын булмағандыр. Суҡмар - яу һәм һунар ҡоралы, уны ташламайҙар, йәғни бәреп китмәйҙәр. Суҡмар менән "бүре һуғыу" бар. "Һөңгө ташлау" бар - ул "һөңгө ырғытыу" ярышы була ала. "Арҡан буйлау" йәки "ҡороҡ ташлау" - былар ҙа милли оһоллоҡ бәйгеһенә бер ярыш төрө. "Таш таштайым" тигән диалект һүҙбәйләнеш бар - ул бит "таш ырғытыу", "таш бәреү".

**Сәлимә Усманова:** Башҡорт батырҙарының "таш күтәреү" һәм "ташты баш аша ырғытыу" буйынса ла көс һынашыуы хатта әкиәттәрҙә тасуирлап һөйләнә. Беҙҙең халыҡ ижадында бик күп мәғлүмәт һаҡланып ҡалған, сүпләп-аңлап, уртаға сығараһы ғына ҡала.

**Юлай Ғәлиуллин:** Милли кейемдәрҙе өйрәнгәндә иһә, мин алдан уҡ һәр кемгә әйтеп ҡуям: "Мин башҡорт телендә һөйләшәм, ә баймаҡса түгел." Быны бына нисек аңлатам: бер үк кейем төрлө ерҙә төрлөсә аталып йөрөтөлә, эшҡорал атамалары ла айырыла. Шуға иғтибар итеү кәрәк. Функциональ ҡулланылышы, тегелеше, формаһы һәм башҡалары ана шул төрлө атамаисемдәрендә сағыла. Миҫал өсөн, ирҙәр баш кейеменең генә унлап атамалы төрө бар беҙҙә: көпәс, тупый, ҡолаҡтурлыҡ өсөн генә тәғәйенләнмәгән. Музейҙарҙа берәй кейем күрһәм, тиҙ генә кейеп ҡарайым. Һәр береһе хәрәкәтләнергә бик уңайлы, ҡыҫмай, быумай, тотҡарламай. Туҡымаһы, тегелеше - барыһын да нык уйлап, алдан күреп эшләгәндәр, шунан милләттең кейемгә талабы һәм зауҡы аңлашыла ла ҡуя. Ҡалпаҡтарҙы ла тәүҙә кейеп ҡарарға кәрәк. Көләпәрә (плащ-палатка) беҙҙең һәр һунарсыла, яугирҙа булған.

Күптән түгел Учалы музейында булдыҡ. Бик фәһемле бер нәмә һөйләнеләр: "Француз яулыҡ менән флүр яулыҡтың айырмаһын белмәй инек, таптыҡ",- тиҙәр. Ысынлап та, күптәр белмәй уны, ә учалылар шуны иҫбат итте. Рәссам һәм дизайнер Азат Ғарипов бер ваҡыт: "Ҡайҙа-кемдә боронғо яулыҡ бар, барыһын да йыйып килтерегеҙ", тип бөтә районға иғлан итә. Һәр яулыҡты айырым ҡарап сығалар. Шулай итеп, Учалыла ике йөҙ йыл элекке флүр яулыҡ табыла. Шулай уҡ селтәр, яға, түшелдерек, һаҡалдарҙы ла йыйып тикшергәндәр. Уларҙы дөйөм бер исем - "яға" тип йөрөтәләр ул төбәктә, бөгөн улар яғына хас традицион эшләнешле өс төрлө вариантта яға барлығы асыҡланған. Баш кейемдәре юҡ

***✓ Фән эшмәкәре кейемде фәнни яҡтан иҫбат итһен, фотограф һәр төрлө документаль һәм заман һүрәттәренән дөйөм картина булдырһын, шулай уҡ тегеү цехы, технологтары һәм кейем дизайнеры мотлаҡ кәрәк...***





# КЕЙЕМЕ - иң йөкмәткелеһе

ғыҙ буйында йәшәй, ә кейемдәре ғәләмәт төрлө. Силәбе менән Учалы районы сиктәрендә тамъян, табын кейемдәре шулай уҡ төрләнә. Ейәнсура менән Ырымбур яғы кейемдәре лә бер үк түгел, көньяҡ төбәккә ҡараһалар ҙа, ныҡ ҡына айырымлыҡтары, үҙенсәлектәре бар.

**Юлай Ғәлиуллин:** Бында бер шәп асҡыс, уңайлы юл бар. Башҡорт һөйләштәре! Диалект бик мөһим. Диалектты асыҡ белмәйенсә, беҙ кейемдәрҙе лә айыра алмабыҙ. Мин һәр ваҡыт тап ошо ерлектә, шул ауылда, шул арала кейем нисек аталыуына ныҡ иғтибар итәм, бөтә тәғәйен ҡулланылышы, тегелеше, эшләнеше, биҙәлеше уның исемендә күренә. Мәҫәлән, бер бүректең тегелешен генә лә әйтеп биреүсе әллә нисә терминлыҡ һүҙҙәр бар: "...бауы, түбәһе, маңғайы, ҡолағы, соңҡаһы, ялпағы, сикәһе, ҡамаһы һ.б." Этнографтар менән дизайнерҙар, телселәр бергә эшләргә тейеш. Башҡортостан Этнология музейында быға тиклем кейем буйынса телде яҡшы белгән бер башҡорт белгесе булманы. Әле лә юҡ. Нестеров исемендәге музейҙа "ҡашмау - татар кейеме" тип һөйләп торалар, ғәжәп инде...

**Сәлимә Усманова:** Бер дөйөм фәнни-ғәмәли үҙәк кәрәк. Был мәғәнәһеҙ тарҡаулыҡ тамам беҙҙе бөлдөрә. Мәҫәлән, бөтә тирә-яҡтан ғалимдарҙы саҡыралар, конференция, консилиумдар үтә, әммә беҙгә әйтеүсе юҡ, беҙ бит урындағы практиктар, ғәмәли эшләүселәр, милли кейемде тергеҙеүселәр. Яңыраҡ "Торатау" Конгресс-холына ҡырғыҙҙар саҡырылды - "Игры кочевников" темаһы буйынса. Башҡортостандағы кейем тергеҙеүсе рәссам-дизайнерҙарҙан бер кемде лә саҡырманылар. Ә беҙ үҙебеҙ белеп ҡалдыҡ та барҙыҡ, тыңлап булһа ла ултырырға тырыштыҡ. Ҡырғыҙҙар: "Беҙҙә практик яҡтан көслө уйынсылар бар, уйын төрҙәрен һәм ысулдарын яҡшы беләбеҙ, күрһәтеп бирә алабыҙ, ә Башҡортостан - милли уйындарҙы һәм кейемдәрҙе фәнни яҡтан өйрәнеү өсөн бынамын тигән урын, ғалимдар менән уйынсылар, кейем тегеүселәр һеҙҙә йыйылырға тейеш", - тиҙәр. Улар беҙҙең менән эшләргә теләй. Әммә...

**Тимәк, һеҙҙә бөгөндән ошо ырыу кейеме ошолай тип анығ ҡына күрһәтерлек комплекттар юҡ?**

**Сәлимә Усманова:** Әлегә тик теоретик эҙләнеүҙәр генә бара. Был эштәрҙе еренә еткерер өсөн команда кәрәк. План-программа буйынса эшләгән махсус Этно-Медиатөркөм булдырмайынса, былдай яуаплы эште яңғыҙ атҡарыу мөмкин дә түгел.

**Юлай Ғәлиуллин:** Ул Этно-Медиатөркөмдә бөтә белгестәр булырға тейеш. Фән эшмәкәре кейемде фәнни яҡтан белһен һәм иҫбат итһен, фотограф һәр төрлө документаль һәм заман һүрәттәренән дөйөм картина булдырһын, шулай уҡ тегеү цехы, технологтары һәм кейем дизайнеры мотлаҡ кәрәк... Беҙгә һәр бер айырым кейем һәм деталь буйынса белгес булыуы ла бик мөһим: ҡатын-ҡыҙҙар һәм ирҙәр кейеме, аяҡ кейемен тегеүсе (обувник), шулай уҡ уҡһаҙаҡ яһаусы оҫталар ҙа ҡушылһын. Грант ярҙамы кәрәк дәүләттән. Эш хаҡы ла кәрәк.

**Сәлимә УСМАНОВА:** Милли кейемде тектереп алыу өсөн Өфөлә тегенсе табып булмай. Тегенселәргә барам, ошо милли кейемде ошо чертеж йә фото буйынса тегергә кәрәк, тиһәң, бер кем дә ризалашмай. Барыһына ла тиҙерәк һәм күберәк еңел аҡса кәрәк. Юҡ-бар тегеп булһа ла ултыра, тик башҡорт кейемен тегергә теләүсе юҡ.

**Милли кейемдәр буйынса төрлө конкурстар, күргәҙмәләр, республика фестивалдәре ойошторола. Һеҙ уларҙа ҡатнашаһығыҙмы?**

**Юлай Ғәлиуллин:** Мин былдай шау-шыулы сараларға бик талапсан ҡарар инем. Бутафория кеүек еңел-елпе кейем ишараттары өсөн былдай конкурстар үткәрергә һәм ҡиммәтле призларҙы әрәм итергә кәрәкмәҫ ине. Бына әле "Ағинәй" йәмәғәт ойошмаһы ағзалары райондарҙа милли кейемдәрҙе ырыу үҙенсәлектәренә тап килтереү, дөрөҫләү маҡсатында "Хаталар өҫтөндә эш" тигән акция ойошторҙо. Улар һәр береһе үҙе белгәнсә эшләй, бик үк дәррәү тотоноп та китә алмайҙар, әлбиттә. Сөнки был эште дәррәү башҡарыу өсөн белгес-әйҙәүселәр кәрәк. Улар юҡ тиерлек. Ярай ҙа Учалы ағинәйҙәренең рәссам-дизайнеры Азат Ғарипов бар, улар бар эште бергә атҡара. Шуға уларҙың милли кейемдәр буйынса ла, биҙәүестәр буйынса ла күрһәтерлек комплекттары бар. Бына хәҙер сарыҡ, ҡата кеүек аяҡ кейемдәрен тергеҙеүгә тотонғандар. Тимәк, милли кейемде тергеҙеү белгестәр эше генә тип ҡарарға ярамай, ул шул уҡ ағинәйҙәрҙең дә, беҙҙең уҡсыларҙың да эше. Ләкин милли кейемде тергеҙеү аҡса эшләү маҡсаты менән еңел-елпе бутафория, киң ҡулланыу тауары яһаған кешеләр эше түгел. Шундайҙар ишәйеп китте.

**Сәлимә Усманова:** Быйыл 6 март көндө Милли музейҙа халыҡ-ара кимәлдә тиеп тороп түңәрәк ҡор ойошторҙоҡ. Мин Өфөләге Александр Кирдякин, Роза Юлдашбаева, Саимә Хәсәнова кеүек рәссамдарҙы, дизайнерҙарҙы саҡырҙым. Милли кейемде тергеҙеү менән шөғөлләнгән төркөмдәр ҙә ҡатнашты. Улар һәр береһе үҙенсә донъя көтә, аҡса табырға, йәшәргә тырыша. Ысынында иһә, улар күптән инде һәммәһе бергә, бер үҙәк, бер ойошма булырға тейеш бит. Мин үҙемде борсоған теманы күтәреп: "Һәр бер күргәҙмәлә ҡатнашырлыҡ төплө белемле, талапсан контролер-белгестәрҙән торған комиссия төҙөү кәрәк беҙгә. Кем ошондай комиссия составында булырға теләй?" - тигән һорау ҡуйҙым. Бер кем дә өндәшмәне. Ҡаршы сығыш яһаусылар булды.

**Юлай Ғәлиуллин:** Ысынында, милли кейемде тергеҙеүсе ағинәйҙәр ҙә, беҙҙең уҡсылар ҙа үҙҙәренә белем етмәгәнен аңлай. Дәреслек кеүек әсбаптар, каталогтар таптыралар. Мәҫәлән, "Бурда" журналы кеүек, һәр милли кейемдең тегелешен, үлсәмле өлгөләрен баҫып сығарырға кәрәк. Унда кейемдең тарихы, районы, кем кейгән, ҡайҙа һаҡлана, ниндәй тауарҙан тегелә, ниндәй биҙәк һалына, нисә тәңкә ҡуйыла- барыһын да билдәләргә кәрәк. Ошо эшкә кем тотонор икән, тип көтәбеҙ һаман. Ҡыҫҡаһы, тәүсығанаҡты беләйек, таныйыҡ, ата-балалар ҡомартҡыһына, нигеҙҙәргә, тамырҙарға таянайыҡ. Булған милли белемде барлайыҡ. Унда эштәр бихисап! Беҙ эшләмәй кем эшләһен, беҙҙең быуын үҙ эҙен һәм хеҙмәтен һалырға тейеш.

**Минеңсә, милли кейемдәрҙе тергеҙеү өсөн манҡортлоҡ һәм наҙанлыҡ, ялҡаулыҡ һәм ғәмһеҙлек шырлыҡтарын ҡыйып үтә торған ғәскәрҙең алғы һыҙығына баҫыуға ваҡыт етте. Тик әлегә был ғәмәлде атҡарыу өсөн рух ныҡлығы, тәрбиә етмәй, күрәһең...**

**Сәлимә Усманова:** Әлбиттә, былдай ҡомартҡыларыбыҙҙы баһалау, күтәрмәләү өсөн дә рух уяныуы кәрәк. Беҙ бит хатта Хоҙай бүләкләгән ерһыуыбыҙҙың, тыуған төйәктең дә ҡәҙерен белмәйбеҙ. Шулай булмаһа, әллә күпме ир-егеттәребеҙҙең эш артынан Себерҙәргә сығып олағыуын нисек аңларға? Ғаиләләрегеҙҙә балаларығыҙ атай тәрбиәһе күрмәй, тыуыр балаларығыҙ тыумай бит, тип нисек аңлатырға? Бынау эскелек тигән афәт тә иң тәүҙә милли-лекте юҡҡа сығара. Ә инде яһалма керпек, ҡабартылған ирен эшләтеп, төрлө салондарҙан матурлыҡ эҙләүсе ҡатын-ҡыҙҙарыбыҙҙы бөтөнләй аңламайым: матурлыҡ бит һинең үҙ асылыңда асылыуҙа, тыйнаҡлыҡта, шул уҡ милли биҙәүестәрҙә лә...

**Юлай Ғәлиуллин:** Үҙегеҙ беләһегеҙ, беҙҙең "Мәргән уҡсы"ла, белеүемсә, шул уҡ ағинәйҙәр араһында ла ошо милли рухиәт тәрбиәһе буйынса бик ҡеүәтле, әүҙем эш алып барыла. Беҙҙең "Мәргән уҡсы"ға, мәҫәлән, анһат ҡына ағза булып килеп инеп булмай. Рухһыҙҙар, халҡыбыҙ тарихын, уның ғөрөф-ғәҙәттәрен, милли кейем өлгөләрен тейешенсә белмәгәндәр беҙҙә ағза булып тора алмай. Беҙҙең ошондай тәрбиәүи сараларыбыҙ маҡсатлы, рухлы, битараф булмаған кешеләр сафын арттырыр, тип өмөт итәбеҙ.

**Сәлимә Усманова:** Бер уйлаһаң, барыһы ла үҙебеҙҙән тора. Һәр кемдә бар рух, тик ул ныҡ баҫылған, уны ҡуҙғатырға, уятырға ғына кәрәк. Мин ике йыл инде Республика халыҡ ижады үҙәге һәм Милли музей исеменән милли кейемде өйрәнеү һәм өйрәтеү буйынса семинарҙар ойоштороп, төбәктәрҙә йөрөйөм. Үҙем менән этнограф, тегенсе, дизайнер, технолог алып барам. Былтыр Ейәнсура, Асҡын, Мәсетлелә, шунан Өфөлә семинарҙар үтте, тиҙҙән Дыуанда йыябыҙ, тағы Магнитогорскиға бармаҡсыбыҙ. Семинарҙа ҡатнашыуҙың - инеү һәм өйрәнеүҙең хаҡы билдәле: бер кешенән өс йөҙ һум алына. Өйрәнмәгә 25-30 кеше йыйылыуы шарт. Йәнә бер шарт: һәр төбәктә, һәр ауылда ерлектәге кейем-һалымдың тулы күргәҙмәһе ҡуйылырға тейеш. Был күргәҙмә беҙҙең төп "сиҙәм". Өс көнлөк семинарҙа шул төбәктең өҫбаш мөлкәте, шул ырыуҙың кейеме өйрәнелә, технологияһы тергеҙелә, шунан яңы заман ҡулы-мәне менән ырыу кейеме тегелә! Оҙаҡламай Күгәрсен, Ейәнсура, Күмертау, Йылайыр, Хәйбулла яғына сығабыҙ, уларҙа милли кейемдәрҙә оҡшашлыҡ күп. Айырмалары ла бик ҡыҙыҡлы.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Дөрөҫ әйтә Сәлимә менән Юлай. Йөҙ йыл әүәл арҙаҡлы этнографтарҙы ғәжәпкә һалған бай һәм төрлө кейемдәребеҙҙең төп нөсхәләре музейҙарҙа бик наҡыҫ һәм ярлы күрһәтелеүе, уларға бағышланған китаптар, каталогтар һ.б. әсбаптарҙың тағы ла аҙ булыуы арҡаһында күптәр документаль фотоларҙа, журнал һәм китаптарҙа яҙа-йоҙа күргәненә таянып, "милли кейем" булдыра. Ысынлап та, был хәл күптәрҙе түбән сифатлы һәм ялған нәмәләр - "милли" ҡушаматлы биҙәүестәр һәм кейем төрҙәре эшләүгә этәрҙе. Бер оҫта әйтмешләй: "Милли кейемде тергеҙеүҙе етди ғилми эш итеп ҡарау булманы баштан уҡ, ә еңел уйын итеп ҡарау ғына булды. Биҙәүестәрҙе бик күп итеп эшләнек тә эшләнек. Традицион сама менән зауыҡты онотток. Хәҙер әллә күпме "тәтәйебеҙ" бар. Биҙәүес түгел - уйынсыҡ, кейем түгел - ҡылансыҡ! Уйнап туйҙылар хәҙер. Ни сувенир түгел, ни ҡый түгел..." Был әсенеүле һүҙҙәр сараһыҙҙан әйтелә. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, уларҙа дөрөҫлөк бар шул. Ә һеҙ нисек уйлайһығыҙ?**

Сәрүәр СУРИНА
әңгәмәләште.

✓ *Шулай күңелле генә тамамланды төшкө аштары. Ҡарты мунса яҡты, бер дәртләнгәндә урамын да көрәп инде. Уның был ҡыланыштарын тәҙрә аша күҙәтеп йөрөгән Сәйҙә телефон аша аралашҡан теге ир тураһында уйланы.*





Миләүшә ҠАҺАРМАНОВА

# ТЕЛЕФОН

(Хикәйә)

Ҡарты тышҡа сыҡҡандан файҙаланып, йәһәтләп телефонын эҙләргә кереште Сәйҙә ҡарсыҡ. Этен ашатып, шуның ашағанына тексәйеп тороп, маһмай менән һөйләшеп-иркәләтеп, унан яйлап бәҙрәф тарафына ла сәйәхәт ҡылып йөрөп киләсәк әле ул. Был хәлдең ярайһы ғына ваҡытты алырын белә ҡарсығы. Юҡҡамы ни, "сығып айҙанам" тигәнендә әбейен бурылдата-бурылдата ҡалын итеп телеп икмәк ала, калушлы быймаһын, куфайкаһын кейә, башына ҡолаҡсынлы кәпәсен батырып, ҡулына тиренән теgелгән йылы бейәләйҙәрен эләктерә. Кеше сығып ингәнсе шулай утынға барғандағылай итеп кейенәме икән? Яйлап йөрөрөн, йә кәртә яғына, йә баҡса яғына сығып, әле былай, әле тегеләй тексәйеп торорон белеп тә шулай кейенә ул. Сығып инәм, имеш...

- Ҡайҙа булған шул бынылы? - ҡабаланғанда телефоны ла табылманы. Яҡынса ятыр урындарын самалап байҡап сыҡты, тик күҙенә салынманы бәләкәй нәмә. Ваҡыты тығыҙ булған әбей бушҡа йүгермәләп йөрөй алмай ине һәм ул өй телефонын ала һалып, эргәһендәге дәфтәрҙән ҡарап, үҙенең һандарын йыйҙы. Кресло менән диван араһында ятҡан икән мәлғүн, сыйылдап тауыш бирҙе. Ҡыҙына шылтыратырға кәрәк уға, бая һөйләшкәндә бер нәмәне онотҡан икән. Өй телефонынан шылтыратыу ҡиммәткә төшә тип өйрәткән ҡыҙы, сотовыйҙан шылтыратыу кәрәк. Бая бабайы һөйләшергә форсат бирмәне. Ҡашын емереп, ишаралап, йәненә тейҙе. Әбейенең телефондан оҙаҡ һөйләшкәнен ене һөймәй. "Көнө буйы шунда лаңҡылдайһың", - тип һөрәнләп ебәрергә лә күп һорамай. Әйй, шуны!

Инде төймәләрҙе йыя башлағайны ғына, ишек аръяғында бабайының быуылып йүткергәне ишетелде. Инә һалып та килә. Сәйҙә лә ишек яғына ыңғайланы, тиктәҫкә улай йәһәт урамаған бит инде, тимәк, нимәлер булған. Әсҡәт ҡарт ингәс тә бер килке эйелеп сәсәп алды, һалҡын һауа ҡуҙғытҡан күрәһең тамағын. Ҡаршы килеп, тексәйеп торған ҡатынында эше булмағандай, шундағы эскәмйәгә ултырып, аяҡ кейемен һалды, бүреген элде лә, куфайкаһы төймәләрен ысҡындырып бөтөп, ҡуйынынан бесәй балаһы килтереп сығарҙы.

- Эһе! Шулайтҡан тей! - тип Сәйҙәһенең ҡысҡырыуын да яуапһыҙ ҡалдырып, аш бүлмәһенә үтеп, теге мәхлүкте бесәй һауыты эргәһенә төшөрҙө. Унының төшкән ыңғайы һауыттағы аш ҡалдығына йәбеште.

Бабайының һыуыҡсыҡа һөткә ыңғайлағанын аңғарып, ҡарсығы тағы екеренде:

- Сәйҙек кенә һөткә теймәыштубы!

Тик бабайы тыңлай торғаны бармы? Ҡойоп бирҙе тәки. Бесәй ҡалтырай-ҡалтырай булһа ла һөттө лә эсеп бөтөп, һауытын ялап уҡ ҡуйҙы. Ул был эш менән булған арала әбей менән бабай талашып та китте.

- Урамдағы бар берәҙәк бесәйҙәрҙе йыйып алдың инде, өй тулы бесәй хәҙер, - тип башланы Сәйҙә.

- Бесәй һиңә мишайттаймы? Үҙ алдына йөрөгән нәмәләргә нимәгә бәйҙәнәң? - тип бирешмәне ҡарты.

- Һинең шулай алйот икәнеңде белеп ҡалдыралар бит бесәйҙәрең ошо тирәлә!

- Алйот булһам да һинең һымаҡ яуыз түгелмен әле.

- Яуыз булмайым тип ней, әйҙә, бар, ана, бис йыйып ал берәҙәктәрҙе!

- Алһам алырмын да, һинән өрөхсәт һорап тормам. Минең пинсейәм өс бесәй аһырарға ғына етер әле. Бер тинен дә күргәнем юҡ, вис һин тотонаң, - тип тә һалды Әсҡәт.

Был хәбәргә әбейе оторо ярһып китте:

- Ай, алла! Бутта мин аның аҡсаһына яһанып-кейенеп ултырам! Анна бит, свиткә, газға, емгә китә. Һөтөн дә һатып алам. Һин бесәйҙәреңә эсереп бөтөп тораһың әле көнөнөкөн көнөнә...

Ҡарсыҡтың тауышы күтәрелгәнен ишеткән ике бесәй, зал түрендә ултырған ерҙәренән шым ғына төшөп, бабай ята торған бүлмәгә инеп сумды. Улар ҙа белә ҡасан ҡайҙа йәшеренергә икәнде. Был йортҡа үҙҙәренең саҡырылмай килеп, шул ҡарттың мәрхәмәтендә генә көн күргәндәрен дә аңлайҙар. Әбей бит уҫал, "пресс" тип эләктереп ебәрергә генә тора. Ярай әле әлеге бабай яҡлай. Бабай иркәләй, бабай ашата уларҙы.

* * *

Залға үтеп ултырып, телевизорҙың тауышын көсәйтә төшкән бабайына нимәлер һөйләүҙең дә, әрләүҙең дә файҙаһыҙ икәнен белгән Сәйҙә, ҡул һелтәне лә, оло дебет шәленә уранып сығып китте. Бәләкәй өйөндә ҡаҙҙары баҫып ята, кәртәләнгән мөйөштә һарыҡ бәрәстәре тора. Бәрәстәрен инәләренә ҡушҡас, мейес артында кибеп ятҡан утындарҙы үрелеп алып, усағына тоҡандырып ебәрҙе. Береһе шул мейес артында, икенсеһе урындыҡ аҫтында ултырған ҡаҙҙары һүҙ ҡушҡан шикелле ғығылдап тауыш бирҙе. Сәйҙә лә уларға яуапланы:

- Утырығыҙ-утырығыҙ, теймәйем һеҙгә, теймәйем. Әйҙә, матур ғына итеп баһып алығыҙ балларығыҙҙы...

Бындағы эштәрен барлағас, бәрәстәре имеп-уйнап туйғансы, уты һүрелгәнсе тип урындыҡҡа терәлгәйне, халат кеҫәһендә ятҡан телефоны иҫенә төштө. Туҡта, иркенләп һөйләшеп алһын әле! Алып ҡарап ебәрһә, экранында ҡабул ителмәгән бер шылтыратыу тора.

- Аһа? Кем был? - тип үҙ алдына һөйләнеп, исемһеҙ номерға тексәйеп тора бирҙе лә, шылтыратып ҡарарға булды. Гудок төшһә лә, теге яҡтан оҙаҡ ҡына алмай торҙолар. Инде һалайым тигәйне, берәү ашыҡмай ғына яуапланы:

- Дә-ә?

- Ней... ошонда шылтыратҡанһығыҙ бит?

- Шулаймы... - тип әйтеп тә өлгөрҙө ир тауышы, сәсәп тә китте. Трубкаһын ситкә алып, оҙаҡ ҡына сәсәне. Сәйҙә уны сабыр ғына көтөп торҙо ла, кире килеп тамаҡ ҡырғас:

- Ҡалай йүткерәһең! Ауырыйыңмы әллә? - тине.

- Сәсәтә әле, үтмәй, - тип ризалашты теге лә.

- Кәзә һаҡалы киптермәгәнһегеҙме? Шуны ҡайнатып эсһәң, ала торған. Йә берәй башҡа үлән. Ҡатының барҙыр бит, ҡарап алһа ней?

- Барын бар ҙа, минең ҡайғы юҡ анда, - тине ир битараф ҡына.

- Нишәп алай? - тигәнен һиҙмәй ҙә ҡалды быныһы.

- Ул шул кина ҡарай ҙа, унан бушаһа, әхирәттәре буйлап хайырсылай...

Шул урында Сәйҙә ҡарсыҡ теге яҡтағы ете ят кешегә йүткереүҙе баҫа торған әллә нисә юлды һөйләп-өйрәтеп ташланы.

- Ярай, эрәхмәт, шулайтып ҡарармын әле, - тип ҡәнәғәт ҡалды уныһы.

- Ауырыма, шәп бул, - тип хушлашты уның менән был яҡ.

Ир кеше тамаҡ ҡына ҡырҙы. Һаубуллашыуы шул булды, ахыры. Телефонын ҡолағынан алғас, Сәйҙә бер килке һеңгәҙәй биреп ултырҙы. Ниндәй бер... һөйләшеүгә һөйкөмлө генә әҙәм булды әле ул, тип уйланы. Ҡалай ғына сәсәй, бахыр... Ҡатыны була тороп, дауалап алһа, ни булған... йүнһеҙ. Ихлас ҡына бер ирҙе...

* * *

Ингәйне, бабайы һарыҡкәзәне, ашарға һалып, кәртәгә бикләргә сыҡты. Ул инеүгә Сәйҙәнең сериалы башланды. Бәйләмен тотоп, күҙлеген элеп алып, экранға терәлә яҙып ултырған креслоға сумды ла, донъяһын онотто. Әсҡәт иһә үҙ йүнен үҙе күреп өйрәнгән ҡарт, бәләкәй кәстрүлгә аш һалып йылытып эсте, бесәйҙәренә лә өлөш сығарҙы. Унан келәттә эленеп торған үләндәрҙе индереп, төнәтергә ултыртты. Кискелеккә мейес яғып ебәрҙе. Почта йәшнигенән гәзит-журналдар алып инде лә, бүлмәһендәге урынына ятып, шуларҙы уҡырға кереште. Өс бесәй уның өҫтөнә үк менеп алып, йомарланып яттылар. Яҙғы төн буранларға итте, ахыры.

* * *

Ике-өс көндән, бәләкәс өйө тупһаһына һыҡыған ҡарҙы көрәп йөрөһә, тағы ла кеҫәһендә йөрөткән телефонына шылтыраттылар.

- Әү! - тип алды ла, сәләмләүенән теге көн һөйләшкән ир икәнен танығас, көрәген ташлай һалып, эскә ашыҡты.

- Йүгереп йөрөйһөңме әллә? Ҡалай саҡ тын алып тораһың, - тип башланы һүҙен танышы.

- Ҡар көрәй инем, - тип яуапланы Сәйҙә.

- Нишләп һин? Ирең ҡайҙа?

- Көрәмәй бит, буран үткәненә ике көн, урамға калуш менән сығырлыҡ та түгел.

- Алай икән... Мин һин өйрәткәнсә итеп үләндәр эстем әле, бына, буйтым һауыҡтым, шуны әйтәйем тип шылтыратып торам, - тип күңелсәк кенә дауам итте ир тауышы.

- Яҡшы буған. Хәҙер сәсәүең үткәс, ҡатыныңдан арҡаңды һылат.

- Һылап ҡуймаһын...

- Һы-ы... Шулайтҡанда һәйбәт булыр ине. Бик булмаһа, мунса яғып, сабынып ал, унда ла ҡатыуҙарың йомшарыр, - тип тағы күп кенә кәңәштәр биреп ташланы был юлы ла Сәйҙә. Теге яҡ уны шым ғына тыңланы ла, ҡат-ҡат рәхмәттәр уҡып, "Бына бит, яҡшы ҡатын нисек була!" тип маҡтап һалып ҡуйҙы. Шундай күңеле булды ҡарсыҡтың. Үҙ алдына йылмайып ултырҙы. Була бит бына шундай ҡатындың күңелен таба, йылы һүҙ әйтә белә торған ирҙәр!

Төшкө сәй артында Әсҡәт әбейенә өндәште:

- Мунса яғайыҡ әле.

Сәйҙәнең сырайы ҡараңғылана төштө:

- Ай, Алла, ялды көтмәйекме? Ҡоҙоҡтан һыу һөйрәп, үргә ынтылып ҡойоп йөрөүе анһат тейеңме әллә? Баллар килһә, яғалар ҙа инде барыбер.

- Үҙем ташыйым һуң һыуын әтеү?

Был хәбәрҙән һуң әбей "Әллә яңылыш ишетәмме?" тигәндәй, тексәйеп ҡарап ҡуйҙы:

- Ыста! Һин һыу ташыһаң, ҡояш сыҡмай ҡуйыр ул иртәнгә, - тип көлөп тә алды.

- Ә нимә? Һыу ғына әпкилгәнем юҡмы әллә? - Әсҡәт ҡарттың күҙҙәрендә осҡондар тоҡанып китте хатта.

- Бар ҙа... тик бик-бик боронғо замандарҙа шул.

- Заманын ней уның... Хәҙер ташыйым мин уны!

Шулай күңелле генә тамамланды төшкө аштары. Ҡарты мунса яҡты, бер дәртләнгәндә урамын да көрәп инде. Уның был ҡыланыштарын тәҙрә аша күҙәтеп йөрөгән Сәйҙә телефон аша аралашҡан теге ир тураһында уйланы. Ул ир, моғайын, бындай эштәрҙе көн дә башҡаралыр, ҡатынына бер генә лә ауырлыҡ һалмайҙыр. Ундай кеше менән йәшәүе лә рәхәт инде. Шунда уның "Бына бит яҡшы ҡатын нисек була!" тигәнен иҫләне лә, тағы ла яҡшыраҡ булғыһы килде. Ул ир уны күҙәтеп торалыр, яҡшы булмаған урындарын белеп ҡалыр кеүек булып тойолдо. Шуғамы, иренә мунсаға алмаш кейем әҙерләп тотторғанда туңдырғыстан һары май ҙа алып һуҙҙы:

- Мә, ирей торһон, тораraҡ барып арҡанды һылармын...

* * *

Артабанғы көндәрҙә Сәйҙәгә телефоны тағы ла яҡыныраҡ, ҡәҙерлерәк була төштө. Ул хәҙер теге ирҙең шылтыратыуын көтөп кенә йөрөнө. Уныһы ла Сәйҙәнең өйҙән сыҡҡанын белеп кенә торғандай, һәр ваҡыт яйлы мәлгә тура килде. Уға үҙенең нимәләр эшләүен һөйләне, уны тыңланы. Ниндәй ҙә булһа кәңәш бирҙе, нимәһен дә ыңғайға һаплап хупланы. Ир ҙә үҙен маҡтап, рәхмәттәрен яуҙырып ҡына торҙо. Бабайына зарланып алырға ла онотманы, теге яҡ та ҡатынынан артыҡ ҡәнәғәт түгел ине. Шундай һөйләшеүҙән һуң Сәйҙә танышының ҡатыны тураһында әйтелгән "Кина ҡарауҙан башы сыҡмай", "Һөйләшеп тә ултырған юҡ" йәки "Мине ҡайғыртмай" тигәнерәктәрен үҙендә лә аңғарып ҡалды. Ул да шулайта түгелме һуң? Теге ир белеп ҡалһа - ҡалай оят.

Ҡамыр ҡуйып әсетеп алды ла, майҙа ғына йөҙҙөрөп, ҡабартмалар бешерҙе бөгөн. Унан ирен саҡырҙы:

- Әйҙә, тәмле итеп сәй эсеп алайыҡ әле. Берүҙең ултырып ашап тора ла китәһең атыу. Симъя түгелме әллә беҙ?

Ҡарты өҫтәлдәге һыйҙан бала кеүек шатланды:

- Үәт, әбей, ҡылғаның бит! Майикмәк бешереп ташланыңмы? Ниндәй тәмле еҫ сыға тип ятам. Дауна бындайҙы

ашатҡаның юҡ. Ай, малатса! Ай, малатса...

Оҙаҡлап һөйләшеп ултырып эстеләр сәйҙе. Үлән һалып тороп бешергәйне, тирләшеп, ҡәнәғәт булышып ҡалдылар. Күңеле ирегән ҡатын ире янына менеп теҙелешеп ултырған бесәйҙәргә һөт ҡойоп уҡ ҡуйҙы. Шунда ла теге ирҙең ҡатыны тураһында "Этбесәй яратмаған бер нәмә инде..." тип ысҡындырғанын да хәтерләне. Бына ул яратмаһа ла, түҙә әле, күнә, ире яратҡас шуларҙы, ҡалайтһын?

- Йә, ярай, бар, сериалың башланғандыр, - тине Әсҡәт әбейенә ахырҙа. Сәйҙә хайран булып көлдө:

- Аллаҡайым! Кина ҡарайың да, телефондан һөйләшәң, тип әрләгән кеше ҡайҙа булған?

- Ҡарап өйрәнгәнең бит инде, бығаса ҡарағасың, ҡарап бөтәһең инде. Бар-бар. Мин анау ҡоҙоҡтоң һыу һурҙырғыһын төшөп алдым әле, шуны әтмәләп ҡарайым хәҙер. Биҙрә менән һыу һөйрәп арыным тейең бит.

- Ә-әй, әттәгенәһе! Эшләп ҡуйһаң ҡана ла һуң! Һинән шәбе булмаҫ ине...

Ир менән ҡатын бөгөн ирешмәй-талашмай ғына тамамланы көнөн. Күптән, бик күптән булмағанса...

* * *

Тышта көндәр матурайғандан матурайҙы. Өйҙәге хәлдәр ҙә шул сама үҙгәрҙе. Ҡарты майлаған кеүек булды ла ҡуйҙы был арала Сәйҙәнең. Әйткәнде лә, әйтмәгәнде лә эшләй. Элекке һымаҡ, юҡҡа ирешмәй, екеренеп йөрөмәй. Хәҙер уларҙың һөйләшеп һүҙҙәре бөтмәй, ураған һайын сәйгә ултырыр булып алдылар. Күптән икеһе ике бүлмәлә ятҡан булһа, бер көн бабайы "күңелһеҙ" тип күсеп килеп тә ҡуйҙы әле. Үҙгәрҙе, ысынлап үҙгәрҙе, алыштырып ҡуйған кеүек булды. Улай тиһәң, Сәйҙә лә үҙгәрмәне түгел. Аш бүлмәһендә йышыраҡ ҡыбырлай башланы, икмәкте лә хәҙер һатып алмай, үҙе бешерә. Йүткереүенән дауалап алғайны, һуңғы мәлдә "аяғым тартыша" тигәнгә лә бер әмәл табып тәрбиәләй әле. Бик килешә үҙенә. Май кеүек иреп китә лә:

- Һинән ҡалдырып, бер көн дә тотмаһын инде Хоҙай, әбей, - тип ебәрә.

Шундай мәлдәрҙә Сәйҙәнең намыҫы ҡыҫып-ҡыҫып ала. Ул бит анау иргә ошо бабайын яманлап һөйләй. Ысынында, хәҙер бер ҙә генә насар түгел бит ҡарты. Киреһенсә, унан һәйбәте юҡ һымаҡ. Эйе, ҡуй, етәр, ул әҙәм менән башҡа һөйләшмәҫкә кәрәк, тип уйлай Сәйҙә. Ул да булдымы эш! Бабайы белеп ҡалһа, йәнен алыр.

Шулай хәл итте лә, телефонындағы теге һандарҙы юйып ташланы ҡатын. Ярай әле, ней исемен, ней кемлеген белмәй. Кәрәге лә юҡ! Шылтыратып фәлән ҡуйһа, ҡабат һөйләшмәйем, үҙ ирем, үҙ донъям бар, ваҡытым да юҡ, былай килешмәй ҙә, тип әйтер. Әммә теге ир ҙә башҡаса шылтыратманы. Сөнки ул да шулай хәл иткәйне...

*ТОРМОШ КҮРЕНЕШТӘРЕ*

# АҠТҮШ ФӘЛСӘФӘҺЕ

**Күп йәшәгән ни белгән, күп йөрөгән - шул белгән, тигән әйтем бар халыҡта. Ә бына Аҡтүш тыуғандан алып ошо үҙе элмәкләнгән өс метр сынйыр оҙонлоғонан ары йөрөгәне булмаһа ла, бик күпте күрҙе һәм күпте белә. Һис юғында, эт үҙе тураһында шулай уйлай. Был йортта хәҙер байтаҡ йәшәй инде. Кәмендә ун биш йыллап барҙыр. Оло ҡыҙҙары Зәлиәнең, ул сағында өс йәшлек ҡыҙыҡайҙың, һүҙен йыҡҡыһы килмәгән әсәһе күрше ауылдан алып ҡайтҡайны уны. Ҡасып китмәһен тип, ғаилә башлығы шунда уҡ көсөктө ауыр сылбыр тағып, ҡаҙаҡлап та ҡуйҙы. Быйыл Зәлиәгә 18 тула. Шулай булғас, яңылышмаған Аҡтүш.**



Эт ғүмере өсөн ун биш йыл аҙ түгел, әлбиттә. Яҡшы тәрбиә, матур мөғәмәлә күргәндәр генә ошо йәшкә тиклем йәшәй ала. Һәр хәлдә, шулай ти эт тотоусылар.

Ә Аҡтүш нисек йәшәне һуң? Ашау-эсеү яғынан, һис шикһеҙ, һәйбәт булды уның. Хужабикә айырым бешереп, тәрбиәләп ашатты. Ҡыҙҙар ҙа иғтибарынан ташламаны. Уларға рәхмәттән башҡа бер һүҙе юҡ. Шулай ҙа һәр ваҡыт көсөргәнештә йәшәүен уйлағанда, тормошон яҡшы тип әйтә алмай. Бына әле лә башын йәтешләп кенә алғы тәпәйҙәренә һалып ойоп ятҡан еренән һикереп торҙо. Хужа ҡапҡанан ингәндә йәки ихатала йөрөгәндә ятып ҡара! Әле лә ҡойроғон артыҡ болғамай ғына ғаилә башлығының күҙенә ҡараны. Шөкөр, уныһы ҡапҡанан инде лә, эткә иғтибар итмәй генә, ихатаға үтте. Бындай күренеш бик һирәк эләгә Аҡтүшкә. Юғиһә, бер ҙә юҡҡа ороша ла йөрөй. Үҙе ашатҡан кешеләй, ашауҙы ғына уйлап ятаһыңмы, әрәмтамаҡ, тип, теңкәһенә теймәй үтмәй. Өрһәң, нимә ләүкелдәйһең, ти. Өрмәһәң, үҙеңдең эт икәнлегеңде онотма, давай өр, һинең эшең шул, тип бәйләнә.

Уныһына ғына түҙергә була, тик ҡайһы берҙә бигерәк мыҫҡыл итә, мәсхәрәләй шул. Аҡтүш үҙе лә һиҙмәҫтән ҡалтыранып ҡуйҙы. Бәләкәй балалар епкә ҡағыҙ урап, бесәй балаһын уйнатҡан кеүек, хужаһының һөйәккә бау тағып, уны ауыҙға ҡаптым ғына тигәндә тартып алып, үҙенең этте һемәйтеүенән, уныһынан да бигерәк асыу ҡатыш хәсрәт тулы күҙен күреүенән мәҙәк табыуын яратмай ул. Ғөмүмән, хужаһы башҡаларҙан һәр ваҡыт айырылып торҙо: кеше көлмәгәндә уға ҡыҙыҡ, башҡалар көлгәндә, киреһенсә, уның асыуы ҡабара.

Бына әле лә аҙна-ун көн күрмәгән ғаиләһенең хәлен дә һорашмай, тупһаға етеретмәҫтән екерҙе:

- Ғәфләт йоҡоһо баҫтымы әллә бөтәгеҙҙе лә? Ямғыр килә бит! Аяҡ кейемдәрен соланға индерегеҙ. Керҙәрегеҙҙе йыйып алығыҙ, себештәрегеҙҙе ҡаплағыҙ. Ямғырға эләгеп кенә ҡараһын, үҙегеҙ күшеккәнсе өйгә индермәйәсәкмен, - шулай һөйләнә-һөйләнә өйгә инеп китте.

Ул әрләгән кешеләр, йәғни ҡатыны, ике ҡыҙы баҡса утай ине. Аҡтүш уларҙың екеренеүсегә тауыш бирмәй ҡалыуҙарын килештермәне. Хәҙер оторо ҡыҙыр инде, тип хәүеф тулы ҡарашын һарай артындағы баҡсаға йүнәлтте. Ул да булмай, хужаһы өйҙән елтәңләп килеп сыҡты ла, ихата яңғыратып һүгенеп тә ебәрҙе.

- Яуһа, бик яҡшы булыр ине әле, яумай ғына шул... - хужабикә тыныс күренә, әммә иренең битәрләүенән ҡатын күңеленә ялҡын ҡапҡанын бик яҡшы һиҙә ҡарт эт.

Яуындың әҫәре лә булмаһа ла, ҡатын ҡыҙҙары йүгереп йөрөп йыуылған керҙәрен йыйып алды, ҡош-ҡортто һарайға япты. Тупһала ҡулын бөйөрөнә таянып ҡарап торған иренә әйләнеп тә ҡарағыһы килмәгәнлеген һиҙә Аҡтүш. Бер айға тип эшкә китеп, ун көндән ҡайтҡан аталарын ҡыҙҙары ла һағынып өлгөрмәгәйне - улары картуф баҡсаһына йүнәлде. Ә әсәләре ҡулын йыуып, юлдан ҡайтыусыға табын әҙерләргә өйгә атланы.

Был йортта ҡасан булһа ла тыныслыҡ урынлашырмы, тигән уй йыш башына килә эттең. Былтыр бөйөрө ауыртыуына сыҙай алмай дауаханаға барған йорт хужаһын, эсһәң, оҙаҡламай үләһең, тип ныҡ ҡурҡытҡандар, ахыры, шул йөрөп ҡайтыуынан рюмкаға башҡа үрелмәне. Эсмәгәс, ғаиләһе ҡыуанды, тип уйлайһығыҙмы? Юҡ шул...

Иртә уңмаған кис уңмаҫ, кис уңмаған һис уңмаҫ, тигәндәре дөрөҫ икән боронғоларҙың. Ире эсмәһә, бөтәһе лә йайланыр, тип өмөтләнгән ҡатын күп тә үтмәй был уйынан төңөлдө. Быға тиклем эсеп, һуғышып, тынғылыҡ күрһәтмәгән ире хәҙер юҡ-барға бәйләнеп, ваҡсылланып тәҡәтен ҡорота. Үҙе тапҡан аҡсаның ғына түгел, ҡатынының кеҫәһендәгеген дә һанап, йәненә тейә. Туған-тыумасаға ла көн бөттө. Уларҙы нисек етте, шулай рәнйетеп, үҙҙәренә юлды ябып ҡуйҙы.

Шулай ҙа Аҡтүштең иң аптырағаны - ирҙең усаҡ-ҡаҙан тирәһендәге эштәргә ҡыҫылыуы. Күптән түгел бутҡаны бутап торһаң ғына бутҡа була, тигәнен ишетеп, күҙе маңлайына менгәйне. Ауылда аш-һыуға оҫта тигән даны сыҡҡан ҡатынына шулай аҡыл өйрәткәнен башына ла һыйҙыра алмай эт.

Ире эскәндә Аҡтүш хужабикәһенә сабырлыҡ теләне. Баҡһаң, түҙемлек һораған һайын һынауы ла өҫтәлә икән. Хәҙер ул ҡатындың сыҙамлы булыуын теләмәй, сөнки ирҙең эсмәһә лә күңеле боҙоҡ икәнен белә. Хужабикәһенең артабан да түҙеп, башын эйеп йәшәгәнен күргеһе килмәй. Былай ҙа күп сабыр итте. Ҡышҡы сатлама һыуыҡта ялан аяҡ күпме сығып йүгерҙе? Иҫерек абышҡаһының йоҡлағанын көтөп, эске күлдәксән көйө Аҡтүште ҡосаҡлап, эттең тән йылыһына йылынып ултырыуы ла бихисап.

Ә йорт хужаһының уның тиҙәгендә аунап ятҡан саҡтарының да иҫәбе-һаны юҡ. Тупһаһына барып етерлек хәле булмай, ҡапҡанан ингәс тә эт ҡыуышы янына йығыла торғайны. Айыҡ мәлендә төптө юҡҡа бәйләнһә лә, иҫерек сағында Аҡтүште ҡосаҡлап ятыр ине. Шулай нисәмә тапҡыр уны туңып үлеүҙән һаҡлап алып ҡалды. Эсеүен ташлағас, быларҙың бөтәһе лә онотолдо инде. Тегеләй үткәндә көзекләһә, былай уҙғанда тибеп китә этте. "Ярай мин бәйҙә торам. Ә бына үҙе уңған, үҙе матур ҡатынды нимә тота икән? Ҡайҙа барһа ла, юғалып ҡалмаҫ ине бит, - тип уйлай Аҡтүш. - Сабырлыҡты күп теләнем, бынан кире һорамайым".

Шул саҡ өйҙән бүре олоғанға оҡшаған тауыш сыҡты ла тынып ҡалды. Эт һиҫкәнде. Тауышты баҡсала эш менән булған ҡыҙҙар ҙа ишетте, күрәһең. Ҡобаралары осоп, йүгереп өйгә инеп киттеләр. Ҡарт эт ниндәйҙер ҡурҡыныс хәл тыуғанын бөтә күҙәнәктәре менән тойҙо һәм хужабикәһенә түҙемлек теләмәй, ҙур хата эшләүен аңланы: ҡатын иренең сираттағы ҡыйырһытыуын күтәрә алмай, бысаҡҡа үрелгәйне...

Ғүмер буйы ғаиләһенә, туғандарына көн күрһәтмәгән ирҙе аҡ халатлыларҙың ҡәҙерләп носилкала, ә кешеләргә тик яҡшылыҡ теләгән, матурлыҡҡа ғашиҡ булған, быға тиклем әҙәм түгел, себенде лә рәнйетмәгән ҡатындың ҡулын артҡа шаҡарып алып сығып китеүҙәрен күҙен әллә ни арала ҡаплаған томан аша ғына ҡарап ятты Аҡтүш...

Ғәҙел судтың иргә һалынған яраның үлемесле булмауын, ғаилә башлығының ғаиләһен рәнйетеп, көс ҡулланып йәшәүен, ҡатынды иһә, киреһенсә, ауылдаштарының тик яҡшы яҡтан ғына ҡылыҡһырлауын иҫәпкә алып, яратҡан хужабикәһенең аҡланып ҡайтыуын ғына күрә алманы. Йөрәге бер нисә айға һуҙылған ауыр ҡайғыны күтәрә алманы. Йәше лә оло ине шул...

**Лена АБДРАХМАНОВА.**

*БЕР КӘЛИМӘ ФЕКЕР*

# УЛ ҠАРСЫҠТЫҢ СӘЙЕ...

**Амбулаторияла эшләгән саҡта, яҙғы һыу-һүл осоронда, Гөлғәйшә ҡарсыҡҡа йөрөп укол ҡаҙаным. Үҙе лә килә ала инде ул, мәгәр ҡарт кешене бер ауыл осонан икенсеһенә йүгертеп йонсотҡом килмәне. Эш аҙағында бер аяғым бында, икенсеһе тегендә, тиҙ арала аша-төшә баҫып бара ла киләм.**

Аҙнанан ашыу йөрөнөм шулай, тәғәйенләгән дауаларым килешкәндер, инәйем дә күҙгә күренеп теремекләнде. Һуңғы уколды ҡаҙарға тип барғанда ул, рәхмәт йөҙөнәндер, бәләкәй генә табын әҙерләгәйне. Түрҙә ҡорһаҡ тирәһе йәмшәйеп бөткән еҙ самауыр борхоп йырлай, ыҡсым өҫтәлгә ни генә ҡуйылмаған: яңы айыртылған ҡаймаҡ, йомарсыҡ һыйыр майы, муйыллы ҡорот, майланған сейә, майланған бөрлөгән, еләк, ҡарағат ҡаҡтары, ҡурай еләге ҡайнатмаһы, талҡан, ҡомалаҡ икмәге, сөсө күмәс, бетәү картуф, бетәү йомортҡа... Иҫәпләй китһәң, осо-башына сығырлыҡ түгел, хатта ки төрөк солтаны, Бөйөк Британия королеваһы бындай һығылып торған һыйҙы һис ҡасан татып ҡарамағандыр, төштәрендә генә күреп, ауыҙ һыуҙары ҡороп ымһынмаһалар инде. Инәйем дә мәртәбәле ҡунаҡ ҡаршылағандай ҡыланып, тилбер йүгергеләй. Аштан оло булыу килешмәгән эш, бындай ҙа балыуан ризыҡтан баш тартыу гонаһ ғәмәл, шуға, ҡыҫтатмай ғына түргә үтеп ултырҙым. Ҡаршымдан урын алған хужабикә ҡырҡ ҡоршау сәйнүгенә услап һинд сәйен һалып ебәрҙе лә бер сите китек сынаяҡҡа яһалған ҡуян ҡанылай ҡайнар, ҡыҙыл сәйҙе алдыма ҡуйып, ауыҙ итеп ҡара, тип, уныһын-быныһын шылдырып тәҡдим итә башланы. Бер аҙҙан бер нигә ҡағылмай сәй һөрпөлдәтеүемә иғтибар иткән ҡарсыҡ үртәлгәндәй итеп ҡаҡ һөйәк усын маңлайына сәпелдәтте:

- Алйығанмындыр, күрмәйем шыпа, балам, әйтһәң ни була, алдыңа ҡорамал һалмағанмын бит! Мә, минеке менән аша, улайһа!

Шулай тине лә, Гөлғәйшә ҡарсыҡ ҡалағын эсле-тышлы ялап алып, уны итәге менән ентекләп ҡоротоп, миңә һондо. Мин дә үҙ сиратымда ҡалаҡты ихласлап алып, ауыҙыма ҡабып, алдымдағы ашамлыҡтарға үрелдем.

Гөлғәйшә ҡарсыҡ ирәбе, һыйсыл, ауыҙындағы һуңғы телемен өҙөп бирергә әҙер йомарт кеше ине. Шул таҙанан таҙа балғалаҡ әле лә хәтерҙә, инәйҙең бешергән тәм-томо һаман да телем осонда!

**Хәйҙәр ТАПАҠОВ.**

✓ *Башҡортлоҡ, рух беҙҙең быуындан ғына башланмай, ул беҙгә тиклем дә булған, ошо ерлектә йәшәгән һәм уны тарих туҙаны ла баҫа алмаған. Бары тик беҙгә ошо хаҡта күберәк һөйләргә, күберәк мәғлүмәт еткерергә кәрәк.*



ИНТЕРНЕТТАН



# БЕСӘЙЕҢ БАРМЫ?

■ Бесәй кешегә ыңғай йоғонто яһай икән. Дөрөҫөрәге, уның мырылдауы. Мырылдау нервыларҙы тынысландыра, көйәләнеү һөҙөмтәһендә күтәрелгән ҡан баҫымын нормаға килтерә. Күптән түгел асыҡланыуынса, бесәйҙең мырылдауы төрлө йәрәхәттәрҙе уңалдырырға ярҙам итә, шулай уҡ стрестан һәм тын ҡыҫылыуҙан һаҡлай. Ғалимдар иҫәпләп сығарыуынса, бесәй 150 Гц йышлығында мырылдай. Бындай йышлыҡтағы тауыш тулҡындары кеше организмына ыңғай йоғонто яһай икән. Тимәк, бесәй ысынлап та шифалы хайуан булып сыға. Өйөндә бесәй булған кешеләр йөрәк-ҡан тамырҙары, нервылар сирҙәре менән табипҡа һирәк мөрәжәғәт итә.

■ Ҡатын-ҡыҙ өсөн йәйәү йөрөү ифрат файҙалы. Аҙнаһына ике тапҡыр булһа ла йәйәү йөрөһәгеҙ, йөрәк сирҙәре хәүефен күпкә кәметәһегеҙ, ти Браун университеты кардиологтары. Тикшеренеүҙәрҙә менопауза кисергән 89 мең ғүзәл зат ҡатнашҡан. Уларҙың сәләмәтлеген 10 йыл дауамында күҙәткәндәр. Аҙнаһына 1 тапҡыр йәйәү йөрөүселәрҙең йөрәк сирҙәре менән ауырып китеү хәүефе 5 процентҡа кәмегән, аҙнаһына 2 тапҡыр саф һауаға сығыу иһә был хәүефте 20 процентҡа кәметкән. Йәйәү йөрөүҙең оҙайлығы 45 минуттан кәм булмаҫҡа тейеш һәм шәп итеп атлап йөрөргә кәрәк. Ҡатнашыусыларҙың тән ауырлығы һөҙөмтәгә бер нисек тә йоғонто яһамаған. Техасс университеты ғалимдары ла физик әүҙемлек йөрәкте йәшәртә, тигән белдереү яһағайны. Бынын өсөн 65 йәшкә тиклем күнекмәләр яһай башларға кәрәк, был мәлдә әле йөрәктең һығылмалылығы һаҡлана. Күнегеүҙәрҙе аҙнаһына 4-5 тапҡыр башҡарырға.

■ Һауа бысраныуы һөҙөмтәһендә донъя буйынса йылына 3,3 миллион кеше ваҡытынан алда үлә. Ғалимдар 35 йылдан һуң был һан 6,6 миллионға етеүе ихтимал, тиҙәр. Бигерәк тә сәләмәтлеккә озон һәм диаметры 0,0025 мм булған бәләкәй өлөшсәләр насар йоғонто яһай. Экологтар билдәләүенсә, төрлө илдәрҙә һауа бысраныуының сәбәптәре төрлөсә. Һиндостанда, Ҡытайҙа, мәҫәлән, йорт хужалығында ҡулланылған усаҡтарҙан сыҡҡан төтөн, АҠШ кеүек алдынғы илдәрҙә автотранспорт һәм электр станциялары, Европала ауыл хужалығы арҡаһында зыян килтерә. Көньяҡ-көнсығыш һәм көнбайыш Океания иҫәбенә был илдәрҙә ваҡытынан алда үлеү 2050 йылға йылына 6 миллионға тиклем етеүе бар. Ғалимдар ыңғай тенденцияларҙы ла билдәләгән, мәҫәлән, урман ҡырҡыу менән бәйле янғындарҙы иҫкәртеү үлем осраҡтарын кәметеүгә алып килгән. Урман ҡануниәте реформаһы һауала ваҡ өлөшсәләр концентрацияһын 30 процентҡа кәметергә мөмкинлек биргән.

■ Экзема - тиренең хроник инфекцион булмаған ауырыуы. Сирҙең барлыҡҡа килеүенә тышҡы факторҙар ҙа тәьҫир итә ала, ти белгестәр. Лондон колледжы университеты ғалимдары Бөйөк Британияла йәшәгән 1300 өс айлыҡ сабыйҙы тикшергән. Белгестәр һыуҙың ҡатылығы, ундағы хлорҙың концентрацияһы, тиренең һаҡланыу үҙенсәлектәре, экзема араһында бәйләнеште ҡараған. Һыуҙың ҡатылығы экзема хәүефен 87 процентҡа күбәйткән. Хлорҙың кимәле һөҙөмтәгә йоғонто яһамаған.

БЕҘҘЕҢ ӘҢГӘМӘ

**Уның тураһында ысын мәғәнәһендә "Күҙ алдында үҫте", тип әйтергә мөмкин. Әле мәктәптә уҡ ырыуын, шәжәрәһен өйрәнеп, шиғыр-ҡобайырҙар яҙып, төрлө сараларҙы башҡортса алып барыусы әүҙем уҡыусы булып танылһа, һуңынан БДУ-ның Башҡорт филологияһы һәм журналистика факультетын тамамлап, БР Яҙыусылар берлеге идараһы рәйесе урынбаҫары, "Башҡортостан" гәзитенең баш мөхәррир урынбаҫары, БР Мәғариф министрлығының мәғлүмәт-аналитика бүлеге начальнигы, Ағиҙел ҡалаһы хакимиәте башлығының социаль мәсьәләләр буйынса урынбаҫары - мәғариф бүлеге начальнигы вазифаларында эшләп өлгөрҙө. Быйыл ярым инде ул - Асҡын районы хакимиәте башлығы. Эйе, тап үҙе, йәш, рухлы милләттәшебеҙ Ришат Марат улы ДИХИН бөгөн беҙҙең редакция ҡунағы.**

# ЮҒАРЫ МӘҘӘНИӘТ КЕНӘ...

## рухи тамырҙарға һут бирә



**➔ Ришат Марат улы, республика көнө уңайынан Асҡында XV республика Шәжәрә байрамы үтте. Уны, рухығыҙҙы күтәргән сара, тип әйтә алаһығыҙмы, әллә рух асҡындарҙа күптән бар һәм ҡан хәтере аша ул бөгөн ҡабат уяныамы?**

- Тарихҡа күҙ һалһаҡ, Шәжәрә байрамы бынан 14 йыл элек тәүге тапҡыр беҙҙең Асҡын районының Ҡарткисәк ауылында башланып китеп, һуңынан уны республика кимәлендә үткәреү тураһында ҡарар ҡабул ителеп, инде юғары кимәлдә беҙгә ҡабат урап ҡайтты. Шуның менән дә ул беҙҙең өсөн ҙур әһәмиәткә эйә сараларҙың береһе булды. Тәү сиратта, кешеләр үҙҙәре архивтарҙа эҙләнеп, шәжәрәләрен эшләтеп, бер урам итеп ҡуйып, бик ҙур эш башҡарҙы. Ололар менән бергә йәштәрҙең, хатта балаларҙың үҙ шәжәрәһен төҙөүе ҡыуандыра. Ошондай сараның төньяҡ-көнбайышта, беҙҙең ерлектә үтеүе ҙур мәртәбә, шул уҡ ваҡытта ҙур яуаплылыҡ та булды. Беҙ тағы бер тапҡыр, Асҡын ерендә башҡорттар булған, бар һәм буласаҡ, киләсәктә лә беҙ үҙебеҙҙең тарихыбыҙҙы онотмаясаҡбыҙ, рухыбыҙҙы һаҡлаясаҡбыҙ, тигәнде раҫланыҡ.

Мин атайым ягынан үҙемдең 10 быуынымды беләм, бына ошо Шәжәрә байрамында әсәйемдең тыуған төйәгенән - Көнгәк ауылынан килтерелгән шәжәрәне күреп ҡыуандым. Уҙған быуаттың 70-се йылдарында был ауылда балаларҙы татар телендә уҡытһалар, бөгөн халыҡ ҡабат үҙ асылына ҡайта - шәжәрәләрен төҙөйҙәр, башҡорт телен, ғөрөф-ғәҙәттәрен өйрәнәләр.

Тағы ла мине аптыратҡаны - Ҡариҙелдән шәжәрәләрен дини китаптан күсереп яҙып баҫтырып килтергәндәр. Был бит үҙенә күрә бер феномен. Бына шулай, беҙҙең төньяҡ-көнбайыш төбәгендәге һәр райондың үҙенсәлекле шәжәрәһен күрһәтә алыуы байрамдың үҙенсәлеге бер мәле булды. Райондаштарыма рәхмәт, һәр береһе эҙләнергә ваҡыт табып, ҙур эш башҡарҙы. Советтар Союзы Геройы, Төлгәҙбаш ауылы батыры Сәлимйән Ғәлимйән улы Ғәлимйәновтың шәжәрәһен күреү ҙә беҙҙең өсөн ҙур ҡыуаныс булды. Ул мәктәптәрҙәге синыф дәрестәрендә, Ҡаһарманлыҡ дәрестәрендә йәки башҡа илһөйәрлек тәрбиәләү сараларында күрһәтеү өсөн күргәзмә әсбап булып торасаҡ. Дөйөм алғанда, ҙур эш эшләнде һәм республика кимәлендә районыбыҙҙан 17 шәжәрәне күрһәтә алғанбыҙ икән, был ысын мәғәнәһендә ҡан хәтере уянды, элекке ваҡыттарҙағы кеүек, теҙләнеп тормайбыҙ, ныҡлап тәпәй баҫтыҡ, тип әйтергә мөмкин.

**➔ Быйыл ысынлап та асҡындар бик әүҙем рәүештә архивтарға мөрәжәғәт итә, үҙ шәжәрәләрен юллай икәнен ишетә беләбеҙ. Был әүҙемлек көтөлгән хәлме?**

- Әле үткән Шәжәрә байрамы күрһәтеүенсә - улар барыһы ла архив эше, архив хеҙмәте менән бәйле эшмәкәрлек һөҙөмтәһе. Әлбиттә, айырым ғына кемдер шөғөлләнмәй, һәр кем шәхсән мөрәжәғәт итә. 17 шәжәрә күргәҙмәгә ҡуйылған икән, тимәк, ошо ырыуҙан кемдер йәки бер нисә кеше архив материалдарын өйрәнгән. Күбеһенең шәжәрәһе 1600 йылдарға барып тоташа. Башҡортостан Республикаһының Милли архивы эште бер ни тиклем еңеләйтте - архив материалдарын цифрлаштырып, сайтҡа урынлаштырҙылар. Быйыл беҙҙә бик күп ғилми-ғәмәли конференциялар үтте: тарихсылар, телселәр килде. Милли архивтың бүлек мөдире Зөлфәр Ғәтиәтуллин эҙмә-эҙлекле итеп архивта кемгә килергә, кемгә мөрәжәғәт итергә, кәрәкле мәғлүмәтте нисек табырға, тамырҙарҙы нисек эҙләргә икәнен аңлатты. Шундай ғәмәли конференциялар хатта ауылдарҙа ойошторолдо. Уларҙа районды тыуған яҡты өйрәнеүселәре ҡатнашты, ғалимдарҙан үҙҙәрен борсоған, ҡыҙыҡһындырған һорауҙарына туранан-тура яуап алды. Республика көнө уңайынан үткәрелгән Шәжәрә байрамында алған алты призлы урын ошо эшмәкәрлек, хеҙмәттәшлек һөҙөмтәһе булып тора ла инде.

**➔ Асҡын төбәгенең рухи уяныуы ҡасаныраҡ башланды: һеҙҙең быуын йәштәренәнме, әллә ул элек-электән йәшәйме?**

- Беҙ башҡорт ерлегендә тыуып, ырыуыбыҙҙы белеп, тарихыбыҙҙы быуынбыуынға тапшырып килгәнбеҙ, электән үк тамырҙарыбыҙ ныҡ булған һәм атабабаларыбыҙҙың көсө беҙгә тамырҙар аша бирелгән. Илдә, сәйәсәттә төрлө ваҡыттар булыуға ҡарамаҫтан, рух тере шишмә кеүек, барыбер үҙенең юлын табып, килеп сыҡты. Уҙған быуаттың 90-сы йылдарында дөрөҫ сәйәсәт алып барылыуы, телде, тыуған яҡты өйрәнеүгә иғтибар бирелеү, төрлө ғилми-ғәмәли конференциялар үткәрелеүенең һөҙөмтәһе былар.

Мин мәктәптә уҡығанда беренсе тапҡыр районда башҡорт гәзите ойошторолоп, унда минең Карамов Мөҙәрис бабайымдың әңгәмәһе баҫылып сыҡҡайны. Шунда ул нәҫелебеҙ башҡорт булыуын, кис йыйылып, ололарҙың йырлашып, ҡурай уйнап ултырыуҙары тураһында һөйләне. Тимәк, башҡортлоҡ, рух беҙҙең быуындан ғына башланмай, ул беҙгә тиклем дә булған, ошо ерлектә йәшәгән һәм уны тарих туҙаны ла баҫа алмаған. Бары тик беҙгә ошо хаҡта күберәк һөйләргә, күберәк мәғлүмәт еткерергә, шул уҡ ваҡытта үҙебеҙҙе республика, Рәсәй кимәлендә күрһәтеп, даныбыҙҙы танытырға кәрәк.

**➔ Өфөлә, Ағиҙел ҡалаһында арыу ғына тәжрибә туплап, быуын нығытҡас, тыуған районға етәксе булып ҡайтыуығыҙ үҙегеҙҙе "боҙло һыуға" ташлау булдымы, әллә "бойороҡ тикшерелмәй" тигән кеүек, ҡайҙа ҡушһалар - шунда барырға риза инегеҙме? Төбәктә ниндәй проблемаларҙы хәл итергә, ниндәй ауырлыҡтар менән осрашырға тура киләсәген дә күҙаллағанһығыҙҙыр?**

- Дөрөҫөн әйткәндә, мин бер ваҡытта ла ауырлыҡтарҙан ҡурҡманым, бәлки, эргәмдә ярҙам итеүсе, күтәреүсе, ҡулдан тартып торғоҙоусы кеше булмағанлыҡтандыр ҙа. Ниндәйҙер өлгәшкән уңыштарым бар икән - улар үҙемдең ныҡышмаллығым, эш яратыуым һөҙөмтәһелер, тием. Әлбиттә, юлымда һәр ваҡытта ла яҡшы кешеләр осраны. Шуға яҙмышыма рәхмәтлемен.

Бала саҡтан журналист булыу теләгем бар ине, шунан телевидениела эшләргә теләнем. Ошо теләккә өлгәшкәс, тағы ла ҙурыраҡ маҡсаттар ҡуйылды. Төрлө өлкәләрҙә эшләп өлгөрҙөм. Башҡортостандың халыҡ яҙыусыһы Рауил Бикбаев менән бергә эшләгәндә алған тормош тәжрибәһе һәм уның аҡыллы кәңәштәре бөгөн дә ярҙам итә.

Районға етәксе булып ҡайтыуға килгәндә, тыуған районым тураһында һүҙ сыҡҡас, төрлө яҡтан үлсәп ҡараным инде. Бер ни тиклем уйлағандан һуң ризалығымды бирҙем, сөнки Ағиҙел ҡалаһында эшләгәндә лә дәүләт хеҙмәткәре эшен яратып башҡарҙым. Ҡайтырға ри-

за булыуым тыуған яғымды һөйөү, яратыу булһа, яҡташтарыма ышаныуым да үҙ ролен уйнағандыр. Нимә генә тиһәк тә, һәр саҡ үҙ районыңды ҡарап, күҙәтеп бараһың, уңыштарына ҡыуанаһың, уңышһыҙлыҡтарына көйәһең. Ғөмүмән, ҡайҙа ғына эшләһәм дә, бер ваҡытта ла районымдан айырылманым, һәр саҡ бәйләнештә булдым, төрлө яҡлап ярҙам итергә тырыштым. Әлбиттә, был бик ҙур яуаплылыҡ, сөнки мин кемдер өсөн Ришат ҡына, кем өсөндөр Ришат Марат улы, кем өсөндөр синыфташ, кемдендер уҡыусыһы... Нисек кенә булмаһын, күпме эшләргә тура килә - шунса тыуған районым өсөн янырға, файҙалы эштәр башҡарырға, күңелемдә нимә бар - шуны халҡыма еткерергә әҙермен. Барыбер Асҡындың йөҙө, киләсәге үҙгәрер, тип өмөтләнәм.

➔ **Өфөлә саҡта "Их, Асҡында шуны эшләргә кәрәк ине", тип хыялланған проекттарығыҙ ҙа булғандыр?**

- Район үҙәктәрендә парктар әҙ бит инде. Шуға район үҙәгендә матур, фонтанлы парк булдырыу тураһында ҙур хыялым бар. Проектыбыҙ бар. Быйылкиләһе йыл уны эшләп ҡуйырбыҙ тип уйлайым. Икенсе ҙур планым-хыялым - ул юлдар. Сөнки район үҙәгенә тиклем ҡайтып етһәң, ауылға тағы ике сәғәт ваҡыт китә. Бөгөнгә көндә Асҡын - Үрмияҙ араһындағы юлды рәткә килтерә башланыҡ. Был турала БР Хөкүмәтенең ҡарары ла булды, аҡса ла бүленде. Ошо юлды тулыһынса эшләп сыҡһаҡ, юл ыңғайы булған 7-8 ауыл рәхәтләнеп ҡалыр, моғайын.

➔ **Йәш, энергиялы етәксе өсөн хәл итмәҫтәй проблемалар юҡтыр, әлбиттә, ә шулай ҙа һеҙҙән генә тормаған, һеҙҙе көйөндөргән нимәләр ҙә барҙыр?**

- Юлдар темаһын башлағас, төп проблемаларҙың береһе ошо, тип дауам итер инем. Быйыл Бөрйән районына ял итергә барғанда Мәһәҙей тигән бер бәләкәй генә ауылда булырға тура килде - ауыл урамына асфальт түшәлгән, ялтырап ята. Беҙҙең районда ҡайһы бер ауылдар район үҙәгенән 70-80 километр алыҫлыҡта урынлашҡан - юлдар юҡ. Икенсе проблема - ул инде газификация. Хәйбулла районын миҫалға алғанда, унда газ үткәреү 100 процентҡа үтәлгән. Ә беҙҙә был күрһәткес 36 процент ҡына. Шуға мин барыбер башҡа райондар менән сағыштырып, алдыма яңы пландар ҡуям һәм аҙымлап булһа ла алға барырға тырышам. 36-37 процентты тағы ла 10-15 процентҡа арттырғанда ла был яҡшы күрһәткес буласа́ҡ.

Өсөнсө проблема - төҙөләш. Ул шәхси төҙөләш, торлаҡ йорттар һалыу ғына түгел, төрлө социаль объекттар төҙөү. Балалар ижады йорто, музыка мәктәбе, ауылдарҙа клубтар төҙөй алһаҡ, бик яҡшы булыр ине. Сөнки күп объекттар уҙған быуаттың 30-60-сы йылдарында күтәрелгән һәм уларҙың торошо бик яҡшы ла түгел, ремонтларға күп аҡса китә. Заманса проект менән төҙөлгән яңы биналар барыбер башҡасараҡ тоҫ бирер ине. Әммә нимәлер төҙәр өсөн иң тәүҙә проект әҙерләргә кәрәк. Ә бер проектты экспертиза үткәреү 6-7 миллион һумға барып баҫа. Әлбиттә, райондың былдай аҡсаһы юҡ һәм ошо эштәр проект булмағанлыҡтан тотҡарланып тора.

Торлаҡ төҙөләшенә ҙур иғтибар бирәбеҙ, әле 8 мең квадрат метр майҙанлы торлаҡ төҙөп тапшыра алдыҡ. Бынан тыш, граждандар шәхси йорттар һала, район үҙәгендә яңы микрорайондар барлыҡҡа килә, тимәк, уларға юл һалырға, барлыҡ инженер-коммуникация селтәрҙәрен булдырырға кәрәк. Проектығыҙ газ да, һыу ҙа үткәреп булмай. Шундай ҡулса килеп сыға. Ә халыҡҡа һыуы ла, юлы ла, газы ла бөгөндән кәрәк.

➔ **Ауылдарҙа ғына түгел, тотош республикала эскелек проблемаһы ла бик киҫкен. Халыҡты айыҡ йәшәүгә ылыҡтырыу, уның гражданлыҡ позицияһын әүҙемләштереү маҡсатында "Айыҡ ауыл" республика конкурсы ойошторола. Асҡындар был конкурста ҡатнашамы?**

- Былтыр конкурстың муниципаль этабында 15 ауыл советынан 10 ауыл ҡатнашып, Ҡарткиҫәк ауылы республика кимәлендә еңеүселәр рәтендә булғайны. Быйыл беҙҙең районда муниципаль этапта барлығы 21 ауыл ҡатнаша. Был ауылдарға ингән ерҙә махсус эшләткән "Был ауыл "Айыҡ ауыл" конкурсында ҡатнаша" тигән алтаҡта элеп ҡуйҙыҡ. Район башҡорттары ҡоролтайы етәксеһе Фәйрүзә Фәяз ҡыҙы ауыл старосталары менән берлектә эште бик әүҙем башлап ебәрҙе. Бик актив эшләгән ауылдарыбыҙ ҙа, яңы саҡ уяныл килеүселәр ҙә бар. Былтыр һәр ауылға йөрөп, ҡатнашығыҙ, шундай саралар үткәрегеҙ, тип, өгөтләргә тура килһә, быйыл ауылдар үҙҙәре инициатива күрһәтә. Хатта һәр ҡайһыны "Беҙ еңәбеҙ" тигән маҡсат ҡуйған, матур-матур саралар уҙғаралар. Хатта шундай ауыл биләмәләре бар: биләмәгә биш ауыл инһә, барыһы ла ҡатнаша. Айыҡ ауыл ғына түгел, айыҡ биләмә номинацияһы булдырырға ла мөмкин. Петропавловка ауылы бәләкәй генә булһа ла, ошо конкурсҡа ҡушылып, балыҡ тотоу байрамы ла, велоуҙыш та ойошторҙо. Был велоуҙышта 6 йәшлегә лә, 60 йәшлегә лә ҡатнашты. Балалар мәктәптә плакаттар яҙып, шуларҙы тотоп урамға сыҡты. Ул бит ҡулы менән яҙһа ла, мәғлүмәт мейеһендә һаҡлана - шуныһы мөһим.

Ауылдарға был сара бик кәрәк. Былтыр еңеүсе булған Ҡарткиҫәк халҡы йыл дауамында төрлө саралар үткәрҙе, үҙҙәрен телевизорҙан ҡарап рухланды. Дөрөҫөн әйткәндә, үҙҙәрен-үҙҙәре күтәргән халыҡ йәшәй унда. Хатта уларҙы призлы урын алыу түгел, ә сәләмәт, айыҡ тормош алып барыу идеяһы нығыраҡ рухландыра, моғайын.

➔ **Быйыл республикала Башҡорт теле йылы бара. Асҡындар уны нисек ҡабул итте һәм был йүнәлештә ниндәй эшмәкәрлек алып барыла?**

- Дөрөҫөн әйткәндә, әле республика кимәлендә саралар башланмағанда уҡ районда беренселәрҙән булып Башҡорт теле йылын башлап ебәрҙек. Мәктәптәрҙә балалар туған телдә өйрәнә. Шәхсән үҙем сығышымды гелән ике телдә әҙерләйем һәм туған тел көнөндә мәктәптә яҡташыбыҙ Кирәй Мәргәндең ижады буйынса дәрес бирҙем. Башҡорт дәүләт университетынан быйыл этнолингвоэкспедиция килгәйне. Халыҡ өсөн был да онотолмаҫ матур ваҡиға булды. Хәтер яңыртылды, күңелдәрҙә һаҡланған ауыҙ-тел ижады өлгөләре, топонимика, тарих иҫкә төшөрөлдө.

Бер нисә мәктәптең 100 йыллыҡ юбилейын ҡотлап, "Арғымаҡ" этно-төркөмө килеүе лә рухландырҙы. Районда "Тере шишмәләр" тигән сара үтте, унда ошо ерлектә генә булған йолалар күрһәтелде. Онотола барған йолаларҙы ҡабаттан тергеҙеү ысын мәғәнәһендә тере шишмәләрҙең ер аҫтынан килеп сығыуына бәрәбәр булды. Шәжәрә байрамы сиктәрендә үткән Ырыуҙар парадына йыл башынан алып әҙерләнде халыҡ. Һандыҡтарҙан 250, 150, 100 йыл элек кейелгән кейемдәр килеп сыҡты. Шуларҙың һыҙмалары буйынса күлдәккамзулдар тегеп кейелде.

Шулай уҡ күптән түгел республика кимәлендә уҙасаҡ "Һылыуҡай" конкурсының һайлап алыу турының береһе, "Йәшлек-шоу"ҙың беҙҙә үтеүе лә туған телде пропагандалауға ҙур өлөш булды тиер инем. Республиканың Милли оркестры саҡырыуыбыҙҙы ҡабул итеүе, Фәйзи Ғәскәров исемендәге дәүләт академия халыҡ бейеүҙәре ансамбле килеүе халыҡта дәрт уятты. Был ансамбль Асҡын районына һуңғы тапҡыр бынан 55 йыл элек килеп сығыш яһаған булған. Әлбиттә, йыл үтер ҙә китер, әммә милләт, рух, мәҙәниәт, тел йәшәһен тиһәк, ундай сараларҙы үҙебеҙ даими ойоштороп торорға тейешбеҙ һәм ойошторорбоҙ ҙа тип өмөтләнәм.

➔ **Тимәк, ышаныслы итеп, Асҡын районы үҙенең 90 йыллығын иҡтисади, социаль яңырыу һәм рухи күтәрелеш менән ҡаршы ала, тип әйтергә мөмкин...**

- Район ойошторолоуға 90 йыл тулһа, уның иҡтисади үҫешендә ҙур роль уйнаған "Танып" шифаханаһының барлыҡҡа килеүенә - 15 йыл. Мортаза Ғәбәйҙулла улы Рәхимовтың башланғысы бөгөн матур һөҙөмтәләр бирә һәм беҙ уға бик ҙур рәхмәтлебеҙ. Уның идара иткән ваҡытында төҙөлгән социаль объекттар барыһы ла яҡшы эшләп килә. Шулай уҡ миңә тиклем районды етәкләгән барлыҡ етәкселәргә лә рәхмәтлемен, сөнки улар ошо вазифаны күпме биләгән - ошо осорҙа һәр ҡайһыһы район өсөн көсөн, тәжрибәһен һалған, эшләргә, районддың данын күтәрергә тырышҡан. Минең был вазифала эшләүемә әле йыл ярым ғына, шул арала күкрәк һуғып әйтерлек эштәр ҙә булмағандыр. Әлбиттә, проекттар бик күп, уларҙың һәр береһен аңлап, уйлап, үҙгәрештәр индерергә тура килә. Барыһы ла һинең теләктән генә лә тормай, финанс яҡтан да ауырлыҡтар бар. Дөйөм алғанда, районды бөгөнгө хәлен яҡшыртыу һәм республика кимәлендә танытыу кәрәк. Дөрөҫөн әйткәндә, хатта ҡайһы берәүҙәр Башҡортостанда Асҡын районы бар икәнен дә белмәүе ихтимал. Шуға күрә республиканың көньяғында - Сибай, төньяғында - Нефтекама форпост булһа, төньяҡкөнбайышта ул Асҡын районы булырға тейеш.

Үҙем мәғариф һәм мәҙәниәт өлкәһендә эшләгәс, ошо өлкә буйынса етәкселәр менән шәхсән танышмын һәм шул өлкәләргә нығыраҡ иғтибар бирәм. Йәштәр лайыҡлы белем алып, уларҙа юғары мәҙәниәт тәрбиәләһәк, улар төрлө уҡыу йорттарында уҡып, кире тыуған яғына ҡайтһа ғына районыбыҙҙың киләсәге буласаҡ, иҡтисади, социаль хәле лә яҡшырасаҡ, сөнки һәйбәт кадрҙар икенсе төрлө уйлай, ҡараштары башҡа, заман менән бергә атлайҙар. Шуға, һуңғы арала күп кенә йәш кадрҙарҙы ҡайтарыуға өлгәштек. Район советына ла, ауылдарҙа ла бик күп йәштәр депутат итеп һайланды.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Ришат Марат улы менән әңгәмәләшкәндә уның хаҡында Асҡын районы башҡорттары ҡоролтайы рәйесе, "Надежда" редакция-нәшриәт комплексы етәксеһе Фәйрүзә Юнысованың әйткәндәренә тағы бер тапҡыр инандым: "Ришат Марат улынан рух бөркөлөп торған өсөн районда шундай рухлы эштәр тормошҡа ашырыла. Уның бөгөн башҡарған эштәренең емештәре тағы ла әллә күпме ваҡыт үткәс күренер әле. Бер ниндәй сәйәсәт тә, бер ниндәй иҡтисад та мәҙәниәтһеҙ йәшәй алмай. Тарихҡа күҙ һалһаҡ та, ниндәй генә ауыр мәлдә лә халыҡ йыр һуҙған, бейеү һалған. Юғары мәҙәниәт кенә рухи тамырҙарға һут бирә, юғары мәҙәниәтле кеше генә иҡтисадты ла, сәйәсәтте лә күтәрә ала. Ошо хәҡиҡәтте аңлап эш итә беҙҙең йәш, энергиялы, рухлы етәксебеҙ..."**

**Зәйтүнә ӘЙЛЕ**
**әңгәмәләште.**

---

*УҢЫШ ҠАҘАН*



# ҒҮМЕРҘӘР ЗАЯ ҮТМӘҺЕН

**43-сө идея**
**Ысын мәғәнәһен күрергә**

Һин берәй ҡасан һуғыш тыуҙырған кешенең ҡолағы тураһындағы тарихты ишеткәнең бармы?

Сәйер, әммә был дөрөҫ. Бер кеше ҡолағы халыҡтар араһында ҙур һуғыш тыуҙырыуға сәбәпсе булған заманалар булған. Был ҡолаҡ Англияның дингеҙ капитаны Дженкинс фамилиялы кешенеке булған. Испандар, Дженкинс үҙен намыҫлы итеп күрһәтергә теләһә лә, ысынында иһә, улай түгел, тигән ҡарарға килгән. Улар уны пират тип иҫәпләгән, һәм ҡулдарына килеп эләккәс, тотҡандар ҙа ҡолағын киҫеп ырғытҡандар. Ғәҙелһеҙлектән шартлар сиккә еткән Дженкинс, Англияға ҡайтҡас, монархҡа килеп зарланған. Ул саҡта инглиздар испандарға ҡаршы һуғыш асыу өсөн һылтау ғына көткән, шуға күрә был ваҡиғаны ҙур һуғыш иғлан итеү өсөн файҙаланалар. "Дженкинс ҡолағы арҡаһында килеп тыуған һуғыш" тип атала ул.

Әгәр миңә ышанмаһағыҙ, китапханаға барығыҙ ҙа үҙ күҙегеҙ менән уҡып сығығыҙ. Англия менән Испания араһында ысынлап та ҡасандыр "Дженкинс ҡолағы арҡаһында килеп тыуған һуғыш" булараҡ билдәле алыш булған.

Һәм бына нимә тип һорарға теләйем: бөгөн һинең ҡолағың арҡаһында һуғыш сығырмы? Күреүегеҙсә, һаҡ ҡолаҡ - тойоусан, һиҙгер ағза. Ул кешенең тауыш бәйләүестәре вибрацияһын ғына тотоп ҡалмай, ә һүҙҙәр артында торған, яфаланыу, нәфрәт, шикләнеү, шатлыҡ, һөйөү кеүек тойғолар сағылышын да һиҙеп ҡала. Ул күп һуғыштарҙың ҡабынып китеүенән ҡасырға мөмкинлек бирә.

Бөгөн урамға сыҡҡас, үҙ-үҙеңдән: "Ҡолағым ни тиклем һиҙгер икән?" - тип һора. Көтмәгәндә урамда танышыңды осратып, уның һүҙ араһында: "Нинә үҙ эштәрең менән шөғөлләнмәҫкә инде?" - тигән һүҙҙәре ҡолағыңа салынғас, бынан асыу, нәфрәт, рәнйеү ишетәһең. Йәки: "Минең күңелем һыҡрый, тамағыма төйөр тығылған, уны бер нисек тә йотоп ебәрә алмайым. Уның тураһында һөйләргә лә теләмәйем, сөнки оялам. Ошо эске кисерештәремде, һыҙланыуҙарымды еңергә ярҙам итһәңсе миңә". Был һүҙҙәрҙе ишетәһеңме, әллә "Нинә үҙ эштәрең менән шөғөлләнмәҫкә инде?" тигән һүҙҙәр һинең өсөн һуғыш иғлан итеү кеүек яңғыраймы? Һәм һин бер һүҙ ҙә әйтмәй, үтеп китерһеңме? Иғлан ителмәгән һуғыш иғлан ителә, һәм ҡасандыр яҡшы дуҫтар булған был икәү оҙаҡ ваҡыт бер-береһе менән һөйләшмәй, аралашмай йөрөй.

Йәки урамда кемдер һиңә "Күҙемдән юғалһаңсы!" тине, ти. Һин нимә кисерерһең? Асыуындан шартлар хәлгә етерһеңме? Әллә был һүҙҙәр артында төшөнкөлөк йәки яңғыҙлыҡ тойғоһо йәшеренеүен айыра алырһыңмы? Был һүҙҙәр артындағы яралы, рәнйетелгән күңелде күрерһеңме? "Күҙемдән юғалһаңсы!" тигәндәрен ишетеп тә һуғыш башламаҫ өсөн ҡолағың етерлек һиҙгерме?

Әгәр һин үҙ Ижадсыңа һәм яҡындарыңа хеҙмәт итергә (был һүҙҙең юғары мәғәнәһендә) теләһәң, сит һүҙҙәргә иғтибарлы ҡолаҡ һалырға һәм уларҙың ысын мәғәнәһен айыра белергә тейешһең. Шулай эшләгәндә, үҙеңде солғап алған донъяға тыныслыҡ һәм гармония алып инерһең һәм "Дженкинс ҡолағы арҡаһында килеп сыҡҡан һуғыш" сәбәбенә әйләнмәҫһең.

**Роберт ЭНТОНИ.**
**(Дауамы бар).**

✓ *Булмаған нәмәһе өсөн ҡайғырғандар түгел, ә булғанына шатлана белгәндәр аҡыл эйәһе булыр.*

*(Демокрит).*



БАШ ЭШЛӘТМӘК

# ХӘҠИҠӘТТЕ БЕЛМӘҮ ҒӘЙЕП ТҮГЕЛ, БЕЛӘ ТОРОП КҮРМӘҮ - ҒӘЙЕП




Йәмилә ШӘРӘФЕТДИНОВА төҙөнә.

**41-се һандағы сканворд яуаптары.**

**Горизонталь буйынса:** Сабаҡ. Иҙрисов. Ҡыуаҡ. Мискә. Әре. Йыртҡыс. Бисквит. Әүлиә. Егерме. Боинг. Асы. Шәкүр. Сама. Ҡаҡ. Ғасыр. Взвод. Сари. Ирәндек. Рубик. Аҡһаҡал. Ислахов.

**Вертикаль буйынса:** Бикбаев. Мәсәлимов. Венгр. Иләк. Родари. Әйтеш. Сарыҡ. Арҡан. Диуана. Ултырғыс. Акира. Ваҡ. Лев. Әсә. Шағир. Үпкә. Иҙеү. Өшә. Рюрик.

СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ

## М. Ғафури исемендәге Башҡорт академия драма театры

**21 октябрь "Һөйәһеңме - һөймәйһеңме..."** (Ф. Бүләков), трагикомедия. 12+
**22 октябрь "Ҡыҙ урлау"** (М. Кәрим), комедия. 12+
**23 октябрь "Әбейүшкә@түщкә.ru"** (Р. Кинйәбаев), заманса комедия. 12+
**24 октябрь "Ул бит кисә ине"** (А. Әхмәтғәлиева), лирик комедия. 18.00 12+
**25 октябрь "Йүгер, Харис, йүгер..."** (Э. Йәһүҙин), комедия. 18.00 16+

## М.Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры

**21 октябрь "Үлмәҫбай"** (М. Кәрим, З. Бураҡаева). 12+
**22 октябрь "Башҡорт туйы"** (М. Буранғолов), романтик драма. 12+
**25 октябрь "Айболит и Бармалей"** (К. Чуковский), мюзикл. 12.00 0+
**"Ханума"** (А. Цагарели), музыкаль комедия. 18.00 12+

## Башҡорт дәүләт ҡурсаҡ театры

**20 октябрь "Мустай Карим. Близкий горизонт"** (В. Аношкин). 19.00 12+
**22, 23 октябрь "Любовное приключение"** (В. Аношкин). 19.00 18+
**24, 25 октябрь "Коза-дереза"** (М. Супонин). 12.00, 14.00 0+ **"Етем төлкө"** (О. Штырляева). 16.00 0+

## Х. Әхмәтов исемендәге Башҡорт дәүләт филармонияһы

**27 октябрь** Ш. Бабич һәм Ғ. Әлмөхәмәтовтың тыуыуына 125 йыл тулыуға арналған музыкаль-әҙәби кисә. 6+

ИШЕТТЕГЕҘМЕ ӘЛЕ?

# ФЕРМЕРҘАРҒА...

**Россельхозбанктың "Агростарт" тип аталған кредит тәҡдиме яңы ойоштороласаҡ фермер хужалыктарын финанслауға тәғәйенләнә, уны 2020 йыл һуңына тиклем алырға мөмкин.**

Мәғлүм булыуынса, Рәсәйҙә фермер хужалыҡтарының роле арта. 1992 йылда ауыл хужалығы продукцияһын етештереүҙә уларҙың роле 1 процент тәшкил итһә, быйыл был һан 14 процентҡа еткән һәм артабан да үҫеүе көтөлә. "Үҫеште дәртләндереү өсөн ауыл хужалығы бизнесына уның талаптарына яуап биргән финанс ярҙам кәрәк. Беҙ бик күп фермер хужалыҡтарының һәм АККОР ышаныслы партнерыбыҙҙың теләктәрен иҫәпкә алып, "Агростарт" продуктын эшләнек. Ул дәүләт ярҙамы менән файҙаланырға теләмәгән яңы эш башлаған фермерҙарға тәғәйенләнә", - ти Россельхозбанктың идара рәйесе урынбаҫары Екатерина Орлова. "Агростарт" инвестицион һәм ағымдағы маҡсаттар өсөн 5 миллион һумға тиклем ярҙам алыу мөмкинлеген бирә, шул уҡ ваҡытта заем алыусының үҙ средстволары әлеге финансланған проект хаҡының 50 процентынан да кәм булмаҫҡа тейеш. Инвестицон маҡсатта кредитлауҙың иң ҙур мөҙҙәте (ауыл хужалығы тәғәйенләнешендәге ер участкалары, күсемһеҙ милек, йәш малдар, техника, ҡорамалдар алыу) - 10 йылға тиклем. Ағымдағы маҡсатта файҙаланыу өсөн - 2 йылдан да артмаҫҡа тейеш.

# ЭЛЕКТРОН ВИЗА

**РФ Хөкүмәте башлығы Михаил Мишустин электрон виза алыу мөмкинлеге булған дәүләттәрҙең исемлеген раҫланы. Рәсәйгә иһә электрон виза буйынса 52 ил граждандары инә ала. Берҙәм виза 2021 йылдың ғинуарынан ғәмәлгә инәсәк. Был исемлектә Катар юҡ, сөнки 23 февралдән алып уның менән визаһыҙ режим ғәмәлдә.**

Хәҙер электрон виза тотош Рәсәй буйынса ғәмәлдә буласаҡ. Сикте махсус йыһазландырылған теләһә ҡайһы пропуск пунктынан үтергә һәм ил буйлап сәйәхәт итергә була. Бынан тыш, сит ил граждандарының Рәсәйҙә булыу ваҡыты 8 көндән 18 көнгә тиклем оҙая. Электрон виза интернет аша туристик, гуманитар һәм ҡунаҡ сәфәрҙәре өсөн тултырыла. Уны алыу өсөн саҡырыу, отелдә бронь алыу йәки сәйәхәт маҡсатын раҫлаған ниндәйҙер башҡа документ кәрәкмәй. Консул йыйымы 40 доллар тәшкил итә. 6 йәшкә тиклемге балаларға виза бушлай эшләнә. Рәсәйгә электрон виза индереү туризмды үҫтереүгә, төбәктәрҙең инвестицион ылыҡтырыуын арттырырға һәм дөйөм иҡтисадтың үҫешенә ярҙам итәсәгенә өмөт уята.

# ЭШҠЫУАРҒА...

**Рәсәй Хөкүмәте "Ваҡ һәм урта эшҡыуарлыҡ" милли проекты паспортын раҫланы.**

Ул бер нисә федераль проектты үҙ эсенә ала, шулар иҫәбендә ваҡ һәм урта эшҡыуарлыҡ өсөн берҙәм цифрлы платформа булдырыу, потенциаль эшҡыуарҙарҙы бизнесҡа ылыҡтырыу проекттары ла бар. Милли проект 2024 йылға ваҡ бизнесҡа 23 млн кешене йәлеп итеү (бығаса күрһәткес - 25 млн) һәм үҙмәшғүлдәр иҫәбен 2,4 млн урынына 2,1 миллионға еткереү маҡсаттарын ҡуя. Әлеге ваҡытта 21,16 млн кеше ваҡ һәм урта эшҡыуарлыҡта, шулар иҫәбендә 1,2 млн - үҙмәшғүлдәр. Яңы ваҡ предприятиелар һаны 2024 йылға 760 меңдән 1,067 миллионға тиклем артырға тейеш. Ул осорға дәүләт һатып алыуҙарын 5 трлн һумға күтәрергә иҫәп тотола. Шул уҡ ваҡытта Федераль һалым хеҙмәтенең Ваҡ һәм урта эшҡыуарлыҡ субъекттары берҙәм реестры килтергән статистикаға ярашлы, 2016 йылдан алып был категория предприятиелар һаны йыл һайын 6-10 процентҡа ҡыҫҡара, былтырғы йылда дөйөм алғанда 2 процентҡа кәмегән.

✓ *Ижад емешебеҙ ноябрь айы баштарына өлгөрөр һәм тамашасыларыбыҙ менән М.Ғафури исемендәге Башҡорт академия драма театрының Кесе залында осрашырбыҙ, тип ышанабыҙ.*



*АФАРИН!*

# ШАЙМОРАТОВҠА...

## ысынбарлыҡ күҙлегенән...



**М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театрында "Шайморатов генерал" исемле документаль тамашаны сәхнәләштереү буйынса эш башланды. Был турала спектаклдең ҡуйыусы режиссеры, Рәсәйҙең һәм Башҡортостандың халыҡ артисы Хөрмәтулла Үтәшев һөйләне.**

- Данлыҡлы 112-се Башҡорт кавалерия дивизияһы командиры, генерал-майор Миңлеғәли Шайморатов тураһында беҙҙең М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театрында быға тиклем дә спектаклдәр ҡуйылғаны булды. Тамашасыларыбыҙ, моғайын, 1998 йылда драматург Флорид Бүләков пьесаһы буйынса сәхнәләштерелгән "Шайморатов генерал" спектаклен хәтерләйҙер. Әммә атамаһынан уҡ күренеүенсә, был билдәле йырҙан алынған һүҙҙәр һәм спектакль генералдың биографияһын, тарихи ысынбарлыҡты сағылдырманы. Тамашасыға 1941-1945 йылдарҙа Бөйөк Ватан һуғышында ҡатнашҡан барлыҡ яугир-геройҙарыбыҙҙың дөйөмләштерелгән образын күрһәтеү төп маҡсат ине. Шулай ҙа үткән быуаттың 60-сы йылдарынан алып 2000 йылдар башына тиклем, тип әйтерлек, Миңлеғәли Шайморатовҡа ҡарашлы бер әҫәр ҙә сәхнәләштерелмәүен иҫәпкә алһаҡ, был тамаша ла насар булманы. Ул хронологик булмаған хәтирәләр рәүешендәге спектакль ине. Шуға ярашлы актерҙарҙың кейемдәре лә көлһыу төҫтә булды һәм беҙгә, ул саҡтағы хәрбиҙәр формаһына кейемдәрегеҙ тап килмәй, тип тә иҫкәрмә яһағайнылар. Ләкин спектаклдең ҡуйыусы төркөмө хәтирәләрҙә генә йәшәгән әруахтарҙы тергеҙеү өсөн аңлы рәүештә шулай эшләгәйне. Шайморатов генерал образы ла йыйылма: ул һынылышлы мәлдәрҙә йәш сағында һөйгән йәренә мөрәжәғәт итеп, кәс туплай, улын белә-күрә ҡатмарлы алышҡа ебәреп, үлемгә дусар итә...

Ә бөгөн беҙ эшләгән спектакль ошонон ҡапма-ҡаршыһы буласаҡ һәм документаль, реаль ысынбарлыҡты сағылдырасаҡ. Театрҙың тәкдиме буйынса сценарийын рәсми документтарға нигеҙләнеп Зөһрә Бураҡаева яҙҙы. Генерал-майорҙың бөтә биографияһын уҡ сағылдырып булмаһа ла, был мөмкин дә түгел, ысынбарлыҡтағы факттар буйынса эшләйбеҙ. Белеүегеҙсә, генерал Миңлеғәли Шайморатовтың яҙмышы буйынса мәғлүмәттәр совет заманында ябыҡ булды. Уның менән бергә дәһшәтле һуғыш михнәттәрен татыған 112-се Башҡорт кавалерия дивизияһы яугирҙарының да генерал тураһында һөйләргә хаҡы булмай, сөнки ул хәбәрһеҙ юғалғандарҙан иҫәпләнде. Ул осорҙа баҫылған китаптарҙа ла, хатта Әхтәм Ихсандың "Сәкмә тояҡ аттарҙа" документаль повесында ла Миңлеғәли Миңһаҗетдин улының шәхесе асылмай. Ә бит ул бик үҙенсәлекле кеше була. Ябай батрак ғаиләһендә тыуып үҫһә лә, үҙенең ныҡышмаллығы арҡаһында Мәскәүҙә тәүҙә Юғары дөйөм хәрби училищела уҡый, унан М.В. Фрунзе исемендәге Хәрби академияны тамамлай һәм ҡытай, инглиз, немец, уйғыр, француз, ҡаҙаҡ телдәрен яҡшы белә. Ҡытайҙа 4 йыл хәрби командировкала йөрөй, хатта Кремль полкы командиры була заманында. Бына ошолар тураһында шәхестең феноменаль яҙмышын өр-яңы күҙлектән асырға ниәтләп, документаль-әҙәби әҫәр әҙерләйбеҙ. Ижад емешебеҙ ноябрь айы баштарына өлгөрөр һәм тамашасыларыбыҙ менән М.Ғафури исемендәге Башҡорт академия драма театрының Кесе залында осрашырбыҙ, тип ышанабыҙ.

Әйткәндәй, спектакль буйынса шулай уҡ Башҡорт академия драма театрының баш рәссамы Альберт Нестеров, йыр-моң бүлеге етәксеһе Урал Иҙелбаев, мөхәррир Динара Ҡәйүмова эшләйәсәк һәм тарихсы Салауат Хәмиҙуллин ҡуйыусы төркөмдөң кәңәшсеһе итеп саҡырылған.

**Сәриә ҒАРИПОВА яҙып алды.**

*СӘНҒӘТ ЯҢЫЛЫҠТАРЫ*

## "БАБИЧ" - ТӨРКИӘЛӘ



**Режиссёр Булат Йосоповтың "Беренсе Республика" картинаһы Халыҡ-ара төрки донъяһы кинофестиваленең конкурс программаһына индерелде. "Беренсе Республика" трилогияһының беренсе фильмы "Бабич" "Тарихи панорама" бүлегендә күрһәтелә.**

2020 йылда Төрки донъяһы кинофестивале 21-25 октябрҙә Истанбулда (Төркиә) уҙғарыла. Төркиәнең сәйәси һәм хәрби эшмәкәре Билге Тоньюкук иҫтәлегенә ойошторолған сара билдәле төрөк йәмәғәт эшмәкәре, яҙыусы һәм журналист Исмаил Гаспралиҙың "Телдә, эштә һәм фекерҙә берләшегеҙ" тигән саҡырыуын лозунг итеп алған. Унда конкурстар, махсус секциялар, панно һәм күргәҙмәләр аша жюри ағзаларына һәм тамашасыларға төрки телле дәүләт һәм республикаларҙың - Саха Республикаһы, Ҡаҙағстан, Молдова, Башҡортостан, Татарстан, Үзбәкстан, Ираҡ һәм Төркмәнстан фильмдары күрһәтелә.

## "УРАЛ БАТЫР" ЭПОСЫНА...



**Фәйзи Ғәскәров исемендәге халыҡ бейеүҙәре ансамбле башҡорт халҡының "Урал батыр" эпосы буйынса мюзикл өсөн номерҙар әҙерләй һәм ошо көндәрҙә журналистар Йәмилә Бикбаева ҡуйған яңы "Һомай" бейеүен ҡараны.**

"Урал батыр" эпосына мөрәжәғәт итеүебеҙ ошо бейеү менән генә тамамланмаясаҡ. Сөнки тап уның аша тарихыбыҙ, халҡыбыҙ тураһында һөйләргә мөмкин. Тағы ла икенсе номер бар - "Ай ҡыҙы", әлегә уның өҫтөндә эш бара, - тип белдерҙе ансамбль директоры Алмаз Сәйетов концерт миҙгелен асыр алдынан уҙғарылған матбуғат конференцияһында. - Бәлки, Фольклориада алдынан быларҙың бөтәһе лә мюзиклға әүерелер. Әлегә улар - айырым номерҙар. Хәҙер Моисеев исемендәге ансамбль дә айырым номерҙарҙан тыш, мюзиклдар ҙа сәхнәләштерә".

Шулай уҡ коллективтың гастроль пландары тураһында ла әйтелде. Мәҫәлән, октябрҙә легендар чечен хореографы Дикалу Музакаевты саҡырып, бер нисә яңы бейеү һалыу планы бар. Ә 2021 йылда Ҡырымға һәм Чечняға гастролгә барыу планлаштырыла. Юл ыңғай коллектив Адыгей Республикаһында яңы адыгей бейеүен дә күрһәтергә йыйына.

*АҠЫЛ-ҠАҘНА*



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

## ЕГЕРМЕЛӘ ЕТЛЕКМӘГӘН...

## иллеһендә өйләнмәҫ

Үҙ күҙендәге бүрәнәне күрмәгән, ил күҙендәге сүпте күргән.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

Булмаған нәмәһе өсөн ҡайғырғандар түгел, ә булғанына шатлана белгәндәр аҡыл эйәһе булыр.

**(Демокрит).**

Байлығы күп булғандар бай түгел, байлыҡты бирә белгәндәр бай.

**(Эрих Фромм).**

Күп ирҙәр ҡатынынан үҙе лайыҡ булмағанды талап итә.

**(Лев Толстой).**

Кеше үҙ-үҙенә ярҙам итмәй тороп, башҡаларға ярҙам итә алмай.

**(Уильям Шекспир).**

Йылдар күпкә өйрәтә, әммә өйрәнгәнде көндәр кире ҡаға.

**(Бенито Гальдес).**

**Шулай итеп, тағы бер аҡыл: "Бер аҡыл эйәһенең алтын менән көпләнгән бик матур һауыты булған. Ул берҙән-бер көндө шулай тип белдергән: "Мин барыбер был һауыт менән файҙаланмайым, шуға ла уны донъялағы иң фәҡир кешегә бүләк итергә теләйем". Шунан һуң уның йортона бик күп фәҡир кешеләр килә, әммә аҡыл эйәһе "Һин донъялағы иң фәҡир түгел" - тип, уларҙың береһенә лә һауытты бирмәй. Уның был ҡылығына барыһы ла аптырай һәм: "Һин был һауытты ысынлап та бирергә уйлайһыңмы, әллә шаярыуың ғынамы?" - тип һорайҙар унан. "Ысынлап та мин был һауытты донъялағы иң фәҡир кешегә бирәм. Миңә килгән был кешеләр иң фәҡирҙәр түгел", - ти аҡыл эйәһе. "Ә нисек була һуң иң фәҡир тигәнең?" - тип һорайҙар унан. "Әйтәм. Донъялағы иң фәҡир кеше - ул беҙҙең батшабыҙ..."**

**Аҡыл эйәһенең был хәбәре батшаға барып ишетелә. Батша бик ныҡ асыулана һәм аҡыл эйәһен үҙенең һарайына саҡыртырға бойора. Аҡыл эйәһе килгәс, батша уны үҙенең байлығы һаҡланған келәткә алып инә һәм: "Һин был келәттә нимә һаҡланғанын беләһеңме?" - тип һорай. "Беләм, - ти аҡыл эйәһе. - Һин бында үҙеңдең алтын-көмөштәреңде һаҡлайһың". "Шуны белә тороп, ниңә һин мине донъялағы иң фәҡир кеше тип мыҫҡыллайһың?" - тип асыуын белдерә батша. Аҡыл эйәһе уға шулай тип яуап бирә: "Эйе, һинең алтын-көмөштәрең келәт тулы. Ләкин һин бит уларҙы үҙең өсөн дә, үҙеңдең халҡың өсөн файҙаланмайһың, улар бер файҙаһыҙға бына ошо келәттә ята. Һинең илең дә, халҡың да бик фәҡир. Шулай булғас, кем иң фәҡир кеше була инде?.."**

"Киске Өфө" гәзитен ойоштороусы:
Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте
Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы №ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

Баш мөхәррир: **Гөлфиә ЯНБАЕВА.**
**Мөхәррирәт:** Сәриә ҒАРИПОВА, Сәрүәр СУРИНА, Зәйтүнә ӘЙЛЕ, Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА, Миләүшә ҠАҺАРМАНОВА, Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы: **450005, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
E-mail: **kiskeufa@mail.ru**
«Печатник» ЯСЙ типографияһында баҫылды (450591, Башҡортостан Республикаһы, Өфө районы, Чесноковка ауылы, Воровский урамы, 32).

**Телефондар:**
Баш мөхәррир 253-25-44
Хәбәрселәр 252-39-99, 246-03-24
Матбуғат таратыу 246-03-23
Ҡул ҡуйыу ваҡыты - 16 октябрь 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте 253-25-44, 246-03-23 телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.
«Киске Өфө»нөң индексы – ПР905
Тиражы - 3007
Заказ - 850/10